МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
ФЕДЕРАЛЬНОЕ ГОСУДАРСТВЕННОЕ БЮДЖЕТНОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ ИМ. М. АКМУЛЛЫ»

**Тагирова С.А., Куланчин А.Ю.,**
**Акбулатова Р.Т., Хабибуллина З.А.**

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК ДЛЯ РЕЛИГИОЗНЫХ УЧЕБНЫХ ЗАВЕДЕНИЙ

**Уфа**
**2019**

УДК 81
ББК 81.63

*Учебное пособие подготовлено в рамках реализации Плана мероприятий по обеспечению подготовки специалистов с углубленным знанием истории и культуры ислама на период с 2017 по 2020 год, утвержденного Распоряжением Правительства Российской Федерации от 18 ноября 2016 г. № 2452-р.*

Тагирова С.А., Куланчин А.Ю.,
Акбулатова Р.Т., Хабибуллина З.А.

Учебное пособие рассчитано на студентов, обучающихся по специальности 47.03.03. «Религиоведение», имеющих значительный словарный запас башкирского языка. Основная задача пособия – системное освоение башкирского языка. В пособии содержатся задания, понятные студенту и отвечающие правилам современного башкирского литературного языка и разговорной речи.

**Рецензенты:**

Рахимова Эльвира Фидаиловна,
к.ф.н., заведующая кафедрой башкирского и других родных языков Института развития образования РБ

Галина Галима Галимьяновна,
к.ф.н., заведующая кафедрой башкирской литературы и культуры БГПУ им. М. Акмуллы

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**ИНЕШ .......................................................................................................4**
**I. ФОНЕТИКА ..........................................................................................5**
**II. ЛЕКСИКА ...........................................................................................9**
**III. МОРФОЛОГИЯ ..................................................................................16**
**IV. СИНТАКСИС.......................................................................................45**
**ДӨЙӨМ КҮНЕГЕҮҘӘР........................................................................59**

# ИНЕШ

Башҡорт телендә Башҡортостанда, Силәбе, Ҡурған, Пермь, Свердловск, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендә йәшәгән халыҡ һөйләшә. Башҡорт теле төрки телдәре төркөмөнә инә, ә төрки телдәре, үҙ иҫәбендә, ҙур урал-алтай телдәре ғаиләһенә ҡарай. Шуға күрә лә башҡорт теле фин, монгол, коми һәм башҡа телдәргә лә ҡәрҙәш булып сыға.

Башҡорт телендә саф төрки һүҙҙәре менән бергә күп кенә ғәрәп һүҙҙәре лә ҡулланыла. Ғәрәп һүҙҙәренең башҡорт теленә килеп инеүе башҡорт халҡының ислам динен ҡабул итеүе менән бәйле. Шуға күрә лә ғәрәп һүҙҙәре дини лексиканың тос өлөшөн тәшкил итә. Бөтә төрки телдәре араһынан башҡорт теленең фонетикаһы ғәрәп өндәренә иң яҡыны булып һанала: тик башҡорт телендә генә *ҫ* һәм *ҙ* өндәре бар.

Һуңғы арала диниә назараттары һәм дин әһелдәре тарафынан тыуған телгә ҡарата иғтибар артты. Мәҫәлән, Татарстан мәсеттәрендә йома хөтбәләре тик татар телендә генә алып барыла. Башҡортостандың күпселек мәсеттәрендә йома хөтбәләре башҡорт һәм татар телендә һөйләнә. Шуға күрә лә буласаҡ имамдарға башҡорт теленең ҡағиҙәләрен, уның диалекттарының үҙенсәлектәрен белеү киләсәктә халыҡ менән эшләүҙә мөһим роль уйнай.

# I. ФОНЕТИКА

Фонетика – өндәрҙе өйрәнеүсе фән. Ул өндәрҙең яһалышын һәм үҙгәрешен тикшерә. Өндәр тартынҡыларға һәм һуҙынҡыларға бүленә. Һуҙынҡы өндәргә *а, о, у, ы, э, е, ә, и, ү* инһә, тартынҡылар түбәндәгеләр: *б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, к, ҡ, л, м, н, ң, п, р, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ.* Шуға ла иғтибар итергә кәрәк: башҡорт теленең өндәр системаһы бөтә төрки телдәр араһында Ҡөрьән теленә (ғәрәп теленә) иң яҡыны. Башҡорт теленә башҡа төрки телдәрҙә булмаған *ҙ* һәм *ҫ* өндәре хас. Шулай уҡ әҙәби ғәрәп телендә булмаған, әммә Ҡөрьән уҡылышында ҡулланылған *ң* өнө үҙенсәлекле булып һанала. Шуға күрә лә Ҡөрьән аяттарын ғәрәп графикаһын белмәгәндәр өсөн башҡорт теленең графикаһында биреү өндәр әйтелешен ысынбарлыҡҡа яҡынайта.

***1-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, башҡорт теленә хас ҡ, ғ, ҫ, ҙ, ң өндәре булған һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙы Ҡөрьәндә осраған һүҙҙәр менән сағыштырығыҙ.***

Әхмәтхан Мөхәмәтлатиф улы Исхаков 1879 йылда Орск ҡалаһында тыуған. Египетта юғары белем алған. Ул 1906 йыл "Шәрек" нәшриәт һәм сауҙа йәмғиәтен ойоштора. Төрлө темаға китаптар сығара, Бейрут, Каир, Стамбул ҡалаларында нәшер ителгән ижтимағи, тарихи һәм дини баҫмалар һата. Мосолман донъяһының ижтимағи-сәйәси тормошонда бик актив ҡатнаша. Икенсе Бөтә Рәсәй мосолман йәмғиәтенең идара ағзаһы, Орск думаһы ағзаһы, Орск өйәҙ земствоһы идараһы ағзаһы, Ырымбур мосолмандарына белем, уҡытыу-тәрбиә биреү йәмғиәте идараһы ағзаһы була. 1917 йылдан һуң хәбәре юҡ.

Унының атаһы Мөхәмәтлатиф Исхаков Бәләбәй өйәҙе Иҫке Ҡалмаш волосы Аблай ауылы башҡорто. Ул 1848 йылды тыуған. Төркиә һәм Египетта белем алып ҡайтҡас, 1875 йылдың 30 ноябрендә Ырымбурҙағы Каруанһарай мәсетенең тәүҙә икенсе муллаһы итеп тәғәйенләнә. Унан һуң Ырымбур губерна идараһының 1876 йылдың 3 июнендәге указы нигеҙендә ул шунда уҡ имам-хатиб һәм мөдәррис итеп тәғәйенләнә. Әммә Мөхәмәтлатиф бында оҙаҡ эшләй алмай, Орск мосолмандарының үтенесе буйынса 1877 йылдың 9 мартында, указ нигеҙендә ҡаланың 1-се мәсетенә 1-се мулла итеп тәғәйенләнә. 1890 йылда уға ахун дәрәжәһе бирелә. Ә 1905 йылдың 6 декабрендә батша Николай II Мөхәмәтлатиф ахунды Станислав таҫмаһына беркетелгән «За усердие» көмөш миҙалы менән бүләкләй. (Ф. Янышев)

***2-се күнегеү. Тиҙәйткестәрҙе уҡығыҙ, тартынҡы өндәрҙең әйтелешенә иғтибар итегеҙ.***

Бөҙрә баш Барый Баймаҡтан ҡайтҡас, билсәнде бөтөрәм тип, баҡсаһына барған. Бөгөлөп-һығылып, бар белемен биреп, билсәнде ботарлай башлаған, бер бөгөлөп, бер эйелеп йөрөй торғас, бахыр Барый билен бөтөргән, билсәнде бөтөрөргә булыш тип, Баныуҙы саҡырған. Барый менән Баныу бөтөрөлөп-бөтөрөлөп билсән утағандар. Билсәнде бөтөрөрлөк булмаған. Бөҙрә баш Барый, бахыр Баныу был тиклем бөтөрөлгәнсе тип, бил яҙлыҡтырырға булған. Барыйҙың да, Баныуҙың да билдәре ҡатҡан, билһеҙ булып былар бөкрәйеп бер сәғәт ятҡан.

Һеҙҙең Зөфәр бөҙрә булһа, беҙҙең Зөһрә лә бөҙрә.

Беҙҙең үгеҙебеҙ үҙебеҙҙеке, мөгөҙө үгеҙебеҙҙеке. Һеҙҙең үгеҙегеҙ үҙегеҙҙекеме, мөгөҙө үгеҙегеҙҙекеме?

Ҡарамалы ауылы ҡара Ҡарағолға сана ҡарамалатырға биргәйнем. Ҡарамаланымы икән, ҡарамаламаны микән. Ҡарамалаһа ла, ҡарамаламаһа ла, ҡарамаламауына, ҡарамалауына ҡарамайынса ҡарап ҡына алып ҡайт әле.

Шакирҙың шары шарт-шорт шартланы, Шакир шуға шаңҡып, шып-шым ғына шаҡ ҡатты.

Һыуыҡ һыу һалҡын була, һыуыҡ килһә, һыу туңа. (И.Ғ. Ғәләүетдиновтың “Балалар фольклоры” китабынан)

- Сингармонизм тип, һүҙҙең тамырында ҡалын йә нәҙек һуҙынҡы булыуына ҡарап, шундай уҡ ялғау өҫтәлеүе атала. Мәҫәлән, *өкө – өкөнөкөлөр, тормош – тормоштоколор*. Шулай уҡ һүҙ үҙе ҡалын әйтелгәндә уға ҡалын, ә йомшаҡ әйтелгәндә уға нәҙек ялғауҙар өҫтәлә: *ҡала – ҡалалар, кәмә – кәмәләр.*

***3-сө күнегеү. Өҙөктән сингармонизм күренешенә миҫалдар табығыҙ.***

Был донъяла кешеләр берҙән-бер аҡыл эйәләре түгелдәр. Аллаһы Тәғәлә беҙҙән тыш тағы ла фәрештәләрҙе һәм ендәрҙе бар иткән. Кешеләр менән ендәрҙән айырмалы рәүештә, фәрештәләр Аллаһы Тәғәләгә бер һүҙһеҙ буйһоналар һәм бер ниндәй ҙә гонаһ эш эшләмәйҙәр. Улар Аллаһы Тәғәләнең әмерҙәрен үтәр өсөн яратылғандар. Мәҫәлән, ҡайһы бер фәрештәләр ямғырҙар менән эш итә, ҡайһылары тауҙарҙы аҫтын өҫкә килтерә ала, ҡайһылары иһә, кеше сүрәтенә инеп, Аллаһы Тәғәләнең әмере буйынса кешеләр менән һөйләшә. Ҡайһылары беҙҙең ҡылған эштәребеҙҙе яҙып ултыралар. Ҡайһы бер фәрештәләр Ҡөрьән уҡып ултырыусыларға

ҡанаттарын һалып, уларҙы хөрмәт итеп тора. Ҡайһылары Ҡиәмәт көнөндә кафырҙарҙы Йәһәннәмгә ташлар өсөн яратылған. Ә ҡайһылары иһә шул Йәһәннәмдең һаҡсылары булып торасаҡ. Фәрештәләр бик күп, уларҙың һанын Аллаһы Тәғәлә генә белә.

Беҙ ҡайһы бер фәрештәләрҙең исемдәрен беләбеҙ. Мәҫәлән, Джәбрәил фәрештәһе, ғәләйһиссәләм. Башҡортса әйтелеше – Ябраил. Аллаһы Тәғәләнән пәйғәмбәрҙәргә вәхи килтереүсе һәм әмер-бойороҡтар еткереүсе фәрештә ул. Шулай уҡ пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡын дуҫы ла. Ябраил фәрештә уға бер нисә сүрәттә күренгән ине. Тағы ла Микәил тигән фәрештә бар. Был фәрештә ямғырҙар менән эш итә. Тағы ла Исрафил тигән фәрештә бар. Ул фәрештә, Ҡиәмәт көнө етһә, борғоға өрәсәк. Әлеге ваҡытта ул, борғоһон ауыҙына алып, Аллаһы Тәғәләнең әмерен көтөп тора.

Әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә өсөн бер ниндәй ҙә ҡыйын эш юҡ. Ул бар эштәрҙе лә бер ниндәй ауырлыҡһыҙ Үҙе генә лә башҡара алыр ине, сөнки Ул бер кемдең дә ярҙамына мохтаж түгел. Аллаһы Тәғәләнең сифаттарының береһе – Әл-Ҡәүүий, йәғни «Көслө». Аллаһы Тәғәлә шулай уҡ Әл-Ғәний, йәғни «Мохтаж булмаған». Аллаһы Тәғәлә: «Бул!» – тиһә, Ул теләгән нәмә буласаҡ. Әммә Ул фәрештәләрҙе барлыҡҡа килтергән һәм уларҙың һәр береһенә билдәле бер эштәр ҡушҡан. Ни өсөн? Фәрештәләрҙе Ул Үҙенең барлығын, берлеген һәм бөйөклөгөн күрһәтер өсөн яратҡан. (“Дин дәрестәре” китабынан)

- Башҡорт телендә баҫым дөйөм һүҙҙәрҙең аҙаҡҡы ижегенә, ә һорау алмаштарында һәм ҡайһы бер ярҙамсы һүҙҙәрҙә беренсе ижеккә төшә.

***4-се күнегеү. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә баҫымды дөрөҫ ҡуйығыҙ.***

Ағинәй менән йәш ҡатын һөйләшеүенән: – **Инәй**, мин бер дуҫыма гел яҡшылыҡ эшләйем, **әммә** ул үҙе һәр саҡ минән генә **ниҙер** көтә, ә үҙенән бер игелек күргәнем юҡ. – Яҡшылығың өсөн ул түгел, ә Аллаһ ҡайтаралыр, тип уйламайһыңмы? **Бәлки,** шул игелектәрең **хаҡына** Аллаһ өлөшөңдө арттырғандыр, **һаулығыңды** нығытҡандыр, бер бәләнән, ҡайғынан ҡотҡарғандыр, яҡындарыңды ҡурсалағандыр. Игелек бер ваҡытта ла юғалмай. Бары тик беҙ уға **ниндәй** бүләк бирелгәнен генә белә алмайбыҙ. Бер ваҡытта ла кешегә, мин һиңә шуны-шуны эшләнем, ә һин... тип үпкә белдермә. Игелекте Аллаһ хаҡына тип эшлә. (Гүзәл Ситдиҡова)

**Тәкдим ителгән әҙәбиәт исемлеге:**

Киекбаев, Дж.Г. Фонетика башкирского языка [Текст] / Дж.Г. Киекбаев. – Уфа, 1958. – 209 с.

Дмитриев, Н.К. Грамматика башкирского языка / Н.К. Дмитриев (переизд.). – М.: Наука, 2007. – 262 с.

Хисамитдинова, Ф.Г. История башкирского языка: Материалы по исторической фонетике: Учеб. пособ. / Ф.Г. Хисамитдинова. Уфа: Башк. пед.универ-т, 1989.– 84 с.

# II. ЛЕКСИКА

Лексика тип телдә булған барлыҡ һүҙҙәрҙең йыйылмаһы атала. Башҡорт теленең лексикаһы башлыса төп төрки һүҙҙәренән һәм шулай уҡ ғәрәп, фарсы һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән тора. Ғәрәп теленән килеп ингән һүҙҙәр башҡорт теле лексикаһының яҡынса 20% тәшкил итә. Ғәрәп һүҙҙәренең үҙләштерелеү процесы башҡорт халҡының ислам динен ҡабул итеүе менән тығыҙ бәйле. Шуға күрә лә башҡорт телендә дини лексиканың күпселеге ғәрәп һүҙҙәре: *имам, хөтбә, мәсет, аҙан, дин* һ.б. Шулай уҡ фарсы һүҙҙәре лә башҡорт теленең дини лексикаһын байыта: *намаҙ, ураҙа, пәйғәмбәр* һ.б. Ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре XIX быуат әҫәрҙәрендә актив ҡулланыла.

***5-се күнегеү. Түбәндә бирелгән шиғырҙа ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙы күсереп алығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.***

Иң әүүәл кәрәк нәмә – иман, тигән,
Ахирәт эштәренә инан, тигән.
“Хоҙай, кисер!” – тигән менән эш бөтмәйҙер,
“Иман шарты”н өйрәнмәһә – Иван, тигән.
Икенсе ҡиммәт нәмә – күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа – күмел, тигән.
Өсөнсө ҡиммәт нәмә – аҡыл, тигән,
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән.
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән.
Дүртенсе ҡиммәт нәмә – шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһөҙлөк – көфөр, тигән.
Ятҡан ерҙән: “Хоҙай, кисер”, – тигән – хурлыҡ,
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.
Бишенсе ҡиммәт нәмә – әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән – мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.
Алтынсы ҡиммәт нәмә – сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
Һәр эштә сабырһыҙҙың төбө – хурлыҡ,

Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән.
Етенсе ҡиммәт нәмә – ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, əҙәп, ихлас – юлдаш, тигән.
Алдыбыҙҙан киткәне юҡ хәүеф-хәтәр,
Был халыҡ, белә тороп, ғафил ятар.
Ғәфләттән уяныу юҡ, оялыу юҡ,
Каруандар үтеп ятыр ҡатар-ҡатар.
Ғибрәттәр күҙ алдында – күреп ятыр,
Ҡулы менән ҡанса әҙәмде күмеп ятыр.
Күп күрҙек ҡәбер ҡаҙған егеттәрҙе –
Араһында уйын-көлкө тулып ятыр.
Ни файҙа аһ орғандан, үлгәндән һуң,
Эш үтеп, гүр ғазабын күргәндән һуң?
Алланан ҡурҡыу тигән ҡайҙа ҡалды,
Зар илар урындарҙа көлгәндән һуң?..
Өҙәме был замандың булды шундай,
Яман холҡо менән халыҡ һис тә уңмай.
Дин яғына һис кем артыҡ күңел ҡуймай,
Донъяға зирәклеге Әфләтундай.
Яҡшылар хаҡтан күңел ауҙырмаған,
Яманға Хоҙай рәхмәт яуҙырмаған.
Белемһеҙ үҙе белмәҫ йүнгә күнмәҫ,
Холҡо – тинтәк һыйырҙай һауҙырмаған.
Иң әүүәл паҡлау кәрәк эстең керен,
Эстә тулып ятмаһын һаҫыҡ эрен.
Аһ, дәриға! Эс таҙарһын, эс таҙарһын!
Булмаһа, файҙа бирмәҫ ҡоро белем.
Белмәгән ҡаҙаҡ та бар, нуғай ҙа бар,
Иң әүүәл ғилеменде уңайлап ал!
Китапты, фәрештәне, пәйғәмбәрҙе
Ҡоро атын белеү менән ни файҙа бар?
Ғилемеңдең емешен күрә алмағас,
“Иман шарты”н күреүҙән ни файҙа бар?..
Әйтәмен өгөт ҡылып ҡаҙаҡ халҡын:
Күңелегеҙ мәғрифәткә шунса һалҡын.
Ҡай сама ғөләмәләр әйтһәләр ҙә,
Боронғо ҡуялмайһыҙ ата салтын.

Һеҙ бикар бер муллаһыҙ ултырмағыҙ,
Өйрәнмәй фарыз, вөжүб, тик тормағыҙ.
Ул мулланың ҡираәте яҡшы булһын,
Күргән, тип, мулла жәләл, ҡотормағыҙ.
Хәлен белмәй, мулламын, тип ҡаңҡаймаһын,
Йәш сабый балаларға ҡатаймаһын.
Был яҡта күп эштәр бар – артын белһен,
Ғәкаид уҡыным, тип ҡаҡаймаһын.
Эҫтәйһегеҙ, уңай күреп, бала мулла,
Күбеһе – ғилем эшендә шала мулла.
“Шәмсиә”нән биш-алты ауыҙ нәмә ятлап,
Аталыр наҙандарға дана мулла.
Ҡанса әйтһәм дә, татлы ҡылып баллағандай,
Хоҙай осон әфсүн уҡып арбағандай,
Үҙегеҙҙең телегеҙсә асыҡ ҡылып,
Балаһы мосолмандың аңлағандай.
Шунда ла һис бер дауа килешмәйҙер:
Ҡолаҡҡа күренәһеҙ алмағандай.
Был әйткәнем китапҡа хилаф түгел –
Һеҙ уйлайһыҙ Аҡмулланы алдағандай.
Телебеҙ шундай татлы, күңел ҡаты,
Юлдашын ҡатындағы ялмағандай.
Донъяға шунса зирәк булды халыҡ –
Күҙ алдында карманынан ҡармағандай.
Атаңдың ауыҙы тигән бер ғәҙәт бар,
Күкрәктә мыҫҡал иман ҡалмағандай.
Ниңә шулай хәүефһеҙ булдыҡ икән,
Донъяныҡы донъялыҡта ҡалмағандай?..
Беҙ бер төрлө халыҡ үлмәгәндәй,
Гүрстанға яңғыҙ баш бармағандай.
Тоғролоҡ был заманда ҡороп ҡалған –
Тура әйтеүсе арт яҡта тороп ҡалған.
Ҡай муллалар халыҡҡа ялғанлайҙар,
Хәйерҙән ҡаламын тип ҡурҡҡандан.
Көсө бар мирзаларға ярамһынып,
Шәриғәтте күңел өсөн бороп һалған.
Бәйләнгән тамаҡ менән телебеҙ бар,
Йылҡысылар муйыныбыҙға ҡороҡ һалған.
Эшебеҙ үҙебеҙгә дәлил булды,

Нисә ергә шайтан тоҙаҡ ҡороп һалған.
Шаһбаздар Ҡаф тауына күсеп киткән,
Урынына ҡоҙғон байғош ҡунып ҡалған.
Һөйәккә һеңгән бидғәт айырылмай,
Йәшенән үк яман ғәҙәт ҡыуып ҡалған.
Бындайын бидғәт эштәр табылалар
Әҙәмһенгән аҡылға тулыҡтарҙан.
Ябраил төшөп әйтһә, күнмәгәндәй,
Ҡара ҡан эсебеҙгә тулып ҡалған.
Дин китһә лә, заң ҡуйырға риза түгел –
Күңелебеҙ шул сәбәптән һыуып ҡалған.
Фидиәһенә өҫтәп бирер арыҡ ҡутыр,
Байғош мулла шул ҡутырҙы көтөп ултыр.
"Инша алла, ошо мал булмаҫмы", – тип
Сығарып ырғытыр бер күҙе һуҡыр.
Ҡуй, йылҡынан өҫтәрҙәр аҡһаҡ-сатан,
Дөйәнән бирә ҡалһа – ҡутыр атан.
Маҡтанырлыҡ ер булғанда, мал аямай,
Тигәндә: “Саҙаҡаға шунса ҡатаң”.
Ынтылып, муллалары үтер алдан,
“Киҫекбаш”, “Ахыр заман” уҡығандан.
Яманын малдан бирер һайлап, өҫтәп,
Теҙгәндәр: ҡутыр арттан, һуҡыр алдан.
Ҡоро ауыҙ менән: “Кисер, Хоҙай”, – тиеп,
Тәүбәне өйрәнгәндәр туҡрандан.
Беҙгә лә бирәме, тип, меҫкен булып,
Истәк мулла тағы ултыра, һуҡранған.
Бәйләгән һыйыр малдан ике мүскә,
Байғош мүскә арыҡлыҡтан торор көскә.
Һарғайып, таң алдынан үлгән мәйет
Күмелмәй, кәңәш менән ҡалыр кискә.
Ҡағынған был заманда буҙ балалар
Харамлыҡ яғына тиҙ ҡуҙғалалар.
Тыйыуһыҙ бит, алдына йөрөп үҫкән,
Имен торһа ярар ине ҡыҙ балалар.
Боҙоҡтар берен-бере ҡолдай икән,
Хыянатын белә тороп ҡорғай икән.
Залимдарға әҙерләнгән йәһәннәм бар –
Хоҙайым был донъяла ормай икән. (Мифтахетдин Аҡмулла)

- Синонимдар тип мәғәнәләре бер-береһенә тап килгән йә яҡын булған һүҙҙәрҙе атаһалар, антонимдар, киреһенсә, мәғәнәләре яғынан бер-береһенә ҡаршы булған һүҙҙәр.

***6-сы күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда синонимдарҙы һәм антонимдарҙы билдәләгеҙ.***

Бына бер нисә көн инде Айгөл ауырый һәм тышҡа сыға алмай. Бер аҙ хәле яҡшырҙы яҡшырыуын, тик әсәһе ятҡан урынынан тороп йөрөргә рөхсәт бирмәй. Тамам йүнәлер өсөн, яҡшы ризыҡланып, күпмелер ваҡыт һаҡланырға, көс йыйырға кәрәк.

Айгөлдөң карауаты тәҙрә янында тора. Көн дауамында ул үтеп йөрөүселәрҙе күҙәтә, китап уҡый, ата-әсәһе менән һөйләшә, ләкин уға күңелһеҙ. Ашағыһы ла килмәй, әхирәттәрен һағына. Шул көндө Айгөлдөң уҡытыусыһы хәлен белергә килде. Быңдай көтөлмәгән хәлгә Айгөл бик ҡыуанды. Уҡытыусыһы, уның маңлайынан үбеп, эргәһенә ултырҙы ла хәлен һорашты. Айгөл, тәмһеҙ дарыуҙарҙы эсеп, урында ғына ятыуҙың бөтөнләй оҡшамауын, тиҙерәк һауығыуына өмөтләнеүен белдерҙе.

Уҡытыусы, ҡыҙҙың башынан һыйпап, сабырлыҡ теләне. Айгөл уйға батты, сөнки уҡытыусы кәңәше уға бигүк оҡшаманы.

– Ниңә Аллаһ сирҙәрҙе барлыҡҡа килтергән һуң? – тине ул.
– Сәләмәтлегеңдең ҡәҙерен белеп, сабыр һәм рәхмәтле булыр өсөн, – тине уҡытыусы йылмайып.
– Нисек инде? – Айгөл аңламаны.

– Айгөл, гүзәлкәйем Айгөл, беҙҙең менән булған хәл-ваҡиғалар беҙҙе нимәгәлер өйрәтер өсөн ул. Сир сәләмәтлегебеҙҙең ҡәҙерен белер өсөн кәрәк. Аслыҡ – аҙыҡ, һыуһау һыу ҡәҙерен белергә өйрәтә. Шуны башыңдан үткәрмәйенсә, уларҙың баһаһын, нимәгә эйә икәнеңде аңламаясаҡһың.

– Һеҙ хаҡлы, уҡытыусым, – тип ризалашырға мәжбүр булды Айгөл, мин, сирләп киткәс кенә, һаулыҡтың ҡәҙерен белдем.

– Афарин, Айгөл, – тине уҡытыусы, ниндәй байлыҡҡа эйә булғаныбыҙҙы белмәйенсә, ысынлап тороп шуларҙы Бар ҡылыусыға рәхмәтле була алмайбыҙ. Был хәлдән һуң һине сәләмәт бала итеп яралтҡан Аллаһҡа нығыраҡ рәхмәтле булырһың, тип уйлайым.

Уҡытыусыһының күҙҙәренә тура ҡарап:

Эйе, һеҙ хаҡлы, – тине Айгөл, – мин быны онотмаясаҡмын. (“Минең гүзәл динем” китабынан)

- Диалектизмдар тип айырым территорияла йәшәгән халыҡ өсөн хас булған һүҙҙәрҙе атайҙар. Башҡорт телендә рәсми рәүештә 3 диалект бар тип иҫәпләнә. Диалект үҙе һөйләштәрҙән тора. Һөйләштәр күберәк йылға исемдәре менән атала: Дим һөйләше, Ҡыҙыл һөйләше һәм Эйек-Һаҡмар һөйләше һ.б.

***7-се күнегеү. Ҡыҙыл һөйләшендә бирелгән тексты уҡығыҙ, был һөйләштең үҙенсәлегенә иғтибар итегеҙ.***

Ҡыҙ биргән кеше биш-алты кешене саҡыра. Иң тәүҙә ҡыҙҙы әйттерәләр. Шунан мал алырға баралар йегеттән. Саҡырыуҙы йомға көнгә тап килтерергә тырышыңҡырайҙар шәт. Саҡырыусыға күлдәк, таһтамал бирәләр. Ҡоҙалар килә. Ҡоҙаларҙы ҡаршы алыу өсөн бәйгесе бара йөрөк атта. Бәйгесе ҡыҙыл сепрәк тағып бара. Ҡаршы барып алған бәйгесене әпкиләләр шәт. Һыйҙаусылар йегелеп, санала ике-өс кеше бара. Кейәү шул көндө килә кис. Эргәһендә кейәү үңәре була. Килгән ҡоҙалар ашам-эсем алып киләләр, йыуаса. Әғәйнеләр ҡатнаша туйға, һәр бер саҡырған кеше ҡабат саҡыра бит инде. Туйҙың ахырғы көнөндә “сыбыртҡы ите” бешерәләр. Берәү һыйҙап бөткәс, сыбыртҡы менән арҡаларына әкрен генә һуға. Арҡа буйына һуғылған ҡунаҡ аҡса һала. Йегет яғына һәҙер ҡыҙ йағынан баралар. Ҡыҙ йағынан барғандар бүләкте һатып бирәләр аҡсаға, һарауыс, йансыҡ, ҡыйбатты таҫмаларҙан ҡушып тегәләр. Аҡса йегет белән ҡыҙға була. (Р. Шәкүрҙең “Башҡорт диалектологияһы” китабынан)

***8-се күнегеү. Дим һөйләшендә бирелгән тексты уҡығыҙ, был һөйләштең фонетик үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ.***

Бай кетеүсеҫенән ҫорай:

– Нейә бы уахытта алып ҡайттың кетеүҙе?

– Бәй, бит йоҡлап киткәм, төш уахытында ҡойаштың байығанын күрҙем, шул төштө йуры, тигән кетеүсе байға. Теге бай йәш кенә булҫа кәрәг инде.

– Йуҡ, мин был төштө йурый алмаймын, мына фәлән йерҙә бер төш йурыусы бар, шунда бар ҫин, – тигән, – ул йурыр. Йарар, был сығып китә, теге төш йурыусыға бара. Төш йурыусы мыңа әйтә: «Бы төшөңнө ҫат миңә, үҙем йуллайым бы төштө», – тей. Йарар, мыңа әйтә: «Үҙемә етәрлек йуллыҡ нейен алам да ҡалғанын бис ҫиңә бирәм дә гитәм». (Р. Шәкүрҙең “Башҡорт диалектологияһы” китабынан)

- Этимология – һүҙҙәрҙең килеп сығышы тураһындағы фән. Был термин грек телендәге этимо(н) “асыл (төп) мәғәнә” һәм логия “һүҙ алып барыу” тигән өлөштәрҙән тора. Этимологияны өйрәнеү телебеҙҙе башҡа яҡтан да аса. Мәҫәлән, *әрәм* һүҙе ғәрәп телендәге *хәрәм* һүҙенән килеп сыҡҡан (һүҙ башында *х* өнө төшөп ҡалған). Белеүебеҙсә, әрәм итеү (исраф) ислам дине күҙлегенән тыйыла. Шуға күрә лә әрәм эшләү шул уҡ хәрәм эшләү тигән мәғәнәне белдерә телебеҙҙә.

***9-сы күнегеү. Түбәндә бирелгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙең этимологияһын уҡығыҙ, уларҙы анализлағыҙ.***

Аҡыл – ғәрәп телендә “ғиҡал” (тышау) һүҙе менән тамырҙаш. Кеше аҡылы менән үҙен нәфсеһенән тышауларға тейеш.

Апельсин – эппл “алма” + син “Ҡытай”. Ҡытай алмаһы.

Бахыр – ғәрәп телендәге *фәкир* һүҙенең фонетик варианты – ф(б)аҡ(х)и(ы)р.

Бисмилла – был һүҙ өс лексик берәмектән тора: би “менән”, исм “исем”, лләһ “аллаһ”, йәғни “Аллаһ исеме менән”.

Ҡамасаулау – был ҡылым “ҡамас” һәм “аулау” һүҙҙәренән тора. Ҡамас – балыҡ һөҙә торған ауҙың бер осо. Балыҡ сығып китмәһен өсөн, был осто һәр ваҡыт аулап торалар, йәғни балыҡҡа ҡамасаулайҙар.

Ҡуҙғалыу – ҡуҙ алыу. Борон кешеләр иртән тороу менән иң беренсе күршенән (йә башҡа кешенән) ҡуҙ алғандар. *ғ* өнө боронғо төшөм килеш ялғауы.

Мин – боронғо дөйөм алтай телендә “би”. Аҙаҡ *б* өнө *м* өнөнә күскән, ә *н* күрһәткесе беренсе заттың берлеген белдерә.

Мәтам (траур) – ғәрәп телендәге “йәтим” һүҙенән. Йәтим ҡалған көн.

Таҫтамал – фарсы теленән: дәст – ҡул, әмәл – яулыҡ.

Сынаяҡ – сын (син) – Ҡытай, аяҡ – һауыт. Ҡытай һауыты.

“Сереү” ҡылымы сир “ауырыу” һәм “итеү” ҡушымтаһынан килеп сыға. Серегән аҙыҡ ашап сирләү борон киң таралған булған.

Юғалыу – юҡ алыу.

## Тәкдим ителгән әҙәбиәт исемлеге:

Баишев, Т.Г. Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку [Текст] / Т.Г. Баишев.– Уфа: Гилем, 2006. –131 с.

Дмитриев, Н.К. Грамматика башкирского языка [Текст] / Н.К. Дмитриев (переизд.). – М. : Наука, 2007. –262 с.

Ишбулатов, Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары[Текст] / Н.Х. Ишбулатов.– Өфө: Китап, 2000. – 210 б.

Шакуров, Р.З. Башкирская диалектология: Учебное издание [Текст] / Р.З. Шакуров. – Уфа: Китап, 2012. – 240 с.

Башҡорт телендә йөрөгән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре / Бейешев Ә. Ғ.; Рәсәй фәндәр акад. Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. – Өфө: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2009. – 140 б.

## III. МОРФОЛОГИЯ

Морфология һүҙҙәрҙең төҙөлөшөн һәм һүҙ төркөмдәрен өйрәнә. Һүҙ төҙөлөшө тип һүҙҙең тамырына ялғауҙар өҫтәлеүе атала. Был ялғауҙар төрлө мәғәнәләрҙе белдерә ала: күплек, килеш, эйәлек һ.б. Башҡорт телендә бөтәһе 6 һүҙ төркөмө бар тип һанала: исем, ҡылым, сифат, алмаш, рәүеш һәм ярҙамсы һүҙҙәр.

***10-сы күнегеү. Тексты уҡығыҙ, һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәренә бүлегеҙ.***

Егет ҡорона тулып барған, ҙур хыялдар менән йәшәгән Мөжәүир менән Ғибаҙуллаға Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡыу баштан уҡ оҡшаны. Был нәҡ улар уҡырға хыялланған мәктәп икән. Дин уҡытып ҡына ҡалмайҙар, донъяуи фәндәргә лә төплө иғтибар бирелә. Дауалауға, табиплыҡҡа, мәғдән серҙәренә, һәр төрлө оҫталыҡҡа ентекле өйрәтәләр. Балта оҫтаһы, тимерселек, балсыҡтан буяуҙар яһау, йәшелсә, емеш-еләк үҫтереү, тәрбиәләү – былар бөтәһе лә тормош өсөн кәрәкле шөғөл мәҙрәсәлә уҡытыла. Кемгә нимә оҡшай, Мөжәүирҙең күңеленә табиплыҡ серенә төшөнөү хуш килә. Ул бында им-том, арбау серҙәренән тыш, үләндәр менән дауалауҙы өйрәнеүгә ентекле туҡтала. Ҡайһы үләнде ҡасан йыйырға, ниндәй сирҙе дауалағанда ҡулланырға кәрәклекте белгәс, шифалы үлән-сәскә эҙләп, йәш Мөжәүир Һаҡмар йылғаһы буйҙарын, туғай-болонлоҡтарҙы гиҙә. Тау итәктәрендә, үҙәктәрҙә була. Ниндәй генә шифалы үлән юҡ икән! Серен белһәң, һәр үлән, һәр сәскә, тамырҙар дауа икән. Хатта аяҡ аҫтында түшәлеп ятҡан бәпкә үләненә тиклем ун төрлө сирҙән килешә, ти. Артышы ни тора! Ҡайыны – хазина! Еләк-емештәрен ни тиерһең? Баланы ҡанынды таҙарта, ҡайын еләген бер туйғансы ашаһаң, йөрәгеңә ҡыш буйы етерлек көс бирә. Үҫмер бында уҡығанда тыуған яғын өйрәнеп, хозурлығына хайран ҡалып, уны мәңгелеккә

яратты. Дауалау һөнәренең байтаҡ серҙәренә Ғабдулла Сәиди хәҙрәт, әлбиттә, медицина фәнен дә һис инҡар итмәй. Әммә табиплыҡ фәне дингә нигеҙләнергә тейеш, тигән фекерҙә ныҡ тора. Дарыу менән генә дауалап булмай торған сирҙәр була, ти. Ҡайһы табиптың нервыһы сирлене, психик ауырыуҙы, быуманы һауыҡтыра алғаны бар? Йә, әйтегеҙ әле? Юҡ бит, юҡ! Шуға күрә ҡайһы бер рәнйеүҙәр (ауырыу) тик им-томға, арбауға, өшкөрөүгә нигеҙләнергә тейеш, ти хәҙрәт. (Лира Яҡшыбыева)

- Күплек ялғауының башҡорт телендә ике төрө бар: *-лар* һәм *-тар.* Шулай уҡ *-тар* ялғауының тағы ла түбәндәге фонетик варианттары ҡулланыла: *-ҙар, -дар*. Бөтә был ялғауҙарҙың да нәҙек варианты бар: *-ләр, -тәр, -ҙәр, -дәр*.

***11-се күнегеү. Текста күплек ялғауҙарын табығыҙ.***

Үҙе имам булған мәсет эргәһендә З. Рәсүлев мосолман уҡыу йорто – “Рәсүлиә” исеме аҫтын да билдәлелек алған мәҙрәсә аса, һәм ул тиҙ арала Рәсәй мосолмандарына белем биреүсе иң яҡшы дини институттарҙың береһе тигән абруй ҡаҙанып, башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ балаларын үҙенә тартып тора. Һуңынаныраҡ француз тарихсыһы Александр Бенигсен, һоҡланыуын йәшермәйенсә, «Рәсүлиә – мосолман донъяһының иң яҡшы академик институттарының береһе», – тип яҙа. Ҡәҙимге мәҙрәсәләр биргән белем менән хуш һынмай, заманса башҡа төрлө белем алыу мөмкинлектәрен эҙләгән мосолмандар араһында урыҫ теле һәм мәҙәниәтенең йоғонтоһо көсәйә барыуы менән борсолған ҡаҙаҡ байы Алтынсарин ошо мәҙрәсәгә матди яҡтан ярҙам итә.

“Рәсүлиә” мәҙрәсәһенең уңышлы эше нигеҙендә яңы педагогик ысулдар ҡулланыу ята. Башҡорттар һәм татарҙар араһында яҙма телгә нисек өйрәтеү – фонетик йә иһә ижекләп уҡыу ысулы менән файҙалыраҡмы, тигән һорау бер быуат буйы айырыуса күп бәхәстәр тыуҙыра (Һүҙ иҫке төрки теле тураһын да). Ошоға ярашлы, яңы ысул яҡлылар «йәҙитселәр», иҫке ысулды ҡулланыусылар – «ҡәҙимселәр», тип йөрөтөлөп, был атамалар бер үк ваҡытта новаторҙарҙы йә консерваторҙарҙы нарыҡлаусы термин рәүешендә ҡулланылған. (Х. Алғар, “Киске “Өфө” гәзитенән)

- Исемдәрҙең эйәлек категорияһы предметтың ҡайһы бер затҡа йәки предметҡа ҡарағанлығын белдерә. Мәҫәлән, *китабым* тигән формала *-ым* ялғауы *минең китабым* тигән мәғәнәне бирә. Был иһә үҙ иҫәбендә ғәрәп телендә булған ҡушма алмаштарҙы (дамир мүттәсилде)

хәтерләтә: *китәби* формаһында аҙаҡкы *и* өнө *минең* тигән мәғәнәне белдерә.

***12-се күнегеү. Текста эйәлек ялғауҙарын табығыҙ.***

Гөлфиәнең өләсәһе уҡытыусы булған. Белмәгәне юҡ. Шуға ла ейәнсәре үҙен һорауҙарға күмеп кенә тора. Бына бөгөн дә:

– Өләсә-ә-әй, ә ни өсөн “Башҡортостан - әүлиәләр иле” тиҙәр? Ә кемдәр һуң улар? – тип һораны.

– Әүлиә тип саф, изге күңелле кешене әйтәләр, ҡыҙым. Улар дин тараҡан, киләсәгебеҙ яҡты булһын өсөн Аллаға ялбарып доға ҡылған. Улар исеменә бәйле ер-һыу атамалары бар. Мәсәлән, Әүлиә, Хәҙрәт, Бәйғәмбәр шишмәһе, тауҙары. Хөсәйенбәк, Торахан һәм Бәндәбикә кәшәнәләре лә изге урындарҙан һанала.

– Өләсәй, Хөсәйенбәк кәшәнәһе тураһында һөйлә әле, - тип үтенде ейәнсәре Гөлфиә.

– Билдәле тарихи архитектура ҡомартҡыһын әйтәһеңме? Ул Шишмә районы Ҡара Яҡуп ауылында урынлашҡан. Ҡыҙғаныска ҡаршы, уның тураһында мәғлүмәттәр күп түгел. Хөсәйенбәк Болғарҙа хәҙрәт булған. Төркөстанда ул ваҡытта ханлыҡ итеүсе изге Хажи Әхмәт Йәсәүи үҙенең шәкерте Хөсәйенбәкте башҡорттарға ебәргән. Ул ислам дине йолаларын, ғибәҙәт ҡылыу тәртиптәрен халыҡҡа еткергән, уларҙың да һөйөүен яулаған, тиҙәр.

1340-сы йылдарҙа Хөсәйенбәк үлгәс, төҙөлә ошо кәшәнә. Үкенескә күрә, уны ваҡыт еле емерә. 1911 йылда ул мосолмандарҙың үҙәк диниә назараты тарафынан ҡайтанан тергеҙелә-тергеҙелеүен. Әммә бер аҙ үҙгәртелә.

– Өләсәй, һинең унда булғаның бармы?

– Булғаным бар, ҡыҙым. Хөсәйенбәк кәшәнәһе – мосолмандарҙың изге урыны һанала. Был хаҡта барыһы ла, бигерәк тә балалар, белергә тейеш. Бөгөнгө көндә кәшәнә урынлашҡан Аҡзыярат дәүләт тарафынан һаҡлана.

– Минең дә Хөсәйенбәк кәшәнәһен барып күргем килә, өләсәй!

– Алла бирһә, әлбиттә, барырһың. Изге урындарҙы белеп үҫеүең бик яҡшы! (Зөбәржәт Аҡбутина, “Аманат” журналынан)

- Һөйләмдә ҡулланылыуына ҡарап исемдәргә төрлө ялғауҙар өҫтәлә. Һүҙҙең махсус ялғауҙар ҡабул итеү күренеше килеш менән үҙгәреш тип атала. Башҡорт телендә алты килеш бар, тип һанала. Төп килештән

тыш бөтә килештәрҙең дә билдәһеҙ (ялғауһыҙ) формаһы бар, әммә эйәлек һәм төшөм килештәрҙең билдәһеҙ формалары телмәрҙә йышырак ҡулланыла: *ҡаланың баҡсаһы – ҡала баҡсаһы, китапты уҡыйым – китап уҡыйым.* Килештәрҙең һорауҙары:

1. Төп килеш: кем? нимә? кемдәр? нимәләр?
2. Эйәлек килеш: кемдең? нимәнең? кемдәрҙең? намәләрҙең?
3. Төбәү килеш: кемгә? нимәгә? кемдәргә? нимәләргә? ҡайҙа?
4. Төшөм килеш: кемде? нимәне? кемдәрҙе? нимәләрҙе?
5. Урын-ваҡыт килеш: кемдә? нимәлә? кемдәрҙә? нимәләрҙә?ҡайҙа?
6. Сығанаҡ килеш: кемдән? нимәнән? кемдәрҙән? нимәләрҙән? ҡайҙан?

***13-сө күнегеү. Тексты уҡығыҙ, төрлө килештәрҙе табып, уларҙы төркөмләп яҙығыҙ.***

Күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе, яҙыусы, шәрҡиәтсе һәм дин әһеле Ризаитдин Фәхретдин (Ризаитдин Фәхретдин улы Фәхретдинов) 1859 йылдың 4 ғинуарында элекке Һамар губернаһы Бөгөлмә өйәҙенең Кисеүат ауылында мулла ғаиләһендә тыуа. Түбәнге шыршылы мәҙрәсәһендә белем алып, Бөгөлмә өйәҙенең Илбәк ауылында мәҙрәсәлә мөҙәрис, хәлфә һәм мулла булып тора. Артабан Ырымбурҙа “Шура” журналының мөхәррире вазифаһын башҡара. 1891 йылда Өфөгә күсеп, Диниә назаратында эшләй башлағас, ғилем серҙәренә нығлабыраҡ тотона. Мәғрифәтсе ғалимдың “Аҫар” исемле күп томлы биографик хеҙмәте айырыуса әһәмиәткә эйә. 1906 – 1918 йылдарҙа Р. Фәхретдин Ырымбурҙа йәшәй, башта “Ваҡыт” гәзите мөхәррире була, аҙаҡ “Шура” журналына баш мөхәррир итеп саҡырыла. 1918 йылда Өфөгә ҡайта. Башта уны ҡазый, бер аҙҙан һуң, 1922 йылда, мөфтөй итеп һайлап ҡуялар. Өфөлә ул ғилми-тарихи эҙләнеүҙәрен, тикшеренеүҙәрен, яҙыусылыҡ эшен дауам итә. Егерменсе йылдарҙың башынан алып ул “Ибн Фаҙландың Болғарға килеүе” исемле бәләкәй китабын, “Аҫар” әҫәренең яңы киҫәктәрен яҙып, баҫырға әҙерләй. Оҙаҡ йылдар буйына тупланған бай архивындағы материалдарҙы тәртипкә һала, бер өлөшөн күсереп, СССР Фәндәр академияһының Көнсығышты өйрәнеү институтына ебәрә.

Рәсәй Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең Ғилми архивында Р. Фәхретдиндең 40 томлыҡ ҡулъяҙмалар коллекцияһы тупланған. Был ҡомартҡылар – рухи мәҙәниәтебеҙ тарихының ҡиммәтле сығанаҡтары. (“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналынан)

- Сифат тип предметтың йә заттың билдәһен аңлатҡан һүҙҙәр атала. Сифаттар ниндәй? ни төҫлө? ҡайһы? ҡасанғы? ҡайҙағы? нимәләге? кемдәге? һорауҙарына яуап була. Улар предметтың күләмен, формаһын төҫөн һәм характерын белдерә.

***14-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда осраған сифаттарҙы табығыҙ, уларҙың һөйләмдә ниндәй синтаксик вазифа башҡарыуын билдәләгеҙ.***

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ хозур тәбиғәтле Уралда үҙҙәренә мәңгелек төйәк тапҡан. Атайсалыбыҙҙа ер тетрәмәй, янартауҙар урғылмай, ғәрәсәт-дауылдар ҡупмай. Төйәгебеҙ иҫ киткес бай: ул емеш-еләге, ҡош-ҡорто, кейек-йәнлеге, балығы, ағасы, файҙалы ҡаҙылмалары – һәммәһен дә һанап бөтөү мөмкин түгел. Тәбиғәт йомарт, ул биргән байлыҡ иҫ китмәле! Беҙҙең гүзәл Башҡортостаныбыҙҙы маҡтап күпме йыр, шиғыр ижад ителгән! Әле бөгөн дә өйрәнелгән ҡалып буйынса беҙ тәбиғәтте ҡыҫҡырып маҡтайбыҙ, шиғырҙар, мәҡәләләр яҙабыҙ. Ә ысынлабыраҡ ҡараһаң, тәбиғәтебеҙ күптән инде элекке ҡупшылығын юғалтҡан: урмандарыбыҙ аяуһыҙ ҡырҡыла, үләндәр тапала, йылға-күлдәребеҙ һайыға, инеш-шишмәләребеҙ ҡороп, юҡҡа сыға бара. Бөгөн беҙҙең бай төйәгебеҙгә генә түгел, ә бөтә кешелек донъяһына ҡурҡыныс хәүеф-экологик һәләкәт янай! Беҙҙең Башҡортостанда 6 миллион гектар ерҙе урман биләһә, һәр сәғәт һайын 20 гектар урман юҡҡа сыға бара. Ә бер кешенең ғүмере өсөн 200-ҙән ашыу төп ағас кәрәклеге иҫәпләп сығарылған. Бер гектар урман һауанан 2 тонна ағыулы газды йота, 10 кубометр һауаны сафландыра. Тәбиғәттә бөтә нәмә лә бер-береһенә бәйләнгән. Һаҙлыҡтар кибә икән, бөжәктәр, серәкәйҙәр ҙә бөтә, уларҙың кәмеүе ҡоштарҙың аҙайыуына килтерә. Ҡоштарҙың аҙайыуы ағастар, үҫемлектәр яҙмышына йоғонто яһай. Тәбиғәттә бер нәмә лә артыҡ түгел, ул үҙе яралта, үҫтерә, артығын бөтөрә. Кеше “тәбиғәт батшаһы” булып, еребеҙҙең киләсәк яҙмышына бик ҙур зыян килтергән. Тап уның ғәйебе менән бик күп үҫемлек һәм хайуан төрҙәре юҡҡа сыҡҡан. (“Йәшлек” гәзитенән, З. Кашапова)

- Башҡорт телендә сифаттар, башҡа телдәрҙә кеүек, ике төркөмгә бүленә: төп һәм шарт. Төп сифаттар предметтың билдәһен аңлата: *аҡ, матур, оҙон, йәш*. Улар дәрәжә менән үҙгәрә: ағыраҡ, матурыраҡ. Шартлы сифаттар исемгә ялғау өҫтәү юлы менән барлыҡҡа килә: *көҙгө көн*. Улар дәрәжә ялғауҙары менән үҙгәрмәй.

***15-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, ундағы төп һәм шартлы сифаттарҙы табығыҙ.***

Ислам динен ата-бабаларыбыҙ 1500 йыл әүәл ҡабул иткән. Хәҙер диндә төрлө яҡҡа тартҡылашыуҙар, ата-бабаларыбыҙ һайлаған юлдан тайпылыуҙар ҙа күҙәтелә. Аҡмулла бер шиғырында тиккә былай тип оран һалмаған: “...Мәсет һал, көсөң етһә, ил халҡына...” Ошо шиғырҙа йәнә: “Үҙең бер тапалған сыҡма юлдан”, – тигән һүҙҙәр ҙә бар. Изге эштәргә өндәй шағирыбыҙ. Тапалған, ата-бабаларыбыҙ һайлап алған юлда йөрөһәк, аҙашмабыҙ. Исламдың меңәр йыллыҡ тапалған юлы бар. Сит илдәр Рәсәйҙе тарҡатыу маҡсатында аҫтыртын эш алып бара, кем тапалған юлдан сыға – аҙашыуға бара, яңылыша. Граждандар никахы, эсеү-тартыу, наркотиктар ҡулланыу ҙа ана шул тоғро юлдан тайпылыуға инә. Төнгө клубтар, әҙәпһеҙ-әхлаҡһыҙ тапшырыуҙар, кино ла йәш быуынды аҙҙырыуға, юлдан яҙҙырыуға ҡоролған.

Ислам – йәшәү рәүеше, Алла беҙгә биргән ниғмәт. Исламда фекер йөрөтөүгә ҙур иғтибар бүленә. Хатта ғибәҙәттә лә миҡдар бар. Алла беҙгә ғүмер биргән, үҙебеҙ өҫтөндә ниндәйҙер тәжрибә үткәрергә ваҡыт юҡ. Араҡы, тәмәкегә, наркотикка өйрәнгән кеше уларҙан еңел генә ҡотола алмай. Ҡуйынығыҙҙан яңы сыҡҡан балаларығыҙ ҙур ҡалаға китеп, дингә килгән, тип алдан ҡыуанмағыҙ – берәй ағымға, сектаға эләгеп, харап булмаһын. Ислам – дәүләтселектең нигеҙе. Бөгөн район хакимиәте башлығын тыңлап, ҡарап йөрөйөм дә, пенсияға сыҡһа, имам итеп ҡуйырлыҡ тим – ололарға ололоҡло, кесегә кеселекле. Юҡҡа ғына халҡыбыҙ: “Йылы һөйләһәң, йылан өңөнән сығыр, ҡаты һөйләһәң, ҡатының ҡуйыныңдан сығыр”, – тимәгән. Ғаиләлә лә йомшаҡ телле булыу шарт. Алла телде ауыҙ эсенә – эскә ҡуйған, юғиһә әллә нәмәләр ҡуптарып бөтөр ине. Бәйғәмбәребеҙ: ”Һаҡ булығыҙ: кешене йөҙө менән йәһәннәмгә илтеүсе ағза – тел”, – тигән. Бөгөн илде битарафлыҡ баҫып бара. Хатта телебеҙгә битарафбыҙ – Алла биргән ниғмәткә шөкөр итмәй, русса һөйләшеп маташабыҙ. Тел булһа, ер ҙә, ил дә, рух та һаҡланыр, иншалла”. (А. Ғарифуллина, “Йәшлек” гәзитенән)

- Һан кешеләрҙең һәм предметтарҙың иҫәбен, уларҙың һаналыуын белдерә. Был һүҙ төркөмө *нисә? күпме? нисәне? нисәшәр? күпмешәр?* һорауҙарына яуап бирә.

***16-сы күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда осраған һандарҙы табығыҙ, үҙенсәлектәренә иғтибар итегеҙ.***

Мөхәмәтйәр Мөхәмәтшәрип улы Солтанов 1837 йылда билдәле башҡорт дворяндар династияһы Солтановтар ғаиләһендә донъяға килә. Был династия вәкилдәре революцияға тиклем Ҡаҙан даругаһының Бүләр улысында йәшәй. Ғабйәлил исемле ата-бабалары Солтанов фамилияһын башлап ебәреүсе була. Ул XVIII быуаттың икенсе яртыһында йәшәй. Ғабйәлил 1771-1772 йылдарҙа Польшаға походта ҡатнаша, унан ҡайтҡас, йорт старшинаһы, поручик вазифаларын үтәй. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы һәм башҡорт ихтилалы барышында хөкүмәткә тоғролоғон һаҡлап ҡала. Баш күтәреүселәр уны ҡулға ала, ләкин иҫән ҡалдыра. 1798 йылда Башҡортостанда кантон системаһы индерелгәс, ул XI Башҡорт кантонының башлығы итеп тәғәйенләнә. Ғөмүмән, был династиянан бик күп старшиналар, кантондар, хәрби һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре сыға. Искәндәрбәк Солтанов Граждандар һуғышы йылдарында милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнаша, кесе ҡоролтай ағзаһы була, ә ошо уҡ тамырҙан булған Мансур (Мөхәмәтмансур) Солтанов Мәскәү консерваторияһын тамамлап, башҡорттар араһында беренсе профессиональ музыкант була.

Мөхәмәтйәр Солтанов ошо династияға ҡараған һуңғы быуын вәкилдәренең береһе була, тиергә мөмкин. Ул 1837 йылда донъяға килә. 1856 йылда Ҡаҙан гимназияһын уңышлы тамамлай. Донъяуи ғилемде, классик телдәрҙе, урыҫ телен яҡшы үҙләштерә, Көнбайыш һәм Көнсығыш әҙәбиәте буйынса ла ғилем ала. Гимназияны тамамлағандан һуң, Ҡаҙан университетына уҡырға инә, ләкин ауырыу сәбәпле, уны ҡалдырырға мәжбүр була. Ул ҡабаттан Минзәлә өйәҙенә ҡайтып, хәрби хеҙмәткә керә. 1857-1859 йылдарҙа Башҡорт ғәскәре командующийының һыҙмасыһы булып эшләй. Ике йыл хеҙмәттән һуң зауряд-хорунжий чинын ала. 1861-1863 йылдарҙа 20-се башҡорт кантоны башлығы вазифаһына үрләтелә. Ә 1863 йылда Минзәлә өйәҙенең 7-се кантонына кантон ярҙамсыһы итеп күсерелә. 1866 йылда хәрби хеҙмәт мөҙҙәтен тултырып, подпоручик чинында отставкаға сыға. Хәрби хеҙмәттән киткәс, 1866 йылда, Минзәлә өйәҙендә мировой посредник итеп тәғәйенләнә, аҙағыраҡ ошо вазифаны Бәләбәй өйәҙендә лә дауам итә. Бер аҙҙан мировой судья итеп һайлана. Ғәҙел мировой посредник, мировой судья булараҡ, Мөхәмәтйәр Солтанов халыҡ араһында ла, түрәләр ҡаршыһында ла ҙур абруй яулай, уға мөһим эштәрҙе хәл итеү яуаплылығы йөкмәтелә.

1885 йылдың ғинуарында Ырымбур Диниә назаратының рәйесе мөфтөй Сәлимгәрәй Тевкелев вафат була. Мөфтөй вазифаһына Ҡаҙан, Ырымбур

ғалимдары, мосолман сауҙагәрҙәре, дәүләт эшмәкәрҙәре үҙ кешеләрен тәҡдим итә. Эске эштәр министры граф Д. Толстой император Александр III яҙған хатында: "Замещение этой должности представляется затруднительный ввиду недостатка кандидатов, которые при отсуствии мусульманского фанатизма обладали бы достаточным общим образованием, достаточным знанием русского языка, деловитыми способностями и были вместе с тем преданными и верными исполнителями предначертаний правительства", - ти. Оҙаҡ һайланғандан һуң ике кандидатура тороп ҡала һәм улар Рәсәй эске эштәр министрлығына тәҡдим ителә. Иң лайыҡлыһы һәм кәрәкле талаптарға яуап биреүсе тип Мөхәмәтйәр Солтанов табыла. Шул ваҡыттағы юғары вазифалы кешеләр араһында алып барылған эшлекле хат алышыуҙарҙан күренеүенсә, был вазифа дәүләт өсөн бик тә әһәмиәтле була. Мөхәмәтйәр Солтанов өсөн тауыш биргән христиан миссионеры Ильминский мәғариф министры Победоносцевҡа яҙған хатында: "Пусть он знает свое относительное положение перед архиреем, но пусть сам знает, а не доводит до крайности такой, чтобы правительство вынуждено напоминать забывшемуся иноверному представителю его пределы и права", - ти. Күренеүенсә, мосолман дин әһелдәренең хоҡуҡтары дәүләттә өҫтөнлөк иткән дин руханиҙарына ҡарағанда әҙерәк була. Шулай итеп, Мөхәмәтйәр Солтанов Александр III тарафынан Мосолмандар Диниә назаратының бишенсе мөфтөйө итеп һайлана. Шул уҡ йылдың февраль айында ант килтереп, эшкә тотона. Рәсәйҙең иң бай татар ғаиләләренең береһенә ҡараған алдағы мөфтөй Тевкелевтан айырмалы рәүештә, Солтанов матди яҡтан ул тиклем үк хәлле булмай. Шуға күрә лә ул туғыҙ баланан торған ҙур ғаиләне аҫырар өсөн урындағы һәм Петербургтағы властарҙан аҡса һорарға мәжбүр була. Уның мөрәжәғәттәре яуапһыҙ ҡалмай, дауаланыу, хаж ҡылыу, төрлө ерҙәргә йөрөү, балаларҙы уҡытыуға ярҙам өсөн мөфтөйгә пособиелар тәғәйенләнә. Ә Мөхәмәтйәр Солтановтың улына император Николай II указы менән Ырымбурҙағы кадет корпусына ҡаҙна иҫәбенә уҡырға инергә рөхсәт бирелә. Шуны ла билдәләргә кәрәк: Мөхәмәтйәр Солтанов донъяуи белем буйынса арыу ғына уңыштарға өлгәшһә лә, дин ғилеме унда самалы була. Шуға күрә лә, эшкә тотонғас та ҡазыйҙарға, мөхтәсиптәргә, дуҫ-иш ахундарына ныҡ таяна. Тик ғәрәп телен, Ҡөрьәнде тәфсирләй белмәүе генә бәкәленә һуға. Уға ҡайһы бер кешеләрҙән дәһри, дини наҙан тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә.

М. Солтанов мөфтөй булып эшләй башлаған осорҙа мөфтөйҙәр дини лидер, юғары дәрәжәле рухани ролен үтәмәйенсә, асылда, батша тарафынан тәғәйенләнгән, Рәсәй империяһына тоғро хеҙмәт итер түрәгә әйләнер була. Мөхәмәтйәр Солтанов оло түрәләрҙең дә ышанысын юғалтмаҫҡа, үҙ

мосолмандарының да хәтерен ҡалдырмаҫҡа тырыша. XIX быуаттың һуңғы сирегендә мосолмандарҙың дин, мәғариф өлкәһендәге ҡәҙимселәр менән йәҙиттәр тигән төркөмдәре араһында көрәш-тартыштар ҡыҙып киткән осорҙа ла Солтанов ике яҡтың береһенә лә ҡаты бәрелмәй, шул уҡ ваҡытта йәҙитселәрҙе күңеле менән хуплай. Ул 1893 йылда хаж ғибәҙәтен үтәргә тип биш ярҙамсыһы менән бергә Мәккәгә йүнәлә. Хажиҙарҙың юлдары Ғосман империяһының баш ҡалаһы Стамбул аша үтә. Бында Мөхәмәтйәр Солтановты төрөк солтаны Ғәбделхәмид үҙ резиденцияһында ҡабул итә. Ғосман императоры Рәсәйгә һәм уның мосолмандары мөфтөйөнә хөрмәт йөҙөнән Солтановты Ғосманиә ордены менән бүләкләй һәм, Рәсәй мосолмандарына, тип, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәс бөртөгөн бирә (был сәс бөртөгө бөгөн дә Туҡай урамында урынлашҡан Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назаратында һаҡлана). Мөхәмәтйәр Солтанов мосолман донъяһында, Рәсәй кимәлендә Диниә назаратының абруйын күтәреү буйынса байтаҡ эштәр башҡара. Назараттың үҙ эске эштәрен тулыһынса тәртипкә һала, архив фондын, бай китапханаһын барлыҡҡа килтерә. Рәсәй мосолман төбәктәре менән танышыу өсөн Санкт-Петербург, Мәскәү, Ҡаҙан ҡалаларынан алып Ырымбур, Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Омск, Төмән, Троицк ҡалаларынаса бер нисә ҡат йөрөп сыға. Ахун-имамдар менән генә түгел, ғалим-ғөләмәләр менән дә тығыҙ бәйләнеш урынлаштыра. Рәсәй Министрҙар Кабинеты рәйесе тәҡдиме буйынса 1905 йылдың 10 апрелендә Өфөлә ахун һәм имамдарҙан торған ҡырҡҡа яҡын вәкилде саҡырып, Диниә назаратының мәжлесен, ҡоролтайын үткәрә. Өфөләге был дини мәжлес 15 апрелгә тиклем һуҙылып, Рәсәй хөкүмәтенә мөрәжәғәт ҡабул итә. Унда Рәсәй мосолмандарының дини, донъяуи, хоҡуҡи мәсьәләләре, мәктәп, мәҙрәсәләр, мәғариф, матбуғат өлкәһе буйынса реформалар, рухи талаптарентекле бәйән ителә. Мөфтөй Солтанов Диниә назараты эргәһендәге "Мәғлүмәт" журналына нигеҙ һала. Өфөлә "Ғәлиә" мәҙрәсәһе асылыуға фатихаһын биреп кенә ҡалмай, уның эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнаша. 1914 йылда Солтановтың мөфтөй булып эшләүенә 25, дәүләт хеҙмәтендә тороуона 50 йыл тулыу айҡанлы, Өфөлә ирҙәр өсөн уҡытыусылар әҙерләү институты асыу хаҡында ҡарар сығарыла. "Солтаниә" тип аталған уҡыу йортоноң мөҙҙәте 6 йыл булып, унда дини һәм донъяуи ғилемдәр, туған тел, урыҫ һәм көнсығыш телдәрен өйрәнеүгә иғтибар бирелергә тейеш була. Математика, педагогика, тарих дәрестәре лә үҙәктә тора. Мөфтөй был ниәтте бойомға ашырыу өсөн күп көс һала, ләкин Беренсе донъя һуғышы башланып китеүе, киләһе йылында Мөхәмәтйәр Солтановтың вафат булып ҡалыуы сәбәпле, был мөһим проект тормошҡа ашмай ҡала. Йомғаҡлап әйткәндә, Мөхәмәтйәр Солтанов заманына күрә зыялы, билдәле, абруйлы шәхестәребеҙҙең береһе

була. Ул Туҡай урамында урынлашҡан Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Diниә назараты мәсете янында ерләнгән. (Азамат Салауатов, “Киске Өфө” гәзитенән)

***17-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда осраған һандарҙы төркөмдәргә бүлегеҙ.***

Башҡорт халҡының Беренсе Ватан һуғышында ҡатнашыу тарихына килгәндә, нисек кенә парадоксаль булмаһын, беҙ түбәндәге һығымтаға килергә тейеш булабыҙ: һуғышта урыҫтарҙан ҡала иң күп ҡатнашҡан һәм иң ныҡ һуғышҡан халыҡ ул – башҡорттар. Рәсәйҙең азатлығын яҡлауҙа башҡа бер генә халыҡтың да шул тиклем көс сарыф итеүен, иҫ китерлек батырлыҡ өлгөләре күрһәтеүен тарих белмәй. Был хәл иткес хәрби ярҙамда беҙҙең төбәк халҡының да өлөшө ҙур булған, шуның өсөн ул темаға ныҒыраҡ туҡталып китәйек: Ырымбур губернияһы фронтҡа барлығы 45 полк оҙата, шуның 28-е башҡорт полктары, 2 типтәр, 2 мишәр полкы, ҡалғандары – рус казактарынан төҙөлгән полктар. Уларҙан тыш Өфө ҡалаһы 1 полк төҙөп оҙата. Ошо 28 башҡорт полкында (28 х 530 = 14840) яугир була. Бынан тыш, тыныс ваҡыттағыса 12000 башҡорт кавалерисы Ырымбур сик буйы һыҙығында хеҙмәтен дауам итә. Йәғни, башҡорт халҡы үҙенең иң батыр, иң көслө 27 мең ир-егеттең һәр береһенә 2–4-әр ат табып бирә, бынан тыш үҙ иҫәбенә кейендерә, ҡоралландыра. Икенсе төрлө әйткәндә, был һәр бер йорттан бер ир-егет хеҙмәткә алынған тигән һүҙ. Бындай әүҙемлек урыҫ халҡының үҙендә лә булмаған хатта. Тағы шуныһы: башҡорт ғәскәрен кейендереп, ҡоралландырыуға батша властары бер тин аҡса ла бирмәгән. Киреһенсә, һуғыш башланыуға 2 ай ҙа үтмәй, Ырымбур губернияһында йәшәгән башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр йәмғеһе 500 мең һум аҡса йыйып, хәрәкәт итеүсе армияға ярҙамға иғәнә итеп тапшыралар. (Губернияла йәшәгән урыҫ крәҫтиәндәре һан яғынан башҡорттарҙан әллә ни кәм булмаһалар ҙа, тормоштары етешерәк, мулыраҡ булһа ла, уларҙың был иғәнәләге өлөштәре – 60 мең һум ғына тәшкил итә). (Ә. Зарипов)

***18-се күнегеү. Текстан цифр менән бирелгән һандарҙы һүҙҙәр менән яҙығыҙ, уларҙың морфологик үҙенсәлеген билдәләгеҙ.***

Башҡорт ғәскәрҙәре 1918 йылдың июнендә аҡтар яғында Башҡорт хөкүмәтенең ҡарары буйынса ойошторола. Бының өсөн Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге янында махсус Башҡорт хәрби советы булдырыла. Ул Башҡорт ғәскәренең штабы тип тә аталып йөрөтөлә. Аҡтар яғында

Башҡорт хөкүмәте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 8 полк ойоштороуға өлгәшә. 1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары Айырым Башҡорт корпусына берләштерелә.

Ислам дине башҡорт ғәскәрҙәрендә ҙур урын биләй. Аҡтар яғында улар милли ғәскәр генә түгел, ә мосолман ғәскәре булараҡ та кәүҙәләнеш ала. 1-се Башҡорт полкы ойошторолоу менән Башҡорт хөкүмәте 1918 йылдың 14 июнендә үҙенең фарманы менән милли атрибутика индерә. Был фарманға ярашлы башҡорт яугирҙары алты ҡырлы ҡалҡан рәүешендәге күк шеврон тағып йөрөй. Унда полктың номеры һәм айырыу билдәләренән тыш мосолман символикаһы ярым ай менән йондоҙ һүрәтләнгән була.

1918 йылдың 28 авгусында Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрҙәре өсөн дөйөм униформа эшләй. Унда ла ярым ай менән йондоҙ билдәһе башҡорт һалдаттары таҡҡан шеврондарҙа урын ала. Екатеринбург ҡалаһын большевиктарҙан азат итеүҙә ҡатнашҡан 2-се Башҡорт пехота полкына ҡала халҡы тарафынан бүләк ителгән байраҡты ла мосолман билдәһе – ярым ай менән йондоҙ биҙәй. Башҡорт ғәскәренең мисәттәрендә лә ошо уҡ символика тора.

Ислам дине башҡорт армияһында тышҡы атрибуттар кимәлендә генә түгел, милли мосолман ғәскәрендәге кеүек урын биләй. Автономия етәкселеге был мәсьәләгә ҙур иғтибар бирә. 1918 йылдың авгусында Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән ғәскәрҙәрҙә полк һәм дивизия муллалары вазифаһы булдырыла. Һуғыш шарттарында муллалар мосолман йолаларын атҡарыу бурысы һалына: һәләк булған яугирҙарҙы йыназа уҡып ерләү, йома һәм байрам намаҙҙары үткәреү һ.б. 2-се Башҡорт пехота полкының муллаһы итеп күренекле башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре Нуриағзәм Таһиров тәғәйенләнә, ул октябрь айынан бер үк ваҡытта дивизия муллаһы вазифаһын да башҡара.

Башҡорт ғәскәрҙәрендә күнегеүҙәр графигы ла дини йолаларҙы атҡарыуға яраҡлаштырып үҙгәртелә. Йәкшәмбе көнөнән тыш, башҡорт полктарында йома көнөндә сәғәт 14.00 тиклем, йәғни полк муллалары йома намаҙы үткәргәнгә тиклем бөтә дәрес, күнегеүҙәр үткәрелмәй. (А. Ярмуллин)

- Һөйләмдә башҡа һүҙ төркөмдәре урынында килгән махсус һүҙҙәр алмаш тип атала. Зат алмаштары: 1-се зат – мин, беҙ; 2-се зат – һин, һеҙ; 3-сө зат – ул, улар. Күрһәтеү алмаштары: был, теге, шул, ошо, ул, бынау, анау. Һорау алмаштары: кем, нимә, ни, ҡайһылай, ҡайһынығы,нисә, нисәнсе, нисәшәр, нисәләп, нисек, ҡайҙа, ниндәй, ҡалай,күпме, ҡасан. Билдәләү алмаштары: һәр, үҙ, һәр кем, һәр бер,

бөтә, бөтәһе, көллө, көллөһө, һәммәһе. Билдәһеҙлек алмаштары: әллә кем, әллә нәмә, әллә ни, әлләниндәй, әллә нисек, әллә ҡасан, ҡасандыр, ҡайҙалыр, әллә ҡайҙа, кемдер, нимәлер, нисектер, ҡайһы бер, бәғзе, теләһә кем. Юҡлыҡ алмаштары: һис кем, һис нимә, һис ниндәй, һис нисек, һис ҡасан, һис ҡайҙа, һис бер, һис ни; бер ҙә, бер нәмә лә, беркем дә; бер кем, бер нәмә, бер ни.

***19-сы күнегеү. Текста ҡулланылған алмаштарҙы табығыҙ, уларҙы төркөмдәргә бүлегеҙ.***

Мин – Аҙнаның Йома көнө. Бөтөн туғандарым менән дуҫ, татыу йәшәйем. Үҙегеҙ беләһегеҙ инде, Дүшәмбе Аҙнаны башлап ебәрә. Өлкәндәр Шәмбе һәм Йәкшәмбелә ял итә. Ҡалған көндәр хеҙмәт көнө тип атала. Мин дә – хеҙмәт көнө. Әммә бүтән туғандарымдан айырмам бар. Ер йөҙөндәге бөтөн мосолман өсөн мин – байрам көнө. Дини календарь буйынса Кесаҙна көнөндә ҡояш байығас башланам мин. Төн килә, артабан – таң ата һәм көн тыуа. Көн тамамланыу менән тәүлек тамамлана, йәғни Шәмбе башлана. Минең исемем дә матур, шулай бит? Ул ғәрәпсә «джәмаға» һүҙенән алынған. Джәмаға – бер ергә йыйылыу тигәнде аңлата. Үҙегеҙ ҙә бик яҡшы беләһегеҙ инде, ҡәҙерле дуҫтарым, Йома көнөнә өлкәндәр алдан әҙерләнә. Йыуыналар, өйҙө йыйыштыралар. Көн тыуғас, матур кейем кейеп, мәсеткә йыйылалар. Йома намаҙы уҡыйҙар. Йома намаҙы бик сауаплы. Уны уҡырға барған кешенең аҙымы һайын гонаһы түгелә, төшөп ҡала бара. Әйткәнемсә, мин – изге көн, иң дәрәжәле көн. Күк йөҙө болот менән ҡапланғанда ла, ҡояш күренеп, мәсет манараһын балҡытып алыусан.

Мин, Йома, шуға бик шатланам: өлкәндәр минең хөрмәтемә байрам табыны ҡоралар. Кескәйҙәрҙе, өләсәй-олатайҙарҙы тәмле ризыҡтар менән һыйлайҙар. Бөтәһе лә изгелек, яҡшылыҡ тураһында ғына һөйләшә. Бер-береһенә изге теләктәр теләй кешеләр. Мин, ҡәҙерле дуҫтарым, һеҙгә гел бәхет, шатлыҡ ҡына теләйем. (Ф. Туғыҙбаева)

***20-се күнегеү. Текста бирелгән алмаштарҙы табығыҙ, уларҙың килеш менән үҙгәрешенә иғтибар итегеҙ.***

Башҡорттар теге йәки был кешененең үҙенең ырыуы йәки ҡәбиләһенә яҡынлығын йыш ҡына уларҙың бер үк ырыуҙың ишанының мөриттәре булыуы-булмауына ҡарап билдәләгәндәр. 1755 йылғы ихтилалға әҙерлек ваҡытында булған һәм Батырша мулла тарафынан һүрәтләнгән осрашыу

ошоно туранан-тура раҫлай. Батырша Бөрйән башҡорттары менән осраша. Унан иң беренсе унан кемдә уҡыуын һорайҙар. Был унының кемдең кешеһе – "беҙҙекеме", әллә "беҙҙеке түгелме", үҙ кешеме, әллә ситме икәнен белергә теләүҙе аңлата. Батырша былай тип яҙа: "Улар араһынан ике – оло, ике урта йәштәрҙәге кеше, ҡул бирешеп, сәләмләшкәндән һуң: "Һеҙ кем булаһығыҙ?" – тип һораны. – "Минең исемем Ғәли" – тип яуапланым. – "Ҡайһы мөдәристең мәҙрәсәһендә уҡынығыҙ?" – тине улар." (А. Юнысова)

***21-се күнегеү. Текста ҡулланылған һорау алмаштарын табығыҙ.***

Ҡайҙа нимә аунап ятҡанын да аңламаҫлыҡ, эскеселәр һаҫығы сығып торған тығырыҡ ҡына йорт эсендә, яҙҙан уҡ яғылмаһа ла йәй уртаһына тиклем ятҡан утындан ҡойолоп ҡалған ҡайыры-ҡойоро, тапсыҡтар өҫтөнә ташлап ҡуйылған һәләмә араһына килеп төшөп, тәүге ауазын һалды сабый.

- Йәнә бер бәхетһеҙ донъяға килде, - тине уның кендеген киҫеп, оҙонса тас өҫтөндә ауыҙынан ғына һыу ағыҙып сайындырып, иҫке итәккә төргән әбей. Аңлай, һөйләшә белһә, "ниңә улай тинең", тип һорар ине бала, ә әлегә йылы булһын өсөн өләсәһенең ауыҙынан сығарып ҡаптырылған аҡ май менән балды ирендәрен сәпелдәтә-сәпелдәтә һурыуын белде.

Бер аҙҙан ишек асылып, сайҡала-сайҡала ир кеше килеп инде, алам-һалам араһында ятҡан төргәкте күргәс, телен саҡ әйләндереп:

- Кем? – тип һораны.

- Малаай, – әбей бошонҡо тауыш менән һуҙып ҡына шулай яуапланы. (Г. Ситдиҡова)

***22-се күнегеү. Текстан күрһәтеү алмаштарын табығыҙ.***

Бай китә. Әхмәт жулик тора һала ла, тегегә күренмәйенсә генә, артынан эйәрә. Былар шулай үҙәк урамдан үтеп китәләр, инде байҙың фатирына яҡынлашалар. Әхмәт жулик бер ҙә рәтен сығара алмай бит һаман. Шулай тағы бер аҙ барғас, ҡараңғы төшкәйне, тегенең кәшүлеген ала бит был ҡалай итеп булһа ла. Ала ла яңынан теге урынына барып ята. (Әкиәттән)

- Ҡылым тип кешеләрҙең һәм предметтарҙың эш-хәрәкәтен аңлатҡан һүҙҙәр атала.

***23-сө күнегеү. Текста ҡулланылған ҡылымдарҙы табығыҙ.***

Башҡорттарҙың бер өлөшө ҡыпсаҡтар менән бергә Мысырҙа һәм Сирияла мәмлүктәр сифатында хеҙмәт иткәндәр, һәм араларынан күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре сыҡҡан. Шуларҙан айырыуса Насретдин әл- Насыри әл-Башҡурди, Сәнжәр әб-Рукны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл- Насыри, Ғилметдин әл-Башҡурди Беркундарҙың бөйөк әмир булыуҙары, йәнә Сарын әл-дин әл-Башҡурди тарихи сығанаҡтарҙа күп иҫкә алына. Араларынан Насретдин әл-Насыри ғәрәпсә гүзәл шиғырҙар һөйләгән ғалим әмир булған. 1322 йылдың 3 мартында Дамаскта донъя ҡуйған. Мәмлүктәрҙең бөйөк падишаһы Ҡаратай Хазинадар Ғилметдин әл-Башҡурдиҙы ғәйәт аҡыллы дәүләт кешеһе, ғалим һәм әхлаҡи йәһәттән өлгө булырлыҡ шәхес тип баһалай. Ғилметдин Сәнжәр әл-Башҡурди - уның замандашы. Ғилметдин Башҡурд әл-Насыри – мысырҙарҙың илһаниҙарға ҡаршы һуғышы ваҡытында 1303 йылда вафат булған бөйөк әмир. (Зәки Вәлиди)

- Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше ғәҙәти эш-хәрәкәтте йә үткән, йә хәҙерге, йә киләсәк заманды белдерә. Шулай уҡ хәбәр һөйкәлеше зат менән үҙгәрә.

***24-се күнегеү. Текстан хәбәр һөйкәлешен табығыҙ, уның заманын һәм затын билдәләгеҙ.***

Беҙҙең төбәккә ислам диненең үтеп инеүе Алтын Урҙала Бүркә хан (1255—1266) хакимлыҡ иткән осорға тура килә. Сығышы менән монгол булған Бүркә хан башлап исламды үҙе ҡабул иткән һәм исемен Бәркәгә үҙгәрткән. Хандан өлгө алып, Сарайҙағы (баш ҡала) бөтә татарҙар ҙа ислам диненә күскән. Хан үҙе һәм уның ярҙамсылары бар ихласлыҡтарын биреп, ислам динен үҫтерергә һәм таратырға тотонғандар. Бәркә хан хатта үҙен исламдың һәм Ҡөрьәндең яҡлаусыһы тип иғлан итә. Хандың бойороғо буйынса ислам динен өйрәтеү, таратыу, Алтын Урҙала мәғариф эшен алға ебәреү маҡсатында ислам донъяһының төрлө нөктәләренән бик күп ғалимдар, дин белгестәре, уҡымышлылар килтертелә, һәр урында мәсет-мәҙрәсәләр төҙөлә, тирә-йүнгә ислам диненә өндәүселәр ебәрелә. Бәркә бик ҙур тырышлыҡ һалып, баш ҡала булған Сарайҙы төҙөттөрөп бөтә. Бөтә ошо хеҙмәттәре өсөн Бәркә хан динде яҡлаусы, динде юғары күтәреүсе тигән хөрмәтле исемгә лайыҡ була. Бәркә хан тарафынан Сарайға саҡыртып килтерелгән дингә өгөтләүселәрҙең береһе, Шәйх Мөхәммәд Миһнән Алүҫә беҙҙең төбәктәге халыҡты ислам диненә күндереү эшенә тотона. Ул Әүеш тирәһендәге ауылда йәшәй, халыҡ араһында киң миссионерлыҡ эшмәкәрлеге

алып бара. Ләкин уның ғүмере фажиғәле тамамлана. Был турала Әүеш тауы башындағы ҡәберлек һәм уның ташындағы яҙыуҙар һөйләй. Ҡәбер ташы икәү: яңыһы һәм иҫкеһе бар. Яңыһын бынан 100 йыл тирәһе элек кенә Зәйнулла ишан Рәсүлев яҙҙыртып ҡуйған, боронғо яҙыуҙы ла ул дөрөҫләгән. Унда ошондай юлдар яҙылған. Бу дингә өндәүсе Шәйх Мөхәммәд Миһнән Алүҫә 651 хижри ел Берке хан ғасырында Бәни Сарай Берке хан дәүләте Иҫке яҙыуҙан түбәндәгеләрҙе уҡып була: Рамазан Әүлиә Килгән Ош шәһәренән Уны, хатынын, балаһын 651 ел кеше үлтергән.

Яңыса йыл иҫәбенә күсерһәк, мәрхүм 1273 йылда ерләнгән. Килеүе Бәркә хан заманында булһа ла, үлеме — Мәнгү хан (1266—1280 йй.) хакимлыҡ иткән осорға тура килә. Тимәк, Әүеш тауы башында ерләнгән кешенең шәйх булыуы уның ябай кеше түгеллеген күрһәтә. Иҫке яҙыуға килгәндә, шундай фараз ҡылырға була: Шәйх Мөхәммәд Миһнән Алүҫә һәм Рамаҙан Әүлиә — икеһе лә бер кеше. Был шәйхтең халыҡ араһында Рамаҙан Әүлиә исеме аҫтында йөрөүе ихтимал. Ош шәһәренән тигәненә лә (хәҙерге ваҡытта Ҡырғыҙстан республикаһы) аптырарға ярамай, сөнки Бәркә хандың бойороғо менән дин әһелдәрен Сарайға төрлө тарафтан йыйғандар. Әйткәндәй, «Әүеш» һүҙенең килеп сығыуын да урындағы халыҡ «Ош» һүҙе менән бәйләй. (Ә. Зарипов)

- Контекстҡа ҡарап, хәҙерге заман формаһы үткән заманды белдерә ала: *Мостай Кәрим Шишмә районында тыуа*. Шулай уҡ киләсәк заман, *ине* һүҙе менән килеп, үткән заманды белдереп тә ҡулланыла: *Ағайым беҙгә күрше йәшәгәндә көн хәл белергә инер ине.*

***25-се күнегеү. Текста хәҙерге заман хәбәр һөйкәлешенең үткән заман мәғәнәһендә ҡулланылыу осраҡтарын күрһәтегеҙ.***

Бер көн үҙенсәлекле фотоға юлыҡтым. Унда бер кеше эргәһендә бөтә донъяға билдәле боксер Мөхәммәт Али ултыра. Аҫтында яҙыу: Силәбе өлкәһенең “Арғаяш районы башҡорто Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев – “Көнсығыштың бөйөк имамы” Токиола төҙөгән мәсеттә”. Исеме – башҡорттоҡо. Башта бер уй өйөрөлдө: Көнсығышта даны таралған был уҙаман ниндәй кеше икән ул?

Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев – XX быуаттың беренсе яртыһындағы башҡорт мәғрифәтсеһе, күренекле дин, сәйәсәт һәм йәмәғәт эшмәкәре. Сығышы менән Силәбе өлкәһенең Арғаяш районындағы Медьяк ауылынан икән. Тамырҙары Абдул-Хәким һәм “Аҡһаҡ ишан” – Ғәбиҙулла

Ҡорбанғәлиев тигән исемдәр менән бәйләнә. Белемде ул ауылдағы, унан һуң Троицк ҡалаһындағы “Рәсүлиә” мәҙрәсәһендә ала. Ә егерме ете йәшендә уны мөфтөй Сафа Баязитов Рәсәйҙең юғары мөфтөйө вазифаһына үҙенә алмашҡа әҙерләй башлай. Шул йылда уҡ Ҡорбанғәлиев Петербург округының мосолмандарына етәкселек итә. Киләһе йылдарҙа I һәм II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡатнаша.

Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтең исеме менән 1917–1920 йылдарҙағы башҡорт милли хәрәкәте, 1917–1920 йылдарҙағы аҡтарҙың Себерҙәге хәрәкәте, эмиграциялағы башҡорттарҙың тормошо бәйле. Ғалимдар билдереүенсә, ул атаһы менән Зәки Вәлидиҙең оппоненты ла булған. Мөхтәриәтте һаҡлау ниәтенән Башҡорт хөкүмәтенең Совет власына ҡушылыуын да ҡабул итмәгән. Шуға ла Колчакка ярҙам итеүҙе хуп күрә.

Ләкин 1920 йылда Маньчжурияға күсеп китә. Унда ул мосолмандарҙы берләштереү, башҡорт йолаларын һаҡлау, туған телдә уҡытыу буйынса эшмәкәрлек алып бара. Ә дүрт йылдан Японияға күсенә. Яңы урында ла туҡтап ҡалмай, мосолмандар ойошмаһы төҙөп, уны етәкләй.

Сит илдә Ҡорбанғәлиев йәнә мәҙрәсә аса, Бөтә япон мосолмандары йыйылышын үткәрә. Шулай уҡ ул башҡорт һәм япон телдәрендә китап сығарған типография ла асып ебәрә. Үҙе иһә Урал-Алтай халыҡтары һәм уларҙың тарихы тураһында бер нисә китап, Алыҫ Көнсығышта тәүге Ҡөрьәнде баҫтыра, “Япон мөхбире” исемле журнал булдыра. Ә 1938 йылдың 12 майында Токиола “Исламиә” мәсетен асып, Японияның тәүге мөфтөйө булып китә. Был йәһәттән ул исламды буддизм, христиан диндәре кеүек үк тулы хоҡуҡлы итеүгә өлгәшә.

Билдәле, Совет осронда ситтә йәшәгән кеше булараҡ, уны тыуған илендә ят итәләр. Ул ғына түгел, 1945 йылда хатта сит илдә табып та Мөхәммәт-Ғәбделхәйҙе ҡулға алалар, “революцияға ҡаршы эшмәкәрлек” өсөн Мәскәүҙә ун йылға хөкөм итәләр. Зиндандан сыҡҡас, Өфөгә килә, унан һуң Силәбегә күсенә. Ғүмеренең ахырынаса шунда йәшәй. Ошо кеше менән яҡыныраҡ танышҡандан һуң уйлап ҡуйҙым: бына бит, башҡорт ҡайҙа ғына бармаһын, яҡты данын таныта алған. Был йәһәттән заманында оппоненты булған Зәки Вәлидиҙе лә асыҡ миҫал итеп килтерергә мөмкин. Тик шулай тура килеп тормош икеһен дә тыуған ерҙәренән айыра. Шунда ла улар халҡына, яҡтылыҡҡа хеҙмәт итә. Һүҙҙе йомғаҡлап, Ҡорбанғәлиев тураһында мәғлүмәт эҙләгәндә тәү тап булған яҙманы килтерер инем: “1928 йылда Токиола Японияла йәшәгән мосолмандарҙың йыйылышы уҙа. Унда иһә “Японияла йәшәүсе мосолмандар берлеге” төҙөлә. Ә рәйесе итеп Мәхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев һайлана. Киләһе тиҫтә йылда ул Японияла беренсе мосолман була, ә япон, ҡытай һәм корея ислам

әһелдәре өсөн – “Алыҫ Көнсығыштың бөйөк имамы”. (“Башҡортостан” гәзитенән)

- Бойороҡ һөйкәлеше берәй эш-хәрәкәтте башҡарырға ҡушыуҙы, йәки ниндәйҙер эште тыйыуҙы белдерә. Тик 2-се затҡа ҡарата ғына бойороп була: *бар, барығыҙ, барма, бармағыҙ*. Ҡайһы бер телселәр бойорҡ һөйкәлеше 1-се һәм 3-сө затҡа ҡарата ла ҡулланыла тигән фекер яҡлы, әммә 1-се һәм 3-сө заттарға ҡарата бойороп булмай, ә фәҡәт теләкте генә белдереп була, шуға күрә лә түбәндәге формаларҙы теләк һөйкәлеше тип атау дөрөҫөрәк: *алайым, ҡайтайыҡ, уҡыһын, йәшәһендәр*.

***26-сы күнегеү. Текста бойороҡ һөйкәлешен табығыҙ.***

Беҙҙең атайҙан да шәп кеше юҡтыр ул донъяла. Берәүгә лә ауыр һүҙ әйтмәй, әрләшеп-талашып та бармай. Унын менән бергәләшеп өйгә эште эшләйбеҙ. Йәй еттеме – атайыбыҙ менән урмандан ҡайтышмайбыҙ. Ул бәшмәген йыябыҙ, туйғансы еләген ашайбыҙ, биҙрә-биҙрә көртмәлеһен алып ҡайтабыҙ. Хатта бер саҡ атай беҙгә боландарҙы ла күрһәтте!

Бынан дүрт йыл элек әсәйебеҙ мәрхүмә булды. Атайым ете бала менән тол тороп ҡалды. "Балаларыңды хөкүмәткә тапшыр, ә үҙең яңынан ҡатын ал. Былайтып үҙеңде бөтөрмә, Ғиззәт, самый йәшәй торған мәлең бит әле!" — тиеүселәр ҙә булғыланы.

“Быларҙы аяҡҡа баҫтыра алмаясаҡһың, әйҙә детдомға бир”, тинеләр. Әммә атай уларҙы тыңламаны. Килеүселәргә яуабы ҡаты ине:

– Балаларҙы кеше ҡулына бирер өсөн тыуҙырманыҡ. Үҙем иҫән-һау саҡта уларҙың башынан бер сәсе лә төшмәйәсәк! (А. Баймөхәмәтов)

***27-се күнегеү. Текста теләк һөйкәлешле ҡылымдарҙы билдәләгеҙ.***

Һуғымды, ҡар ятып, ныҡлы һыуыҡтар башланғас һуялар. Өмәгә, ғәҙәттә, хужаның туғандары һәм күрше-күлән саҡырыла. Ир-ат малды йығып салғансы, ҡатын-ҡыҙ ҡатнашмай, тиреһен һыҙырып бөткәс кенә, һуғым урынына бара һәм эштең аҙағынаса ярҙам итә. Һуйғанда ярҙамлашҡан кешеләрҙе, туғандарҙы кис ашҡа йыялар. Күрше-күләнде лә алалар. Ит турау эше оҫта ҡуллы кешегә бирелә. Иң тәүҙә һәр кемгә тултырманан өлөш тотторола. Тултырма һәр һуғым ашында булырға тейеш, әгәр хужабикә уны бешермәһә, уны ялҡаулыҡта ғәйепләйҙәр. Һуғым ашы әҙерләгәндә шулай уҡ

салыу һөйәгеп бешерәләр. Уны малды бысаҡлаған кешегә бирәләр. Киске ашҡа килгән ҡунаҡтар үҙҙәренең изге теләктәре менән байрамды башлап ебәрә:

– Һуғым һимеҙ булһын!

– Ите татлы булһын!

– Иҫән-һау ризыҡҡа яҙһын!

Һуғым ашағас, шулай тип теләк теләйҙәр:

— Малдарығыҙ күп булһын,
Малдарығыҙ ныҡ уңһын!
Беҙ ашаған ерҙәргә,
Беҙҙең эскән ерҙәргә —
Хоҙай Тәғәлә ишетһен —
Малығыҙҙы ишәйтһен!
Ғәйеп ризыҡтар бирһен,
Ғәйеп малдар бирһен!
Рәхмәт һыйығыҙға! ("Башҡортостан" гәзитенән)

- Шарт һөйкәлеше ниндәйҙер эш-хәрәкәт башҡарылһын өсөн икенсе эш-хәрәкәттең шарт булыуын белдерә. Был һөйкәлеш ҡылым нигеҙенә -*һа/-һә* ялғауы ҡушылып яһала: *ҡайтһа, килһә.*

***28-се күнегеү. Текста шарт һөйкәлешен табығыҙ.***

Әсә... Ошо исемдә йөрөтөүсегә Аллаһы Тәғәлә бүтән берәүҙә лә булмаған миһырбанлылыҡ, хәстәрлеклелек, изгелек кеүек әллә күпме аҫыл сифатты хас ҡылған. Әсәнең ни күреп ни кисергәнен үҙе әсәй булған кеше генә аңлай, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Ул сабыйын тәүҙә ҡарынында ҡәҙерләп туғыҙ ай буйы йөрөтә, бер йыл тирәһе ҡулында, шунан ғүмере буйына балаһын йөрәк түрендә йөрөтә.

Йәннәт – әсәләрҙең аяҡ аҫтында, тигән бәйғәмбәребеҙ. Эйе, әсәнең ризалығына ирешмәйенсә, йәннәткә инеү мөмкинлеге юҡ, әлбиттә. Ата-әсә икеһе лә ҙур ихтирамға лайыҡ булһа ла, иң оло хөрмәткә әсәй, шунан һуң ғына атай кеше эйә. ҡылған изгелектәребеҙ, тәү сиратта, тап уларға арналған булырға тейеш. Бала саҡта әсәй беҙҙе нисек ҡараған, тәрбиәләгән, беҙ ҙә уға шундай уҡ яуап ҡайтарырға бурыслыбыҙ. Йәғни бала бәлиғ булғандан алып ата-әсәһен тәрбиәләүгә яуаплы.

Тирә-яғыбыҙға күҙ һалайыҡ: аҙмы ни арабыҙҙа асыҡтан-асыҡ үҙ әсәһен, атаһын ҡарт көнөндә тилмертеп, йорттарын һатып, зар илатып

ҡарттар йортона оҙатыусы миһырбанһыҙ йәштәр? Шундай мөнәсәбәт яулар өсөн үҫтергәнме ни улар ғәзиз балаларын?! Сәстәр үрә торорлоҡ: әлеге көндә илебеҙҙәге ҡарттар йорттары туп-тулы! Ни сәсһәң, шуны урырһың, тиҙәр халыҡта. Йәштәр үҙҙәренең киләсәге хаҡында уйланһын ине. Уларҙың да бит балалары үҫә... Киләсәктә, әгәр үҙ балалары шулай уҡ ҡыланһа, ата-әсә ни тип яуап бирер, кемгә өмөттәр бағлар? Атай-әсәйҙәр, әлбиттә, олоғая килә физик һәм аҡыл яғынан көсһөҙләнә башлай: ауырып китеүҙәре, йә бөтөнләй түшәккә ятыуҙары ихтимал, яңылыш фекер йөрөтөүҙәре, юҡ өсөн бәхәсләшеүҙәре мөмкин. Әммә быларҙың барыһы ла ҡартайыу ғәләмәте. Улар бит быны балаларына ауырлыҡ тыуҙырыу өсөн эшләмәй. Уларҙағы ҡылыҡ-фиғел үҙгәрештәрен мөмкин тиклем тыныс һәм аңлау менән ҡабул итергә кәрәк. Сабый сағында әсәйеңдең төндәрен һинең өсөн йоҡламай уҙғарғанын, һинең бөтә киреләнеүҙәреңде яратып ҡабул иткәнен белмәйһең. Ғөмүмән, әсәйең ниндәй генә булмаһын, һин уның алдында бурысыңды теүәл үтәргә тейешһең. Фәҡәт ул һинең әсәйең булған өсөн генә. Уға ҡул һелтәү, әйткәндәрен тыңламау, шәфҡәтһеҙлек күрһәтеү гонаһ һанала. Тормоштағы бөтә хаталарҙы, моғайын, аңлап та, кисереп тә булалыр, әммә ата-әсәгә ҡарата бындай мөнәсәбәтте ғәфү итеп булмай.

Балаларҙың ата-әсәләренә һәм ата-әсәнең балаларына булған әлеге киҫкен мөнәсәбәттәр аяныслы хәлдәргә килтерә. Әйтеп үтергә кәрәк, әсәйҙәрҙең дә төрлөһө була. Балаларын онотоп, еңел тормошто һайлаған, «йәшел йылан»ға бирелгәндәре лә бар арабыҙҙа. Махсус интернаттарҙың, балалар йорттарының артыуы быға дәлил булып тора. Ата-әсәләр балаларына иң күркәм тәрбиә бирһен, үҙ бурыстарын теүәл үтәһен, ә балалары уларға ҡарата миһырбанлы, итәғәтле булһын һәм уларҙы ҡарт көндәрендә яңғыҙ ҡалдырмаһын, үҙ ҡарауы аҫтына алһын, тип өйрәтә динебеҙ. Балаларға ҡалдыра торған мираҫтың иң ҡиммәтлеһе – дингә яҡынайтыу, тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.). Йәғни тәрбиәнең төп сығанағы – дин. Бала изге тәрбиә алып үҫһә, гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡһа, тимәк, уның ата-әсәһенә ҡаршы бармауы ғына түгел, теләһә ниндәй ярамаған ғәмәлде башҡармаясағына ышаныс ҙур.

Шулай итеп, һәр кемдең дә Аллаһы Тәғәлә алдында үҙ бурысы бар. Һәм быларҙың бөтәһе лә үҙ-ара бәйләнгән. Уларҙы үтәмәйенсә, бер кемдең дә рәхмәткә ирешеү мөмкинлеге юҡ. ( “Йәшлек” гәзитенән, Айгизә Асҡарова)

- Башҡорт телендә ҡылымдың 4 төркөмсәһен билдәләйҙәр: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым (инфинитив). Сифат ҡылымға түбәндәге формалар инә: *кайткан һалдат, барыусы ылау,*

*киләсәк тормош*. Хәл ҡылымдың 5 формаһы телмәрҙә ҡулланыла: *ашығып, килгәс, әйткәнсә, киткәнсе, илай-илай*. Исем ҡылым –ыу, -өү, -ау, -оу, -еү ялғауҙарына тамамлана: барыу, ҡайтыу, йөрөү. Ғәрәп теленән тәржемә иткәндә масдарҙарҙы исем ҡылым итеп ҡарау тәржемә эшен күпкә еңеләйтә: *жулүс – ултырыу, тәзәүүәж – өйләнеү, интиҙар – көтөү*. Уртаҡ ҡылым йә иһә инфинитив тип *-ырға, -ергә, -өргә, -орға* тамамланған ҡылымдар атала: *ҡайтырға, йәшәргә, күрергә*.

***29-сы күнегеү. Текста сифат ҡылымдарҙы һәм хәл-ҡылымдың формаларын билдәләгеҙ.***

Беҙ үҙебеҙҙең мосолман балалары икәнебеҙҙе, иң изге китабыбыҙ Ҡөрьән булғанлығын белеп үҫтек. Диндән нисек тә ситләштерергә, аллаһыҙҙар итеп тәрбиәләргә тырышһалар ҙа, быуаттар буйына халҡыбыҙ күңелендә һаҡланған әхлаҡи хазиналар ололарҙан беҙгә лә барыбер күскәйне. Шулай ҙа үҫкән сағыбыҙҙа Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән ҡалған бөйөк хазина – хәҙистәр тураһында бөтөнләй тиерлек белмәнек. Миңә хәҙистәрҙе тәү тапҡыр яңы быуат, яңы мең йыллыҡ башланғанда Башҡортостан радиоһынан беренсе ҡабат ишетергә, пәйғәмбәребеҙҙең аҡыллы һүҙҙәренә хайран ҡалырға насип итте. Шунан һуң хәҙистәрҙе эҙләй, уларҙы башҡортса шиғырға әйләндерә башланым. Матбуғатта баҫылып сыҡҡас, уларҙы уҡыусылар бик яратты. 2001 йылда “Йөҙ ҙә бер хәҙис” тигән китабым донъя күрҙе. Шунан һуң икенсе, өсөнсө йыйынтыҡтар таралды. 2008 йылда башҡортса һәм русса “Өс йөҙ ҙә өс хәҙис” (“Триста три хадиса”) тигән китабым уҡыусыларға барып етте. Уларҙы баҫтырыуҙа ярҙам иткән ватандаштарыма һаман да рәхмәт уҡыйым. Хәҙистәрҙәге тәрән фекерҙәр, тапҡыр һүҙҙәр һәр саҡ үҙенә тарта икән. Уларҙан айырылғаным юҡ, эшем дауам итә. (Р. Бикбаев, “Ватандаш” журналынан)

***30-сы күнегеү. Текста исем ҡылымдарҙы һәм уртаҡ ҡылымдарҙы билдәләгеҙ.***

Башҡорттарҙа исламиәтте бер төркмән фәҡихы таратыуы хаҡындағы мәғлүмәттең Дунай ҙа түгел, Уралда булған хәлде күрһәтеүе ихтимал. Яҡут әл-Хамауи Мадьярстандағы мосолман башҡорттарҙан Халебҡа уҡырға килгән берәү менән һөйләшеүе хаҡында яҙа. Был, башҡорттоң әйтеүенә ҡарағанда, Мадьярстандағы башҡорттарҙың барыһы ла хәнәфи мәҙһәбенә ҡарай, имеш. Уларҙы мосолманлыҡҡа бик борон заманда Болғар

мәмләкәттәренән килгән ете кеше өйрәткән. Был риүәйәтте ул атай-олатайҙарынан ишеткән. Тимәк, улар исламиәтте Уралдағы Башҡортостанда булған саҡта уҡ ҡабул иткән. Берәүҙәре Болғар мәмләкәттәренән килгән ете кеше, ә бүтән өлөшө төркмән фәҡихы тарафынан мосолманлыҡҡа йәлеп ителгән. Төркмән тип Һырдарья буйында йәшәгән уғыҙҙар күҙ уңында тотола булһа кәрәк. Төркмән араһында исламиәт тараҡкан миссионерҙарҙың күбеһе, шул иҫәптән Йәсәүи шәйехтәре, шунан сыҡҡан. Яҡут әл-Хамауи күргән башҡорт Дунай башҡорттарының 30-ға тиклем ҡәрйә тәшкил итеп йәшәүен, уларҙың һәр береһе ҡала хәтле ҙур булыуын, тик Мадьяр падишаһтарының, башҡорттарҙың күтәрелешенән ҡурҡып, ҡәлғә төҙөргә рөхсәт бирмәүен һөйләгән. Телдәре лә инде төрксә түгел, европаса (йәғни мадьярса) булып бөткән, ҡиәфәттәре лә европаса, имеш, һәм улар, ғәскәр сифатында мадьяр короле хеҙмәтендә булып, мадьярҙар менән берлектә мосолман булмаған ҡәүемдәргә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашҡан; һаҡалдарын ҡыралар, имеш, бәғзеләре, ислам ғилемдәрен өйрәнеп фәҡих булыу өсөн, Халебҡа килә икән. Зәкәриә Казвини ҙа (үлеме 1283 йыл) бер башҡорт фәҡихын күргән. Ул да башҡорттарҙы күпселеге христиан, әммә араларында хәнәфи мәҙһәбендәге мосолмандар ҙа булған ҙур бер милләт сифатында һүрәтләй һәм уларҙың христиандарға ҡаршы һуғыштарҙа ғына ҡатнашыуын билдәләй. Башҡорт исеме менән мадьярҙарҙы һәм ундағы мосолман башҡорт, бәжәнәктәрҙе атай һәм башҡорттарҙы сатырҙарҙа (йәғни тирмә өйҙәрҙә) йәшәгән, ҡалалары булмаған бер милләт сифатында тасуирлай. Был осраҡта һүҙ Урал башҡорттары хаҡында бара булһа кәрәк. Сөнки Зәкәриә Казвини заманында Мадьярстандағы мадьяр һәм башҡорттар сатырҙарҙа түгел, ауыл, ҡалаларҙа ғүмер итә. Ләкин был авторҙың сатырҙарҙа йәшәгән башҡорттар хаҡындағы мәғлүмәте Уралдағы башҡорттарға ла, Дунай башҡорттарына ла ҡарарға мөмкин: “Башҡорт халҡы тирмә өйҙәрҙә йәшәй. Ҡалалары юҡ. Аймаҡтарҙың шәфҡәтле етәкселәренең иҡталары (ер биләү танытмалары) бар. Күп ваҡыт араларында иҡталар арҡаһында бәрелеш барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙың падишаһы был низағтарҙы туҡтатыу уйы менән, иҡталарҙы тартып алып, уларға (ғәскәр хеҙмәте өсөн) хазинанан түләү тәғәйенләгән. Татарҙар килгәндә, башҡорт падишаһы уларға ҡаршы торорға әҙерләнгән. Башҡорттарҙың хәрби етәкселәре “беҙгә иҡталарыбыҙҙы кире бирмәһәң, һуғышмайбыҙ” тигәндәр. Падишаһ иһә: “Мин хәҙер уларҙы һеҙгә бирмәйем, һуңынан үҙегеҙгә һәм балаларығыҙға тапшырырмын”, – тигән. Бынан аҙаҡ башҡорттар таралышҡан һәм татар ҡылысы ла уларҙы бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ ҡырған. Бату хан идараһындағы монголдар Мадьярстанға ингән ваҡытта Мадьяр короле Бела IV-кә буйһонған мадьяр хәрби етәкселәре араһында ла шундай уҡ низағтар була. Иҡталарын алып,

урынына хаҡ түләү мәсьәләһе, татарҙарҙың Мадьярстанға һөжүме ваҡытында сатырҙарҙа йәшәгән башҡорттарҙың иҡталары хаҡындағы мәғлүмәт Урал башҡорттарына ҡарай булһа кәрәк, сөнки мадьярҙар һәм улар араһында мадьярлашҡан мосолман башҡорттар өсөн XIII быуатта сатырҙа йәшәү мөмкин булмаҫ ине. Мадьяр сығанағында ла бындай мәғлүмәт һаҡланмауы хаҡында әйтелә. (Зәки Вәлиди)

- Эш-хәрәкәттең кемгәлер йәки нимәгәлер йүнәлеүен белдергән ҡылымдарға йүнәлеш күренеше хас. Башҡорт телендә ҡылымдың биш төрлө йүнәлеше бар, тип һанала: 1. төп йүнәлеш 2. ҡайтым йүнәлеше 3. төшөм йүнәлеше 4. йөкмәтеү йүнәлеше 5. уртаҡлыҡ йүнәлеше. 1. Төп йүнәлешкә ғәҙәти ҡылымдар инәһә, ҡайтым йүнәлешле ҡылымдар *-ын, -ен, -он, -өн (н)* ялғауына тамамлана: *кейен, йыйына*. Төшөм йүнәлешеле ҡылымдарҙың ялғауы *-ыл, -ел, -ал, -өл, -л*: *яҙылды, әйтелә.* 4. Йөкмәтеү йүнәлешеле ҡылым тамырына *-т, -дыр, -дер, -дор,-дөр, -ҙыр, -ҙер, -ҙор, -ҙөр, -ҡыр, -көр, -ҡар, -кәр, -ар, -әр, -ыр, -ер, -өр,-ғыҙ, -геҙ, -ыҙ, -һәт* ялғауҙары өҫтәлә: *эшләт, күрһәт, яҙҙыр*. 5. Уртаҡлыҡ йүнәлеше бергә эшләү мәғәнәһен белдерә һәм тамырына *-ыш, -еш, -ош* ялғауҙары ҡушып яһала: *эшләш, һөйләш*.

***31-се күнегеү. Текста төрлө ҡылым йүнәлештәрен билдәләгеҙ.***

М. Өмөтбаевтың Ғилми китапханала һаҡланған өсөнсө китабы – “Шараъитүл иман шарттары һәм башында уҡыуҙы тиҙерәк белмәктең низамы менән”. Автор үҙен: “мөхәррир Мөхәммәдсәлим Өмөдбаев” тип билдәләй. Китаптың баҫылыуына Санкт-Петербургта 1897 йылдың 30 сентябрендә рөхсәт бирелгән. Ул Ҡазан ҡалаһында Домбровский баҫмаханаһында 1897 йылда нәшер ителә һәм бөтәһе 48 биттән тора. “Шараъитүл иман шарттары һәм башында уҡыуҙы тиҙерәк белмәктең низамы менән” китабы “өн методы” буйынса төҙөлгән әлифба булып тора. Ул “Беренсе сабаҡ. Ялғыҙ хәрефләр. Баш хәрефләр. Артҡы хәрефләр. Икенсе сабаҡ. Төрки телендә мөштәрәк … Иман инанмаҡтыр иманды мәғәнәсе берлә белмәк фарыздыр”, – тигән бүлексәләрҙән тора һәм артабан дин тәртиптәренә лә туҡталып китә. Мәҫәлән “Аҙан будыр”, “Ауыҙ асҡанда бу сүрә уҡыладыр”, “Намаҙ ниәтләре будыр”, “Йома намаҙының ниәтләре”, “Ҡәҙер намаҙы будыр” тигән бүлексәләрҙә намаҙ уҡыу, ауыҙ асыу һәм башҡа дин тәртиптәрен өйрәтә. Автор китапты мөнәжәт менән һәм “тәстиф (яҙыусы. – авт.) Мөхәммәдсәлим” тип тамамлай. Әйтергә кәрәк, был ваҡытта

М. Өмөтбаев Өфөлә Диниә назаратында тәржемәселек вазифаһын башҡара һәм титулярный советник дәрәжәһенә эйә була.

М. Өмөтбаевтың тел өлкәһендәге иң ҙур хеҙмәте булып "Татар нәхүсенең мөхтасары" ("Ҡыҫҡаса татар грамматикаһы дәреслеге") тора. Китап Ҡазанда Б.Л.Домбровский баҫмаханаһында 1901 йылда Мирза Ибраһим Тереғолов нәшере менән баҫтырыла. Титул битендә автор тарафынан китаптың яҙылыу тарихына бәйле мәғлүмәт бирелә: "Ходай Тәғәләнең рәхмәте илән башҡорт үә татар ахундаларе бер нишан (эҙ, яҙма. – авт.) улсун үә ғилемнең ишараты илән хәйер-доға өмөт итеп мәғрүб данәшмәнләренең (ғалимдарының. – авт.) низамынча тәсниф ҡылараҡ язып ҡалдырдым. Әс-синағ шәрҡиййә тәржемәне титулярный советник Мөхәмәдсәлим бин Ишмөхәмәд Өмөдбаев Йомрани 1900-нче йылда. (Р. Сибәғәтова, "Ватандаш" журналынан)

- Һөйләмдә ҡылымдан сығып *нисек?* тигән һорауға яуап биргән һәм ниндәйҙер эш-хәрәкәттең билдәһен, уның ниндәй хәлдәрҙә үтәлеүен белдергән һүҙҙәр рәүеш тип атала. Башҡорт телендә рәүештәр составына шулай уҡ күләмде, урынды һәм ваҡытты белдергән һүҙҙәрҙе лә индерәләр.

***32-се күнегеү. Текста осраған рәүештәрҙе билдәләгеҙ.***

Мысыр ерендә тәкәббер, уҫал Фирғәүен исемле батша була. Ул 400 йыл батша булып ултырып, үҙен "Мин – Алла" тип ҡабатлай башлай. Бер саҡ ул төш күрә. Юраусылар уға: "Бер ир бала тыуасаҡ, ул һинең батшалығыңды емерәсәк, һинең үҙеңде һәм ҡәүемеңде юҡ итәсәк", – ти. Фирғәүен батшалығында тыуған бөтә ир балаларҙы үлтереп торорға бойора. 70 мең ир бала үлтерелә. Аллаһының хикмәте буйынса төш юраусылар әйткән ир баланы Фирғәүен үҙ ғаиләһендә тәрбиәләп үҫтерә. Фирғәүен ул йәш балаға Муса тип исем ҡуша. Шулай итеп, Муса 40 йәшенә еткәнсе Фирғәүендең тәрбиәһендә булып, Аллаһының әмере менән Фирғәүенде һәм уның ҡәүемен иманға өндәй башлай. Әлбиттә, үҙен "Мин – Алла" тип йөрөткән Фирғәүен һәм уның ҡәүеме иманға күнмәй. Улар Муса ғәләйһи үәссәләмгә ҡаршы дошманлыҡ ҡыла башлай. "Миңә бойһонмаған Мусаны һәм уның яҡлы булған кешеләрҙе һыуға батырығыҙ", – тигән фарман сығара Фирғәүен. Ул үҙенең ғәскәре менән Муса ғәләйһи үәссәләмде һәм уның ғәскәрен Ҡыҙыл диңгеҙ яғына табан ҡыуа төшә. Диңгеҙ ярына килеп ҡыҫырыҡланғас, Муса ғәләйһи үәссәләм Аллаһҡа доға ҡылып мөрәжәғәт итә. Аллаһтан килгән ишара буйынса Муса тылсымлы таяғын һыуға бәрә

һәм диңгеҙ һыуы 12 урындан асылып, юл һала. Муса пәйғәмбәр һәм уның ғәскәре имен-аман диңгеҙҙең икенсе яҡ ярына сыға. Арттарынан ҡыуып килгән Фирғәүен дә ғәскәре менән бергә диңгеҙҙә асылған юлға керә. Ләкин Аллаһтың бойороғо буйынса һыу яңынан үҙ урынына ҡайтып, Фирғәүен һәм уның ғәскәре батып үлә. (“Киске Өфө” гәзитенән)

- Ябай һөйләмдә эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, ә ҡушма һөйләмдәрҙә ике һөйләмде бәйләп торған һүҙҙәр бәйләүес тип атала. Улар төрлө мәғәнә лә белдерә: сәбәп (*өсөн, күрә*), маҡсат (*өсөн, тип*), йүнәлеш (*табан*), ваҡыт (*тиклем, хәтле, һуң*), оҡшатыу һәм сағыштырыу (*хәтле, кеүек, һымаҡ*), бергәле (*менән*).

***33-сө күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда осраған бәйләүестәрҙе табығыҙ, уларҙы мәғәнәләре буйынса төркөмләгеҙ.***

Таң ата ла кис етә, ваҡыт арбаһы һиҙҙермәйенсә алға елә. Беҙ, донъя мәшәҡәттәренә сумып, тирә-яғыбыҙға, илдә барған хәл-ваҡиғаларға иғтибар бүлергә, йәшәү рәүешебеҙгә анализ яһарға, һис юғында, тормош һәм йәшәү мәғәнәһе хаҡында фекер йөрөтөү өсөн, исмаһам, бер сәғәт кенә лә ваҡыт таба алмайбыҙ. Күптәребеҙ, үҙ донъяһына ғына бикләнеп, йәне теләгәнде эшләп, башҡа бер кемдең һүҙенә ҡолаҡ һалмай, тирә-йүненә битараф көйө йәшәргә күнеккән. Ә бит һәр беребеҙҙең донъяла үҙ тәғәйенләнеше бар, ғүмеребеҙҙе изгелеккә бағышларға, тормош йәмләүгә саҡ ҡына булһа ла үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә, ни ҙә булһа эшләргә тейешбеҙ. Тирә-яғыбыҙға күҙ һалһаҡ, аҙым һайын иҫәпләп бөткөһөҙ әллә күпме мәсьәлә тулып ята. Ләкин ошо мәсьәләләрҙең иң олоһо, ҙур ҡурҡыныс менән янағаны – эскелек. Ҡалала урамға сыҡһаң, аҙым һайын йә иҫерек хәлдә китеп барған, йә ҡулдарына һыра тотҡан, бер кемдән тартынмайынса, иҫтәре лә китмәй тәмәке көйрәткән ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ир-егеттәрҙе осратырға тура килә. Ауылдарҙа ла хәл шәптән түгел: шулай уҡ “йәшел йылан” ағыуы ҡолона әйләнгән йәш һәм оло быуын ир-егеттәрен күреүҙән, аяныслы хәл-ваҡиғаларҙан күңел әрней.
Эскелек бар ерҙә хакимлыҡ итә. Бер көн эсендә генә лә әллә күпме йән өшөткөс хәлдең шаһиты булырға тура килә. Урам буйлап атлап бараһыңмы, кибеткә инәһеңме, автобусҡа ултыраһыңмы – бар ерҙә лә осрай хәмерҙең “дуҫтары”. Өлкәндәрҙең генә түгел, тыңдаштәремдең, йәш быуындың шайтан ағыуына тартылыуы, ҡайһы берәүҙәрҙең иҫерткес эсемлектәр менән айырылғыһыҙ дуҫтар булыуы оло хафаға һала. Өлкән быуын вәкилдәренән эскелекте күреп, телевизорҙан һәр саҡ ишетеп-күреп, быға өйрәнелгән ғәҙәти хәлгә ҡараған кеүек ҡараһаҡ та, шуның араһында йәшәһәк тә, аҡылыбыҙ

менән иҫерткес эсемлектәргә буталған мәғәнәһеҙ йәшәү рәүешенең ни тиклем дөрөҫ түгеллеген аңлап, белә тороп, беҙ был заман афәтенең артабан да таралыуына юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Быуындарҙан быуындарға бәйләнә килгән эскелек сылбырын беҙ, йәштәр, үҙебеҙ өҙмәһәк, кем өҙөр һуң?

Йыш ҡына таныш егет һәм ҡыҙҙарҙан, йәш саҡта бер аҙ эсеп ҡалырға кәрәк инде ул, аҙаҡ оло тормош юлына аяҡ баҫҡас, ғаилә ҡорғас, эсмәйәсәкбеҙ, тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Ләкин хәҙерҙән ошо фекергә таянған кеше ғаилә ҡороп йәшәй башлағас та был насар ғәҙәтенән арына алмаясаҡ, бик ныҡ теләгән хәлдә лә хәмерҙән ҡотолоу еңелдән булмаясаҡ. Эскелек йәмғиәтебеҙҙең барлыҡ тармаҡтарына ла үтеп ингән һәм ныҡлы урын алған. Әммә һәр кеше үҙ киләсәге хаҡында ҡайғырта ала, үҙенә юлды үҙе яра һәм ниндәй юлдан атларға кәрәклекте үҙе билдәләй. Тимәк, һәр беребеҙгә уйланырға урын бар. Ата-әсәләр үҙҙәренең йәшәү рәүеше, балаларына ниндәй миҫал күрһәтеүе тураһында йышыраҡ уйланһа ине. Аҡыл өйрәтеп кенә яҡшы һөҙөмтәләргә ирешеү мөмкин түгел. Иң тәүҙә эшең менән миҫал күрһәтеү кәрәк. Шул саҡта ғына башҡалар дөрөҫлөктө аңлаясаҡ. Йәштәргә киләсәк тормош хаҡында уйланыу, маҡсаттарға ынтылып йәшәү зарур. Ғүмер бер генә! Уны яҡшы, йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы эштәр башҡарып, шатлыҡ-ҡыуаныстар менән, хәмерһеҙ ҙә күңелле һәм мәғәнәле итеп уҙғарыу мөмкинлеге булғанда, ниңә шайтан ағыуына ынтылырға, эскелек ҡолона әүерелергә? Һуңғы арала бик йыш ҡына алдынғы ҡарашлы ағайҙарҙан, гәзит-журнал биттәрендә, район үҙәктәрендә эскелеккә ҡаршы ойошмалар булдырыу кәрәклеге тураһындағы фекерҙәрҙе ишетергә тура килде. Ойошма ағзалары йәштәрҙе айыҡ тормошҡа әйҙәү өсөн дөрөҫ юлдарҙы билдәләп, район үҙәгендә генә түгел, ауылдарҙа ла эш йәйелдерһә, халыҡ менән яҡындан аралашһа, мәсьәләне сисеү юлдарын бергә эҙләһә, күпмелер ваҡыттан һуң яҡшы һөҙөмтәләргә ирешергә мөмкин булыр ине.

Был ауыр мәсьәләне сисеү өсөн беҙгә берҙәм булыу һәм, ҡәтғи ҡарарға килеп, эшкә дәррәү тотонорға кәрәк. Ил күләмендә барлыҡ кешелек донъяһына йоғонто яһарлыҡ, үҙгәрештәр индерерлек әллә ниндәй ҙур эштәргә тотоноу мотлаҡ түгел. Исмаһам, үҙебеҙҙең йәшәү рәүешебеҙ хаҡында фекер йөрөтөү һәм тормошобоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртеү тураһында ҡайғыртырға тейешбеҙ. Тирә-яҡты үҙгәртәм тиһәң, үҙеңдән башла, тиҙәр бит.

Бер бирелгән йәшнәп йәшәү беҙгә,
Хәмер һаҙлығына батмайыҡ.
Ҡулды ҡулға тотоношоп, бергә
Дөрөҫ юлдан ғорур атлайыҡ. (“Йәшлек” гәзитенән, З. Хунафина)

- Ябай һөйләмдә баш киҫәктәр менән эйәрсән киҫәктәрҙе бер-береһенә теркәгән һәм ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәрҙе үҙ-ара тоташтырған ярҙамсы һүҙҙәр теркәүестәр тип атала. Мәғәнәләре буйынса теркәүестәрҙе төрҙәргә бүләләр: йыйыу (*да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә, һәм, йәнә, тағы, шулай уҡ*), ҡаршы ҡуйыу (*ә, әммә, ләкин, тик*), бүлеү (*йә, йәки, ни, әле, әллә*), аныҡлау (*йәғни*).

***34-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда осраған теркәүестәрҙе табығыҙ, уларҙы мәғәнәләре буйынса төркөмләгеҙ.***

Башҡорт теленә, шулай уҡ күпселек башҡа төрки телдәренә, ғәрәп теленән ингән “мәҡәл” термины урынлы, йәки кәрәк ерҙә әйтелгән тапҡыр һүҙ тигән мәғәнәне аңлата. “Мәкәл һүҙе башҡорт теленә килеп кергәнгә тиклем, – тип яҙҙы проф. Ж. Ғ. Киекбаев, – боронғо башҡорт телендә уның мәғәнәһен биргән төрлө һүҙҙәр (терминдәр) ҡулланылған: мәҫәлән, бабайҙар һүҙе, боронғолар һүҙе, тапҡыр һүҙҙәр һәм, ахыр сиктә, әйтемдәр”. Хәҙерге көндә лә халыҡ араһында мәҡәл термине менән бер рәттән “ололар һүҙе”, “боронғолар әйткән һүҙ”, “ата-бабаларҙан ҡалған һүҙ” тип һөйләү йыш осрай. Мәҡәлгә ата-баба мираҫы итеп ҡарау башҡа халыҡтарҙа ла киң таралған. Мәҫәлән, азербайжан халҡында мәҡәл – “аталар сөзү”, сыуашта – “ваттисем калани” (ҡарттар һүҙе), мариҙарҙа – “тошто ен мут” (ҡарттар һүҙе), якут халҡында – “өс хоһооно” (ата-бабалар һүҙе) тип йөрөтөлә.

Халыҡ ижадының башҡа жанрҙарынан айырмалы рәүештә мәҡәлдәр теге йәки был фекерҙе көсәйтеү, раҫлау йә булмаһа, кире ҡағыу өсөн телмәр ағышына индерелә. Уларҙы ҡулланыу фекергә ҡеүәт, телмәргә йәм өҫтәй. Шуға ла боронғолар, мәҡәлде ололап, уның тормоштағы әһәмиәтен билдәләп, “Йөҙ күрке – һаҡал, һүҙ күрке – мәҡәл”, “Мәҡәлле һүҙ – аҡыллы һүҙ”, тип әйтеп ҡалдырған. Мәҡәл тик һөйләү ағышында ғына үҙенең бөтөн тәрәнлеген асып, яҡтылығын сәсеп ебәрә. (“Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр” китабынан)

- Һөйләмгә төрлө мәғәнә биргән ярҙамсы һүҙҙәр киҫәксә тип атала. Башҡорт телендә һорау *(-мы-ме, мо-мө)*, көсәйтеү *(иң, бит, ки, дә баһа)*, сикләү *(ғына)* һәм икеләнеү *(-дыр-дер, дор-дөр, ҙыр-ҙер, ҙор-ҙөр, лыр-лер, лор-лөр, тыр-тер, тор-төр)* киҫәксәләре бар.

***35-се күнегеү. Текстан киҫәксәләрҙе табып, уларҙың ниндәй төркөмгә ингәнен билдәләгеҙ.***

“Үлемһеҙ полк” буйлап дин эшмәкәре Ғабдрахман Рәсүлевтың портретын тотҡан ир-атты ситләп уҙа алманым:

– Һеҙ уның ейәне булаһығыҙмы? – тип һораным.

– Юҡ, – тине ир, йылмайып.

Айҙар Сафин “Өфөводоканал” ойошмаһында слесарь булып эшләй. Ул дин менән ҡыҙыҡһына. Башҡорт дин эшмәкәре, мөфтөй, 1936-1950 йылдарҙа ДУМЕС дини идаралығының рәйесе Ғабдрахман Зәйнулла улының портреты менән барыуын ир түбәндәгесә аңлатты:

– Бөйөк Ватан һуғышының иң ҡыҙыу көндәрендә Ҡыҙыл Армияны яҡлауын белдереп, И. В. Сталинға мөрәжәғәт итә, яңы танк колоннаһын йыйыу өсөн мосолман йәмғиәтендә аҡса туплай. Ғабдрахман Рәсүлев 1942 йылда барлыҡ СССР мосолмандарының герман фашизмына изге һуғыш иғлан итеүенең башында тора. Был хаҡта рәсми документ та төҙөлә. Диндарҙың әүҙемлеге дин өлкәһендәге дәүләт сәйәсәтен “йомшартыуға” булышлыҡ итә.

Айҙарҙың Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яҡындары юҡ түгел. Әлшәй районының Үрге Хәжәт ауылынан Мөхәмәтйәровтар ғаиләһенән һигеҙ ул яуға китеп, уларҙың бишәүе һуғышта башын һалған. Ағайлы-ҡустыларҙың икәүһе 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт иткән була. “Олатай-бабайҙарым менән ғорурланам һәм уларҙың ҡаһарманлығы алдында бай эйәм”, – ти ир. (“Йәшлек” гәзитенән)

- Телмәрҙә һөйләүсенең ниндәйҙер мәсьәләгә ҡарата мөнәсәбәтен белдергән һүҙҙәрҙе мөнсәбәт (модаль) һүҙҙәр тип атайҙар. Мөнәсәбәт һүҙҙәргә түбәндәге һүҙҙәр инә: *ахыры, бәлкем, буғай, ихтимал, исмаһам, моғайын, мәҫәлән, ғөмүмән, ғәҙәттә, ҡыҫҡаһы, ысынлап та, тимәк, йәнәһе, эйе, шикелле, бар, юҡ, кәрәк, мөмкин, тейеш, түгел, ярай, ярамай.*

***36-сы күнегеү. Текста осраған мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.***

“Бер ниндәй ҙә китап уҡымай, уҡырға ла теләмәй”, – тип күп кенә ата-әсәләр зарлана. Сөнки йәш быуын китап уҡыуҙы компьютер, телевизор, смартфонға текләнеп ултырыуға алмаштырған. Был – насар ғәҙәт. Беҙҙең заманда балалар уҡыуға айырыуса мохтаж. Шуның өсөн ата-әсә баланың китапҡа ҡарата һөйөү тойғоһон ғаиләнән башларға тейеш. Ғаиләлә бергә уҡыу йолаһы – ғаилә тәрбиәһенең бик мөһим өлөшө. Ата-әсәләр балаларға китап уҡығанда уларҙың ни тиклем ҡыуаныуын бөтәһе лә аңлап бөтмәй. Ике йәшкә тиклем көнөнә бер-нисә минут, ике йәштән һуң 15-20 минут уҡырға

кәрәк. Әҫәрҙең ниндәй булыуы түгел, ә уны атай йәки әсәй, олатай йәки өләсәй, ағай йәки апайҙың уҡыуы мөһим. Яҡын кешенең тауышы, китаптар һәм шәхси аралашыу йылылыҡ һәм берҙәмлек мөхитен булдыра. Уҡыу барышында бала әҫәрҙең структураһын, сюжетын үҙләштерә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, уның логик фекерләүе үҫешә. Балаға бәләкәйҙән уҡыу тормошҡа әҙерлектең тәүге этабы тип һанала. Әлбиттә, балаға китап һайлағанда йәшенә тура килгәнен алыу дөрөҫ, сөнки һәр йәшкә тап килгән әҙәбиәт бар. Ике йәштән бишкә тиклем шиғырҙар, һынағыстар, фольклор, алты йәштән һигеҙ йәшкә тиклем ҡыҙыҡлы геройҙар менән ҙурыраҡ әҫәрҙәр һайлау зарур. Туғыҙ йәштән ун өс йәшкә тиклем балалар тарих, яҙыусылар, тарихи шәхестәрҙең тормошо, эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһына, әхлаҡи мәсьәләләргә, дуҫлыҡ, мәхәббәт, бәхет тураһында фекерләүҙәр барлыҡҡа килә. 14 йәштән 18 йәшкә тиклем егеттәрҙең, ҡыҙҙарҙың да яратҡан темалары асыҡлана. Ни өсөн ололарға ла, балаларға ла китап уҡыу файҙалы? Китап уҡыу һүҙлек запасын һәм грамоталылыҡты арттыра, телмәрҙе байыта, хәтерҙе, фекерләүҙе үҫтерә, уйлап табыу ҡеүәһен арттыра.

Китап – ул хазина. Ошо хазинаны һаҡлайыҡ, уның менән дуҫ булайыҡ. Ғаилә менән китап уҡыу йолаларын ғаилә тәрбиәһе итеп алайыҡ! (“Салауат” гәзитенән)

- Ымлыҡтар – һөйләүсенең хис-тойғоларын белдергән һүҙҙәр: *ах, бәй, их, ура* һ.б.

***37-се күнегеү. Текста осраған ымлыҡтарҙы билдәләгеҙ.***

Әсәй кеше ни эшләргә тейеш һуң әле? Ял көнө бит. Асия башта ғаиләгә иртәнге сәйҙе эсерҙе. Сынаяҡ-маҙарҙы йыуғас, төшкөлөккә аш һалды. Урамдағы колонканан өйгә һыу ташыны. “Уф, аяҡтарым талды”, – тип, ял итеп алырға уйлағайны ла, мунса яғырға кәрәклеге иҫенә төштө.

Мунсаны яғып ебәргәс, ғаиләгә төшкө аш ашатты. Ҡашығаяҡты йыуҙы. Телевизор ҡарарға булғайны ла, бәй, кер йыуырға кәрәк. Асия инде шул тиклем арығайны, керҙәрен йылғаға сайҡарға барғас, баҫманан йығылды ла төштө. Иларға уйлағайны ла, әсәһенең бер ҡасан да күҙ йәшен күрһәтмәгәне иҫенә төштө. (З. Хәбибуллина)

- Предметтарҙан, күренештәрҙән, кешеләрҙән ишетелгән тауыштарға оҡшатыуҙы белдерә торған һүҙҙәр өноҡшаш һүҙҙәр тип атала: *шатыр-шотор, шаҡ-шоҡ, келт-келт, зыр-зыр һ. б.*

***38-се күнегеү. Текстан өноҡшаш һүҙҙәрҙе табығыҙ.***

Ҡорбан ғәйетенә барыусылар, туҡталып тәкбир әйтә-әйтә, түбән осҡа, мәсет яғына үтеп китте. Минең атайым да сығып уларға ҡушылды. Иртәнге сәй ғәйеттән һуң эселә. Беҙҙә бөгөн тары тәбикмәге бешкән. Оло инәйемдең ҡулы тейһә, унан майҙар тамып торасаҡ. Ниндәй һәйбәт нәмә – байрам! Яңы ыштандың бер кеҫәһенә көнбағыш, бер кеҫәһенә кипкән муйыл тултырып, мин ҡапҡа төбөнә сығып баҫтым. Ауыл өҫтөндә һеләгәйҙе ағыҙырлыҡ тәм аңҡый, һәр кем хәлдән килгәнсә, таба ҡыҙҙыра. Йыл буйы “һыйыр ағы” инмәгән – ҡатыҡ-һөт затын беҙ шулай тибеҙ – өйҙәрҙә лә бөгөн үҙенә күрә шыж-быж сыға. Берәүҙәр тәбикмәк, икенселәр ҡоймаҡ, өсөнсөләр ҡыҫтыбый, дүртенселәр май күмәсе бешерә. Бер аҙҙан, был еңел-елпе аштарҙың еҫе таралып бөтөр-бөтмәҫ үк, һауаға бешкән ит еҫе күтәреләсәк. Бына шул саҡта инде һин күкрәк тултырып һулыш алыуҙың ысын тәмен татыйһың. (М. Кәрим)

**Тәкдим ителгән әҙәбиәт исемлеге:**

Ахтямов, М.Х. Современный башкирский язык. Словообразование: учеб. Пособие [Текст] / М.Х. Ахтямов. – Уфа, 2000. – 152 с.

Зәйнуллин, М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология [Текст] / М.В. Зәйнуллин. – Өфө: БДУ, 2002. – 262 б.

Ишбулатов, Н.Х. Хәҙерге башҡорт теле [Текст] / Н.Х. Ишбулатов. – Өфө: Китап, 2000. – 210 б.

Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2006. – 344 б.

# IV. СИНТАКСИС

Синтаксис һөйләмдең төҙөлөшөн өйрәнә. Башҡорт телендә һөйләмдәрҙе нисә субъект тарафынан эш башҡарыуына ҡарап икегә бүләләр: ябай һәм ҡушма. Ябай һөйләмдәрҙә эш башҡарыусы берәү генә булһа, ҡушма һөйләмдәрҙә субъект икәү йә унан күберәк була.

- Ябай һөйләмдәрҙә, үрҙә әйтелгәнсә, бер генә субъект тарафынан эш башҡарыла йә уның тураһында хәбәр ителә. Һөйләмдең хәбәре ҡылымдарҙан һәм шулай уҡ башҡа һүҙ төркөмдәренән дә килә ала.

***39-сы күнегеү. Текста ябай һөйләмдәрҙе табығыҙ, уларҙың хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен билдәләгеҙ.***

Алтын Урҙа осоронда, бигерәк тә XIV быуат урталарынан, алыҫ ғәрәп иле Мысырҙа бер үк ваҡытта төрки телле фән һәм мәҙәниәт һиҙелерлек үҫеш ала. Һарайҙағы ҡаршылыҡтар, тәхет өсөн талаш-тартыш арҡаһында Урал, Волга, Яйыҡ буйҙарынан, Харәзмдән, Ҡырымдан бик күп ғалимдар, әҙиптәр Мысырға күсә. Үҙ сиратында Мысырҙа был дәүерҙә башлыса төркиҙәрҙән торған (уғыҙҙар, күберәк ҡыпсаҡтар) мәмлүктәр династияһы урынлаштырылған була. (Мәмлүк солтандары был илдә 1250 йылдан алып 1803 йылға тиклем хакимлыҡ итә).

Боронғораҡ дәүерҙә башҡорттар донъя халыҡтары тарихында һиҙелерлек ҡатнашҡан халыҡ булғандыр, күрәһең. Болғар дәүләтендә әйле башҡорттарының хандар династияһы, Дәшти Ҡыпсаҡта Башҡорт хандың хаким булып тороуы, урта быуаттарҙа Иранда Ғазан хан тигән башҡорттоң генерал дәрәжәһенә өлгәшеүе, Болғар дәүерендә йәшәгән Яҡуб ибн Ноғман, Ҡол Ғәли, йәнә башҡа шөһрәтле исемдәр шул фекерҙе дәлилләй. Алтын Урҙала урынлашҡан ҡыҫымға түҙә алмайынса йә башҡаса сәбәптәр арҡаһында Мысырға йыш ҡына башҡорттар ҙа барып юлыҡҡан. Улар араһында юғары ҡатлам мәмлүктәренән Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди менән Насретдин әл-Насыри үҙҙәрен дәүләт эшмәкәрлеге, ғилем һәм шиғриәт өлкәһендә танытҡандар.

Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡордиҙың Мысырҙа әмир булып торғанлығы билдәле. Уның исеме Әл-Факиһи тигән ғәрәп ғалимының “Мәккә тарихы”нда 1284 һәм 1290 йылдарҙағы ваҡиғалар айҡанлы телгә алына. Тәүге осраҡта ул: “Мәккәнең башлығы Әбүнума менән Мысыр әмире Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди һүҙгә килештеләр, шул арҡала Әбүнума Мәккәнең ҡапҡаларын бикләтте һәм берәүҙе лә ҡалаға индермәне...” –

тиелгән. Бынан ары китапта ошондай мәғлүмәт бирелә: “Мысырҙан хажға килеүселәр каруанының башы – Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди ине”. (Р. Шәкүр)

***40-сы күнегеү. Текста хәбәр вазифаһын башҡарған һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың ни өсөн күпселеге ҡылым булмаған һүҙ төркөмөнән килгәнен аңлатығыҙ.***

Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә.
Минең йөрәк тамырҙарым –
Башҡорт ерендә.
Өмөттәрем, хыялдарым,
Йөрәк тибешем –
Киң Уралым, йырлап аҡҡан
Һинең инешең.
Алыҫ-алыҫ яңғыраған
Моңло йырҙарым –
Мең инеште бергә йыйған
Көмөш һыуҙарың.
Яуҙар сапҡан улдарыңдың
Көсө – беләктә,
Ҡайғылары, шатлыҡтары –
Минең йөрәктә.
Күпме ҡайғы, күпме шатлыҡ
Күрһә тыуған ер,
Ер күргәнде, ил күргәнде
Һаҡлай туған тел.
Миллион кеше күкрәгендә
Күкрәй ул бөгөн,
Көрәш теле, хаҡлыҡ теле,
Йәнем ул минең.
Туған телем, һин халҡымдың
Былбыл тауышы,
Быуаттарҙан быуаттарға
Ҡанат ҡағышы. (Р. Шәкүр)

- Ябай һөйләмдәр баш киҫәктәрҙән (эйә һәм хәбәр) һәм эйәрсән киҫәктәрҙән (аныҡлаусы, тултырыусы, хәл) тора. Башҡорт телендә

иң төп һөйләм киҫәге булып хәбәр тора. Шуға күрә лә башҡорт телендә бөтә һөйләмдәрҙә лә хәбәр мотлаҡ була, ә эйә һәм эйәрсән киҫәктәрҙең булмауы ла мөмкин. Дәреслектәрҙә осраған атама һөйләмдәрҙең баш киҫәге итеп эйәне һанау, беҙҙең фекеребеҙсә, хаҡлыҡҡа тап килмәй: беҙ был баш киҫәкте хәбәр тип ҡарау яҡлыбыҙ.

***41-се күнегеү. Текста ябай һөйләмдәрҙәге баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе билдәләгеҙ.***

Билдәле бокссы Майк Тайсон 1992 йылда төрмәлә ултырғанда ислам динен ҡабул итә. “Ислам дине насар ғәҙәттәрҙән арынырға, күңел тыныслығы табырға ярҙам итте”, – ти ул. Малик Абдуль-Азиз тип исемен дә үҙгәртә.

“Йондоҙҙар фабрикаһында” ҡатнашҡан Мария Алалыкина иһә, ғәрәп егетенә кейәүгә сыҡҡас, ислам дине тураһында өйрәнә һәм, артабан, төрлө тәржемә китаптар аша таныштарына ла үҙе белгәндәрҙе һөйләй башлай. Бөгөнгө көндә белемгә ынтылышы көслө булғын был йырсы ғәрәп теле менән бергә алты сит телде белә, Ҡөрьәнде өйрәнеүҙән туҡтамай.

Британ йырсыһы Кэт Стивенстың исламға килеү юлы үҙе бер тарих. Малибуҙа ял иткәндә йырсы диңгеҙҙә бата башлай һәм ярҙам һорап Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итә. Көслө бер тулҡын уны ярға килтереп ташлағас, йырсы юғары көстәрҙең барлығына ышана. 1978 йылда Ҡөрьән уҡый башлай, дингә баҫа, Йософ Ислам тип исемен үҙгәртә. Һуңынан артист бер нисә ислам мәктәбе аса, хәйриә менән шөғөлләнә. (“Шоңҡар” журналынан)

- Ябай һөйләмдәрҙә бөтә төр тыныш билдәләренең ҡуйылыуы мөмкин. Өтөр тыныш билдәһе йыш ҡына ябай һөйләмдәрҙә һанау интонацияһы булғанда йәғни тиң киҫәктәр араһында ҡуйыла.

***42-се күнегеү. Текста һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәрҙе табығыҙ, улар араһында ҡуйылған өтөргә иғтибар итегеҙ, дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ.***

Туған телде өйрәтеүҙе балаға бишектән үк башларға кәрәклеген ата-әсәләр, олатай-өләсәйҙәр белһендәр ине. Әгәр мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалдырһаҡ, бала тулыһынса өйрәнә алмаясаҡ. Иң тәүҙә атай-әсәй туған телде белеүҙең мөһимлеген аңлатырға, телгә һөйөү тәрбиәләргә, өйҙә туған телдә аралашырға тейеш. Ә ғәйепте кемдәндер эҙләп, ҡуктән көтөп ултырыу – был

ғәфү итмәçлек оло хата. Икенсенән, ата-бабалар, өләсәйҙәр беҙгә аманат итеп ҡалдырған әсә телен, туған телебеҙҙе, йолаларҙы, сылтырап аҡҡан шишмәләй йырҙарыбыҙҙы белмәй үçкән бала – урманда, көтөүҙә аҙашып ҡалған ҡырағай хайуандай була. Ата-әсәләрҙең иң мөһим бурыстарының береһе – балаларын туған теленә өйрәте.

Мин мәрхүмкәйҙәрем – әсәйемә, өләсәйемә оло рәхмәтлемен. Ауылда мәктәп ябылып, бөтә балалар яҡындағы рус мәктәбенә уҡырға йөрөй башлағас, улар беҙҙе апаруҡ йыраҡтағы Таймаçҡа башҡортса уҡырға бирҙеләр. Яҙлы-көҙлө буранда, һыуыҡта йәйәү, көн матурҙа велосипедҡа атланып йөрөүе еңелдән булманы, әлбиттә. Әлеге, атай булмағас, алып барып ҡуйыусы юҡ, апайым менән өшөп-туңып ҡайтып керә торғайныҡ. Шулай ҙа дәрес ҡалдырған сағыбыҙ булманы, Аллаға шөкөр. Ваҡытында интернатта асығып, өшөп йәшәргә тура килһә лә, беҙ барыбер апайым менән үҙебеҙҙең туған телдә уҡыныҡ бит! Тик шуның арҡаһында ғына бер түгел ике юғары белем алып, тормошта үҙ урыныбыҙҙы таптыҡ, русса, инглизсә, ғәрәпсә лә нәҡ үҙебеҙҙең туған телебеҙ аша өйрәндек.

Бөгөнгө көндә ҙур көрәштәр, ауырлыҡтар менән яулап алынған, атай-бабайҙарыбыҙ һаҡлап беҙгә еткергән тыуған еребеҙҙә рәхәтләнеп йәшәйбеҙ, тормош көндән-көн яҡшыра, һәр ерҙә байлыҡ-муллыҡ, ҡыуанырлыҡ ҡына. Ләкин үҙәкте өҙҙөргән шундай мөһим мәсьәлә – әсә телен өйрәнеү тора. Тик туған телде яҡшы белгәндән һуң ғына уның аша башҡа телдәрҙе өйрәнергә мөмкин. Шунда ғына инде баланың, ата-әсәнең теләген һорарға мөмкин. Үҙ туған телендә тәрбиәләнгән, уны яҡшы белгән, ҡәҙерләгән кеше генә ысын кеше була ала, бөгөнгө буталсыҡ тормошта үҙ урынын, үҙ тәғәйенләнешен табып, аҙашмайынса бәхетле йәшәй ала. (Н. Хәлилова, “Юшатыр” гәзитенән)

***43-сө күнегеү. Шиғырҙа тиң киçәктәр араһында ҡуйылған өтөр тыныш билдәһенә иғтибар итегеҙ.***

Мәсеттән аҙан тауышы
бәрелеп диуарҙарға
бейек йорттар араһында
ҡабаттан тыуырға әҙер.
Миңә танһыҡ.
Ҡабатлайым
Инәлмәй ҙә, ҡыçтамай ҙа
һорамай ул аҡсамды.
Үҙе миңә фатихаһын,

хәйерен биреп китә.
Хәйерле булып ҡалыуҙан
мең рәхмәтлемен икән.
Ҡан менән дә, аң менән дә
ингән ул иманыма.
Тик электән инанырға
ниңәлер ҡыймағанмын…
Эҙләп табып алғандарға,
ҡапыл юлыҡҡандарға
күктән төшкән мөғжизә ул
һәм дә юғалтҡандарға.
…Мәсеттән аҙан тауышы
яңғырай кискә табан,
Күңелем тулды, ниҙер булды
ниҙер булыр артабан…(Ғ. Ишкинин)

- Ябай һөйләмдә тиң хәбәрҙәр араһында *да, дә, та, тә, да, дә, ҙа, ҙә* теркәүесе килгән осраҡта улар араһында өтөр ҡуйылмай (*Уҡытыусы бүлмәгә инде лә лекция һөйләй башланы*). Әгәр ҙә тиң хәбәрҙәр ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә булһа, был осраҡта улар араһында өтөр була (*Атайым балыҡҡа барҙы ла, тота алманы*).

- Ябай һөйләмдәрҙә өтөр тыныш билдәһе тағы ла айырымланған киҫәктәр янына ҡуйыла. Иғтибар итергә кәрәк: өтөр айырымланған киҫәктең ике яғынан да ҡуйыла, әгәр ҙә ул һөйләм башында йә аҙағында булмаһа. Башҡорт телендә өҫтәлмәлектәр, аныҡлаусылар, хәлдәр һәм хәл әйтемдәре айырымлана.

***44-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда айырымланған өҫтәлмәлектәрҙе табығыҙ.***

Ураҙа байрамы сабый саҡтан тылсым тулы, иң шатлыҡлы байрам булып иҫтә ҡалған. Был көнгә әсәйем әллә күпмегә алдан әҙерләнә башлар ине – туғандары һалған посылкаларҙағы тәм-том ашап бөтөлмәй хатта айҙар буйы һаҡлана. Безгә, бәләкәстәргә, күрһәтмәй генә бүләктәр алына. Байрам алдынан әсәйем айырым бер тырышлыҡ менән өйҙө таҙартырға тотона. Тәҙрә ҡорғандары, түшәк-йәймә, ашъяулыҡтар, сигеүле-селтәрле мендәр тыштары ап-аҡ итеп ҡайнатып йыуыла. Уларҙың һәр береһенә әсәйемдең күҙ

нуры нағышланған: әкиәти гөлләмәләр, суҡышына хат ҡыҫтырған күгәрсен, донъяла булмағанса сағыу ҡанатлы ҡоштар, күбәләктәр – һәммәһе әле лә күҙ алдында.

Иҙәнде бысаҡ менән ҡырып йыуғанды яратманы әсәйем, таҡтаһы сүбәкләнә, ти торғайны. Ҡаҙан тултырып һыу ҡайнатабыҙ, шунан башлана инде эш. Ҡул түҙер-түҙмәҫ ҡайнар һыуға һалабаш йыуғыстар һалып, беҙ, береһенән-береһе бәләкәй өс ҡыҙы, ваҡ ҡына йыуғыстар алып күперткәнсе һабынлап иҙән ышҡыған булабыҙ. Эште тамамлағас, маҡтала-маҡтала сәй менән һыйланабыҙ, берәр кәнфит тә эләгә – хан һыйы инде. Самалап ҡына ҡабып сәй эскәс, ҡалғанын йыйып ҡуябыҙ – гел тәтеп тормай ҙаһа. Өйгә тәмле булып еүеш ағас еҫе тарала. Иҙән кипкәс, затлы паркеттарың ары торһон - ялтырап ята. Һәр баҫҡан эҙең полировкалағы кеүек тап ҡалдыра. Шуға оло яҡҡа бик индермәйҙәр. Әсәйемдең аллы-гөллө сигеүҙәре үҙ урынын ала: һырлы рамлы дәү көҙгө башына ла, стеналарға ла, тәҙрәгә лә, карауат, радио, өҫтәл өҫтәренә лә тәғәйенләнгәндәре бар. Бөтә ерҙә аҡлыҡ-паклыҡ.

Байрам еткәс, иртә менән әсәйем шым ғына тороп мейес яға, өйгә ҡоймаҡ еҫе тарала. Һәр ваҡыттағыса һамаҡлап беҙҙе уята: “Тороғоҙ, ҡолонсаҡтарым, йөрәкәстәрем, бәхетте таң атҡанға тиклем тараталар”, – тип башыбыҙҙан һыйпай. Бер аҙ ғына наҙланып ятҡас, өсөбөҙ ҙә һикереп торабыҙ - әсәйемдең бүләктәр әҙерләгәнен, таҫлап үтекләгәнен кистән шым ғына күҙәтеп яттыҡ инде.

Өсөбөҙҙө лә ғөсөл ҡойондороп, әсәйем беҙгә ап-аҡ эске кейемдәр кейҙерә. Бер иштән теккән шау биҙәк яңы күлдәктәр һона. Ап-аҡ, селтәрлекәй ебәк ойоҡбаштарҙы кейә һалып алабыҙ. Ошо көнгә тип һалып ҡуйған аллы-гөллө ебәк таҫмалар менән сәстәребеҙҙе үрә. Өйөбөҙ нур эсендә йөҙгәндәй, ә һеңлеләрем гәлсәр төҫлө үтә күренә башлағандай тойола миңә шул саҡ.

Сигеүле ап-аҡ ашъяулыҡ өҫтөнә теҙелгән һый-ниғмәттәрҙе ауыҙ итер мәл дә етә. Үзбәкстандан апаһы ебәргән йөҙөм-өрөктәр, Дүртөйлө сәтләүеге, йәй үҙебеҙ йыйған еләк ҡайнатмалары – табын түрендә. Дүрткел кәсәләрҙә хуш еҫе аңҡып торған алһыу кеҫәл. (Г. Ситдиҡова)

***45-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда айырымланған сифаттарҙы табығыҙ.***

Хәлимә, бахыр, ана шул ситлек эсендә ултыра икән, уның бында икәнлеген бер кем дә белмәгән, ти. Ул, шундай тотҡон булып ултыра торғас, алһыу йөҙө һарыға һабышҡан. Ә ситлек сығып ҡасырлыҡ түгел: сит-ситтәре

бик ныҡ, түшәм кеүек нәмәһе бик бейек булған, тик ишеге аҫтында ҡаҙ бәпкәһе һыйырлыҡ ҡына бер тишек бар икән. (Әкийәттән)

***46-сы күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда айырымланған хәлдәрҙе табығыҙ.***

Хатип хәҙрәт алтмыш алты йәшендә гүр эйәһе булып ҡуйғас, Мансур хәҙрәт Оло Үтәш мәҙрәсәһендә атаһы урынына өлкән мөдәррис, мәсеттә имам-хатип булып ҡала һәм ундағы уҡытыу эштәрен, атаһы аманат иткәнсә, уңышлы дауам иттерә. Атаһының рухташ дуҫтары, дин ғалимдары Зәйнулла ишан, Ғабдулла Сәйеди мәҙрәсәләре үрнәгендә уҡытыу планына яңы фәндәр — арифметика, астрономия, тарих, ботаника, география фәндәрен индерә. Ауырыуҙы һауыҡтырыу, сихәтләндереү ысулдарын өйрәнеү буйынса ла дәрестәр биреүҙе кәрәк таба. Шәкерттәр боронғо табип Ибн-Синаның ун алты томлыҡ китабын ҡулдан күсереп яҙып йөрөй, шунан дауалау серҙәренә өйрәнә. Шулай уҡ, ғәрәп, фарсы телдәре менән бер рәттән, шәкерттәр урыҫ телен дә яҡшы белергә тейеш, тип иҫәпләй мөдәррис. Өфөгә барып, “Ғәлиә” мәҙрәсәһенең етәксеһе Зыя Камали менән кәңәшләшеп, мәҙрәсәгә урыҫ телен яҡшы белгән уҡытыусылар алып ҡайта. “Ғәлиә” мәҙрәсәһен алдынғы сафтарға сығарған Зыя Камали һәм уның мәҙрәсәһендә уҡыған буласаҡ халыҡ артисы Ғәзиз Әлмөхәмәтов, рәссам Ҡасим Дәүләткилдеев, башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәтенең буласаҡ етәксеһе Зәки Вәлидов, буласаҡ нарком Исмәғил Солтанов, шағир Мәжит Ғафури һымаҡ алдынғы ҡарашлы шәкерттәр менән аралашыу Мансур хәҙрәттең рухын байыта, тормошҡа ҡарашын, үҙаңын киңәйтә һәм алдағы йылдарҙа Башҡортостан милли азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусылар рәтенә баҫырға ярҙам итә. Оло Үтәштә өр-яңы мәсет ҡалҡып сыға, тирә-яҡ ауылдарҙан бында күсеп килеп ултырыусылар һаны арта, ауыл шул төбәктең рухи һәм мәҙәни үҙәгенә әүерелә. Шулай уҡ Оло Үтәш мәҙрәсәһендә белем һәм тәрбиә алып сыҡҡан шәкерттәр аҙаҡ башҡорт ғәскәренең төп рухи етәкселәре, таянысына әйләнә: улар полк муллалары, табиптар булып китә. Белемле, киң эрудициялы, милли рухлы, төплө аҡыллы, үткер телле, ораторлыҡ һөнәрен яҡшы үҙләштереүгә өлгәшкән, Зәки Вәлидовтың яҡын дуҫы булған Мансур Халиҡов илдә барған ҡатмарлы сәйәси ваҡиғаларҙың һәр саҡ үҙәгендә ҡайнай. Халҡыбыҙ яҙмышына бәйле иң мөһим мәсьәләләр хәл ителгән Беренсе, Икенсе, Өсөнсө Бөтә башҡорт ҡоролтайҙарында ҡатнашып, унда сығыштар яһай. 1917 йылдың апрель айында үткәрелгән Өфө губернаһы мосолмандарының Милли шураһы ойошторған съезда Мансур Халиҡов ер мәсьәләһен күтәреп сыға. Ул ҡыйыу сығышында халҡыбыҙ өсөн иң мөһим

булған мәсьәләне – ер мәсьәләһен ҡабырғаһы менән ҡуя: “Ерһеҙ халыҡ – илһеҙ халыҡ”, – ти ул. (Л. Яҡшыбаева)

***47-се күнегеү. Тексты уҡығыҙ, унда айырымланған ваҡыт хәлдәрен табығыҙ.***

Ниһайәт, «Сәбах»ҡа ҡайтып киттек. Беҙҙең беренсе көн шулай үтте. Киске һалҡындан ҡурҡып, Туҡай сығып йөрөмәҫ булғас, мин ҡайтып киттем. Икенсе көн, нисек тә ваҡытты күңелле уҙҙырыр өсөн, Туҡайҙы резиновый ходлы арбаға ултыртып, бик иркенләп йөрөһә килә ине. Мин ат табырға ла вәғәҙә иткәйнем. Ләкин был эш тә булманы. Бер-ике кешегә мөрәжәғәт итеп ҡараһам да, эш сығара алманым. Туҡай бөгөн кисәгенән кәйефле ине.

Өфөнөң һауаһы килешкәнен, кәйефе төҙәлгән һымаҡ булыуын һөйләне. Тағы ла йөрөргә сыҡтыҡ. Фәҡәт беҙҙе шул барыр ер булмау ғына бер аҙ иҙә ине.

Туҡай ғаилә тормошон артыҡ һөймәгәнгә, уны ғаилә эсенә алып барырға теләү бушҡа китәсәк булғанға, ул яҡты әйтеп торманым.

Беҙ, яҙғы ҡояш аҫтында бер аҙ йөрөп, берәй ергә кереп ултырырға ҡарар иттек. Беҙ бөгөн матурыраҡ бер ергә керергә муафәҡ булдыҡ. Ҡояшҡа ҡаршы булған был залды Туҡай үҙе лә яратты.

Беҙ инде бында бик иркенләп ултырмаҡсы булдыҡ. Эштәр, Туҡай теләгән рәүештә, бик шәп китте.

Бик кәйефле ултырған ваҡытта, Туҡай биҙгәк тотҡан кеүек ҡалтырана башланы. Унын шундай ваҡытта йота торған порошогы «Сәбах»та ҡалғанға күрә, дарыуҙы ебәртеп алдырырға тура килде. Ул дарыуҙы эскәндән һуң Туҡайҙың ҡалтырауы баҫылып, бер аҙ кәйефе төҙәлде.

Баштараҡ Туҡай ҙа, мин дә һүҙ таба алмаған кеүек, бер-беребеҙҙең күҙебеҙгә ҡарашып, тик ултыра инек. Бара торғас, беҙҙең мәжлес бик күңелле булып китте. Күберәк һүҙҙәребеҙ шиғыр вә шағирҙар, Ҡазан һәм дә мөхитебеҙ хаҡында ине. Туҡай Ҡазандағы тормошонан ялҡҡанын, шул сәбәпле ҡымыҙға иртәрәк булһа ла, Ҡазандан китергә ашыҡҡанын һөйләне. (М. Ғафури)

- Һөйләмдең баш киҫәктәре икеһе лә бер үк һүҙ килһә, улар араһында һыҙыҡ ҡуйыла.

***48-се күнегеү. Шиғырҙы уҡығыҙ, эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтарын билдәләгеҙ.***

Ә зыяратта – тынлыҡ. Әйтерһең дә,
Хатта ваҡыт ҡалған туҡталып.
Бәндә ғүмеренә шаһит таштар
Ҡибла яҡҡа тора уҡталып.
Тик бындағы ошо серле тынлыҡ
Күңелдәргә бирмәй тыныслыҡ.
Тормош – дарья. Кеше ғүмерҙәре –
Шунда йөҙгән кескәй юнысҡы.
Ҡәберлектә – боронғолоҡ рухы,
Мәйет есе килмәй үлемдән.
Күпме бәндә менән заман заңы
Тупраҡтарға бергә күмелгән.
Йыһандарға һыймаç әҙәми зат
Күреп белә ҡәбер тарлығын.
Ниндәй йәмдәр табып йәшәй кеше,
Аңлай тороп үлем барлығын...
Әллә ниңә ошондағы шомлоҡ
Уйландыра йәшәү хаҡында.
Байлыҡ, дандар – кәртә арттарында,
Рухи сафлыҡ ҡына хаҡ бында.
Зыярат – фәһем, мәғәнә лә төçлө,
Ер-әсәгә һеңһен хаҡ бәндә.
Ҡәберле лә булыу – бәлки, бәхет,
Нисек баһаларҙар “тегендә”?..
Әллә ниңә ошо ҡәберлектә
“Йәшәү – бәхет!” – тинем. Әкәмәт...
Намыç ташлар сиктән йолоп алһын
Хоҙайыма илтер мәрхәмәт. (Л. Абдуллина)

- Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле йәки береһен икенсеһе асыҡлаусы, икенсе төрлө атаусы тиң хәбәрҙәр араһында һыҙыҡ ҡуйыла.

***49-сы күнегеү. Текста һыҙык ҡуйылыу осраҡтарын билдәләгеҙ.***

Ислам динендә милләт юҡ тигәне – Алланың бар милләттәргә лә бер тигеҙ итеп ҡарауы, милләттәрҙең үҙ-ара ихтирамлы мөнәсәбәте тип аңларға кәрәктер. Диндә раса, милләт нигеҙендә ҡыйырһытыуҙар ғәйепләнә. Бар милләттәр ҙә ергә тиң хоҡуҡлы булып өсөн килгән. Һәммә милләттәр, төрлө сәскәләр кеүек, ер шарында бер матур гөлләмә тәшкил итә. Мәгәр ғаилә ҡорғанда милләткә иғтибар итеү бик кәрәк. Милләт – ул тәбиғәттәге бер

сәскә кеүек. Мәçәлән, рауза сәскәһе. Уны ҡайҙа ултыртһаң да, ул рауза булып үçә, рауза булып сәскә ата. Умырзая менән дә, боланут менән дә ҡатнашмай. Уның үçер өсөн тейешле мөхите, шарттары булыуы кәрәк. Милләт тә шулай, үҙен һаҡларға, үçтерергә тейеш. (Гүзәл Ситдиҡова)

***50-се күнегеү. Текстағы дефис һәм тире ҡуйылған һөйләмдәрҙе табығыҙ. Был тыныш билдәләренең ҡуйылыу сәбәптәрен аңлатығыҙ.***

"Башҡорт телендә һөйләшәм, башҡорт телендә яҙам" девизы аçтында ойошторолған диктант – хатаһыҙ яҙыу мәҙәниәтен популярлаштырыу һәм үçтереү мәсьәләләренә иғтибарҙы йәлеп итеүгә йүнәлтелгән һәм теләге булғандарҙың барыһы өсөн тәғәйенләнгән, йыл һайын үткәрелеп килгән ирекле, түләүһеҙ белем биреү акцияһы булып тора. Өфө был сараның үҙәге булды. Төп майҙансыҡ Башҡорт дәүләт университеты бинаһында урынлашты һәм унан республика район-ҡалаларындағы, Ҡазан, Ырымбур, Силәбе, Ханты-Манси, Пермь, Санкт-Петербург һәм Мәскәү ҡалаһындағы майҙансыҡтар менән Онлайн трансляция булдырылды. Шулай уҡ Монреаль, Оттава һәм Торонто (Канада), Нью-Йорк һәм Лос-Анжелес (США), Стамбул һәм Анталия (Төркиә), Гуанчжоу һәм Пекин (Ҡытай), Нурсолтан (Ҡаҙағстан) һәм башҡа сит илдәрҙә майҙансыҡтар эшләне. ("Урал" гәзитенән)

- Ике нөктә тыныш билдәһе һөйләмдә асыҡлау интонацияһы булған осраҡта ҡуйыла.

***51-се күнегеү. Текста ҡуйылған ике нөктәле һөйләмдәрҙе табығыҙ, ниндәй һөйләм киçәге ниндәй һүҙҙәрҙе асҡлағанын билдәләгеҙ.***

Сусҡа итенең кеше организмына зарарлы булыуын аңлатҡан бик күп фәнни асыш бар. Әле 1982 йылда уҡ СССР-ҙың Туҡланыу институты материалдарында ошондай һығымта бар ине: "Мясо свинины не может быть хорошей пищей – свинья питается отбросами, поэтому располагает к гниению и другим неприятностям". Хәҙерге заман ғалимдары әйтеүенсә, сусҡа күп ашай, бысраҡта соҡона, сысҡан, ҡомаҡтарға ташланып, тотһа, ашай, үләкһә һәм кеше хәжәтенән ҡалған тиҙәктәрҙе лә ашай. Уның тәнендә зарарлы паразиттар, микробтар, вирустар тиҙ урын таба, күбәйә. Сусҡа ите ҡурҡыныс, тиҙ генә дауалап булмай торған бик күп ауырыу килтереп сығара – аскаридоз, тениидоз, япон энцефалиты, сусҡа киҙеүе, бруцеллез, туберкулез, холера. Барыһы 57 йоғошло ауырыу, унан башҡа, аллергия, ревматизм, эренле тире ауырыуҙары шул арҡала сыға. Сусҡа майы организмда эшкәртелмәй, шул килеш туҡымаларға ултырып ҡала. Шул май

арҡаһында (ауыр эшкәртелә, тиелгән) кешенең гел ашағыһы килеп тора. Кеше һимерә, уны май баҫа. Психологтарҙың күҙәтеүҙәре буйынса әйтелгән бер фекер бар: суҫҡа ите ашаған кешегә әлеге хайуандың тиҫкәре бер тәбиғәте һәм холҡо ла күсә. Рустар юҡҡа ғына: “Ни ашағаныңды әйт, мин һинең кем икәнеңде әйтермен”, – тимәгән. Суҫҡа ялҡау, бысраҡ, ҡомһоҙ хайуан булғас, аңлашыла инде, уны ашағас кемгә әйләнеүебеҙ. Элегерәк табиптар ҙа ҡайһы бер ауырыуҙарға суҫҡа итен ашауҙы тыя торғайны.

Риүәйәттәрҙән килгән бер ваҡиға бар: Муса (ғ.с.) дәүерендә йәшәгән йәһүдтәрҙән бер төркөм кафырҙы Аллаһы Тәғәлә – маймылдарға, икенселәрен суҫҡаға әйләндергән. Был һүҙҙән аңлашыла, суҫҡа ите ашаған кеше кеше ите ашаған кеүек була. Суҫҡаның бауыры ла кешенеке менән бер төрлө булғас, уны кеше организмына күсереп ултыртыу ысулы бар. Аҡһымы иһә кешенеке менән бер төрлө икән. Шуныһы ғәжәп, татар-башҡорт фермерҙары ла суҫҡасылыҡ менән шөғөлләнә. Яңыраҡ ТНВ каналынан бер фермер, суҫҡаларҙы хәләл (бына һиңә мә?!) итеп үрсетәбеҙ, тәрбиәләйбеҙ, тине. Суҫҡа суҫҡа булалыр инде ул. Ҡөрьәндәге хәрәм хәләл була алмаҫ. Суҫҡа аҫраусыларға ауырыуҙар күсеүе миҫалдары бар. Америка ғалимдары 1918 йылда ҡырылған мәйеттәрҙе тикшереп, уларҙың суҫҡа киҙеүенән үлгәнен иҫбатлаған. Ул ваҡытта донъяла 21 миллион кеше, шул иҫәптән Америкала 700 мең кеше үлгән. (З. Көҫәпова, “Йәшлек” гәзитенән)

- Һөйләмдең тотош йөкмәткеһенә йә ундағы айырым һүҙҙәргә асыҡлыҡ индереү өсөн йәйәләр ҡулланыла.

***52-се күнегеү. Текста осраған йәйәләрҙе табығыҙ, уларҙың ҡуйылыу сәбәптәрен аңлатығыҙ.***

Ҡөрьән – мосолмандарҙың иң ҡәҙерле, иң изге китабы. Үҙенсәлекле фәнни-фәлсәфи һәм хоҡуҡи әһәмиәткә эйә булған был ҡомартҡы ғәрәптәр һәм ислам динен тотҡан башҡа халыҡтар өсөн генә түгел, бәлки бөтә донъя мәҙәниәтенә һәм мәғрифәтенә бик ҙур йоғонто яһаған, тиңдәше булмаған әҫәр. Ә инде уның шәреҡ халыҡтарының дөйөм үҫешенә, тормош ҡанундарына индергән өлөшөн баһалап бөтөү мөмкин түгел. Донъялағы өс оло диндең береһенең нигеҙен тәшкил иткән был әҫәрҙе Европа телдәренә тәржемә итеү XII быуатта уҡ башланған. Рәсәйҙә Ҡөрьәнден, рус телендәге беренсе тәржемәһе Петр 1-нең ҡушыуы буйынса 1716 йылда баҫтырып сығарыла. Һуңғараҡ уны Ислам динен тотоусы халыҡтарҙың телдәренә лә тәржемә итә башлайҙар. Шулай итеп, Ҡөрьәнде башҡортса уҡыу ихтыяжы күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә ине. Ошо ғәйәт ҡатмарлы бурысты аңлап,

халҡыбыҙға үҙ телендә Ҡөрьән биреү теләге менән Дан Мәхмүт улы Кинельский (билдәле сәбәптәр арҡаһында 1937 йылдан һуң Абдулла Мәхмүт улы Иҙрисов шул исем менән йәшәгән) 1962 йылда эшкә тотона һәм уафатының алдынан, 1983 йылда, уны тамамлап ҡуя. Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал»дың хәстәрлеге менән ойошторолған беҙҙең ижади төркөм шул тәржемәне камиллаштырыу өҫтөндә эшләне.

Ислам дине тәғлимәте буйынса, ул Алла тарафынан Ябраил фәрештә аша төрлө ваҡыттарҙа Мөхәммәт бәйғәмбәргә егерме өс йыл буйына бирелгән. Төрлө өйрәтеүҙәрҙән, дини бойороҡтарҙан, өгөт-нәсихәттәрҙән, кәңәштәрҙән торған был китап рифмалы проза (көйлө нәҫер) рәүешендә ижад ителгән. Ҡөрьән сүрәләргә, сүрәләр аяттарға бүленә. Ҡөрьәндә бөтәһе 114 сүрә, төрлө иҫәп буйынса 6204 - тән 6236 - ға тиклем аят бар. Хәҙерге ғалимдар ҡулланылышта булған Ҡөрьәндең төп нөсхәгә тура килеүенә һәм уның Мөхәммәт бәйғәмбәр аша индерелеүенә шик тотмай. Көндәлек тормошта (намаҙҙа, исем ҡушҡанда, ижаб ҡылыуҙа, мәйетте һуңғы юлға оҙатканда һ. б.) бөтә сүрәләр ҙә уҡылмай. Диндар кешеләргә Әл-Фатиха (Әлхәм) сүрәһен, Әл-Бәкара сүрәһенең 255-се (Ҡөрьәндең ҡайһы бер баҫмаларында 256-сы аяттан башлана) аятынан башлап сүрә бөткәнсе (Аятел Көрсиҙе), Йасинды, Әл-Мөлөк сүрәһен (Тәбәрәкте) һәм китаптың һуңғы өлөшөндәге уаҡ сүрәләрҙе белеү етә. Китап тулыһынса Ҡөрьән сыҡҡанда ғына уҡыла. (Башҡортса Ҡөръән тәржемәһенән)

- Тырнаҡтар эсенә тура телмәр, текст эсендәге өҙөктәр, төрлө ойошма исемдәре һәм башҡа атамалар алына.

***53-сө күнегеү. Текста осраған ҡайһы бер һүҙҙәрҙең ни өсөн тырнаҡтар эсенә алынғанын аңлатығыҙ.***

“Башҡортостан” гәзитенең “Иман” исемле махсус битендә иһә килтерелгән ябай халыҡты борсоған һорауҙарға Нурмөхәмәт Хәҙрәттең дингә таянып ҡайтарған тулы яуаптары тәкдим ителә, бөгөнгө йәшәйештең дин ҡанундарына тап килмәүе, төрлө проблемаларҙың хәл итеү юлдары асыҡлана. “Шоңҡар” журналының “Иман нуры” рубрикаһында ла тап ошондай көнүҙәк дини мәсьәләләр яҡтыртыла. Бынан тыш дин темаһына Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты тарафынан сығарылған “Рисәләт” газетаһы, шулай уҡ “Киске Өфө”, “Йәшлек”, “Толпар” кеүек республика баҫмаларында күп яҙыла. БСТ каналында “Йома” тапшырыуы айырыуса ҙур иғтибарға лайыҡ. Программа тамашасыларҙы ислам дине тәғлимәттәре, мосолман мәҙәниәте, йолалары менән таныштыра. Ҡөръәндән

аяттар яңғырай, арҙаҡлы дин әһелдәребеҙҙең тормошо, яңы дингә килгән йәштәр, динле ғаиләләр хаҡында сюжеттар төшөрөлә. “Юлдаш” каналында “Иман. Исламдың әхлаҡи ҡиммәттәре” тапшырыуында һәм “Ашҡаҙар” радиоһында “Фатиха” тапшырыуында дини байрамдар, ҡөръән мәжлестәре тураһында, дин өлкәһендәге яңылыҡтар эфирҙа яңғырай. (Н. Әхмәтйәнова)

***54-се күнегеү. Түбәндәге текста тырнаҡ эсенә алынған һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ, уларҙы тырнаҡ эсенә алыу сәбәбен аңлатығыҙ.***

Хиджама ғәрәп теленән “һурып алыу” тип тәржемә ителә. Йәғни ул капиллярҙарҙан ҡанды һурып ала. Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе үк был ысулдың бик файҙалы булыуын, күп ауырыуҙарға шифа биреүен, ләкин билдәле нөктәләрҙе белеп кенә эшләргә кәрәклеген әйткән. Бөгөн төрлө тәжрибәләр үткәреп ҡарап, ғалимдар уның һөҙөмтәлелегенә хайран ҡалған. Ул ҡан баҫымын нормалләштергән, ҡан ағыҙыуҙан һуң шештәр, яман шештәр, тамырҙарҙың варикоз киңәйеүе бөткән, эндокрин системаһы эшмәкәрлеге тергеҙелгән. Был процедураны бөтөн тәнгә эшләргә мөмкин. Сүриә, Франция, Америка медиктары хиджаманың иммунитетты нығытыуын һәм дауаланыуҙың ысынлап та дөрөҫ ысул икәнен белдерә. Был иһә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең: “Дауа - өс нәмәлә: бал эсеүҙә (борон бал ҡортоноң балын кәсәләп эскәндәр), хиджамала һәм көйҙөрөп дауалауҙа”, – тигәнен раҫлай. Рәсәйҙә 5 йыл элек хиджама процедураһы популярлашты. Нимә һуң ул? Хиджама – ул кешене бөтә төр ауырыуҙарҙан ҡан ағыҙыу юлы менән дауалау. Беҙҙең эраға тиклем ул билдәле булған. Ҡан ағыҙыу - иң ябай, әммә һөҙөмтәле юл менән ауырыуҙар тәненән бысраҡ ҡанды сығарыу. Ҡан ағыҙыуҙы мосолман календары буйынса һәр айҙың 17, 19, 21 көнөндә эшләү һәйбәт. Дүшәмбе, шишәмбе, кесаҙна көндәре бик уңышлы һанала. Әлбиттә, кеше организмы үҙенсәлекле, шуға күрә табип менән кәңәшләшергә кәрәк. Хиджама простатит, геморрой, диабет, гепатит, ревматизм, баш һәм муйын ауыртыуҙарын ала. Ошо өлкәлә эшләгән белгестәр хиджама ярҙамында мәңгелеккә хроник арыу, артроз, эсәк, бауыр, күҙ ауырыуҙарынан, йөрәк-ҡан тамырҙары, бронхиаль астма, ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарынан ҡотолоп булыуын иҫбатлай. Ҡан ағыҙыу Санкт-Петербург, Ҡазан, Пермь, Саранск ҡалаларында киң танылыу яулаған. Ошо ысул менән дауаланыусылар әйтеүенсә, кәүҙә еңеллек тоя, түгелгән көс кире ҡайта. (“Торатау” гәзитенән)

## Тәкдим ителгән әҙәбиәт исемлеге:

Аҙнабаева Ә.М., Латыпов Д.Р. Башҡорт телендә айырымланған эйәрсән киҫәктәр. - Өфө: Китап, 2006.

Тикеев, Д.С. Хәҙерге башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы : [Юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек] / Д. С. Тикеев. – Өфө : Ғилем, 2002. – 175 б.

Сәйетбатталов, Ғ.Ғ. Башҡорт теле. Ҡушма һөйләм синтаксисы. 2-се том [Текст]: учебник / Ғ.Ғ. Сәйетбатталов. – Өфө: Китап, 2001. – 432 б.

Сәмситова, Л.Х. Хәҙерге башҡорт теле. Ҡушма һөйләм синтаксисы: Курс программаһы [Текст]: программа / Л.Х. Сәмситова. – Өфө: Вагант, 2005. – 32 б.

Сәмситова, Л.Х., Таһирова, С.А., Рәхимова, Э.Ф., Исламова, Т.М. Башҡорт теле. Ҡушма һөйләм синтаксисы: Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы [Текст]: учебное пособие / Л.Х. Сәмситова, С.А. Таһирова, Э.Ф. Рәхимова, Т.М. Исламова. – Өфө: Китап, 2017. – 208 б.

## ДӨЙӨМ КҮНЕГЕҮҘӘР

***1-се күнегеү.*** *Түбәндәге текстарҙы күсереп яҙығыҙ, тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, уларҙың ҡуйылышын аңлатығыҙ.*

Ауылына ҡайтҡан саҡтарҙа Мәжит Ғафури йыш ҡына Хатип хәҙрәттең ҡыҙы Шәкирә инәйгә инеп һөйләшеп ултыра торған булған. Мәрхүмә Шәкирә инәй яҡындарына түбәндәгеләрҙе һөйләп ҡалдырған Яңы заман килгәс атайымдың шәкерте шағир Мәжит ағай телен тыйырға мәжбүр була. ГПУ тарафынан бер ғәйепһеҙгә яла яғылып “халиковшина” тип мөһөр баҫылып был тирәнән төбө-тамыры менән йолҡоп ырғытылырға тейешле ҡәүем тураһында яңы властар алдында һәр әйтелгән артыҡ һүҙ өсөн төрмә йә һөргөн көткән заманда дөрөҫөн һөйләргә күрәһең йөрьәт итә алмай ул. Әммә икәүләп кенә ултырып һөйләшкән саҡтарҙа үҙенең остазын бик яратып ололоҡлап хәтерләй рухына доғалар ҡыла ине. “Беҙҙең хәҙрәт һымаҡ кеше булмаҫ та инде бигерәк тә саф күңелле ғәҙел тоғро булды. Үҙемдә булған барлыҡ яҡшы сифаттарым уңыштарым өсөн мин уҡытыусыма бурыслымын. Ул мине мәшһүр ғилем эйәһе Зәйнулла ишанға ебәреп уҡытты. Ғилем серҙәренә төшөнөүемде теләне...” (Л. Яҡшыбаева)

***2-се күнегеү.*** *Профессор М.Ғ. Усманованың “Башҡортостан” гәзитендә сыҡҡан “Телебеҙҙе кем боҙа – үҙебеҙ” исемле мәҡәләһен уҡығыҙ. Телмәрҙәге тағы ла ниндәй хаталарға һеҙ иғтибар иткәнегеҙ бар.*

Иң беренсе бәлә – урыҫ теленә ныҡ эйәреүҙә: тура тәржемә яһайбыҙ, урыҫ ҡалыбын файҙаланабыҙ, һөҙөмтәлә башҡорт хәрефтәре менән яҙылған, әммә аңлайышһыҙ һөйләмдәр килеп сыға. Икенсенән, һөйләмдә һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса дөрөҫ ҡулланмайбыҙ. Миҫал: “Юбилейығыҙ менән ҡотлап, һеҙгә йыр-күстәнәс тапшырабыҙ”. Беҙҙең заманда “күстәнәс” тиһәләр, фәҡәт ашап була торған нәмә күҙ алдына баҫа ине. Хәҙер, баҡтиһәң, йыр ҙа күстәнәс була икән. Бындай осраҡта һүҙлектәр ярҙамға килә. Хәҙер уларҙың ниндәйе генә юҡ! “Башҡорт теленең һүҙлеге”ндә күстәнәс һүҙенә ошондай аңлатма бирелгән: күстәнәс – бүләк итеп алып киленгән йәки ебәрелгән ашамлыҡ. Урыҫ та был төшөнсәне бутап йөрөтмәй, уларҙа подарок, гостинец тигән һүҙҙәр бар. Бала сағым өләсәйем, әсәйем алып ҡайтҡан күстәнәстәрҙе ашап, бүләктәрҙе алып ҡыуаныуым менән хәтерҙә ҡалған. Шуға күрә әле лә кемгә булһа ла бүләк ебәрергә тура килһә, уның янына күстәнәс, йәғни ашай торған нәмә һалып ебәрәм. Әйткәндәй, башҡорттарҙа ҡунаҡтарыңа күстәнәс биреп ебәреү йолаһы бар. Өйҙә бит һинең ҡайтҡаныңды көтөп торалар. Шул ваҡытта ҡәҙерлеләреңде ҡунаҡтан

биреп ебәрелгән күстәнәс менән ҡыуандырһаң, ҡайһылай һәйбәт! Тағы ла миҫал килтерәйек: иҫәптән төшөү таныҡлығы ҡабатлап бирелмәй, юғалтылған осраҡта, күсермәһе лә эшләнмәй. Бында ҡабатлап урынына яңынан йәки ҡабаттан тигән һүҙ кәрәк. Юғалтылған осраҡта тигәнде юғалтһаң тип яҙғанда аңлауы ла, уҡыуы ла еңел була һәм ул дөрөҫ форма. Ҡояш сыға, тип яҙалар. Дөрөҫө – ҡояш ҡалҡа. Колбасалағы яҙыуҙарҙа ат ите тигәнде күрергә мөмкин. Йылҡы ите була ул. Шулай уҡ “Колбасаны нәҙек итеп турайбыҙ” тип һөйләйҙәр. Башҡорт телен белгән кеше был осраҡта йоҡа тип әйтә. Төргәктәге ҡағыҙҙың буйы түгел, ә оҙонлоғо тип яҙыу дөрөҫ. Өсөнсөнән, ялғау бөтөнләй кәрәкмәгән урында өҫтәп яҙыла. Был йәһәттән күплек ялғауы беренсе урында тора. Мәҫәлән: Ҡулдарымды йыуып киләм. Башҡорт ҡулымды йыуам, итегемде кейәм, күҙемә дарыу һалам тип һөйләй һәм был ваҡытта ике ҡулы, ике аяғы, ике күҙе тураһында һүҙ алып бара. Башҡорт телендә һан янында исем бер ваҡытта ла күплектә килмәй. Ун бала, ике мең һум аҡса һәм башҡалар. (М. Усманова, “Башҡортостан” гәзитенән)

***3-сө күнегеү.*** *1908 йылда “Шура” журналында баҫылған Мәжит Ғафуриҙың шиғырын хәҙерге әҙәби башҡорт теленә әйләндерегеҙ. Боронғо төрки телендәге үҙенсәлектәргә иғтибар итегеҙ.*

Бу көндә безләрә зур йәдкәр улды синең рәсемең,
Жиһанда аз туруб күп эш ҡылыб китте синең жисмең.
Унытмаз ҡәдреңде милләт, язар тарих, ҡуйыр һәйкәл.
Муна без афтихәр берлә, ҙекер ҡылдыҡ синең исемең.
Бу си(ү)рәт, ғәйрәтең берлә тарихда зур мәҡәм алдың,
Егерме биш сәнә майдан тутуб, тәхсин мүдәм алдың.
Синең ғәйрәтеңе шәһид дүгелме? Үзеңә душман
Кешеләр ағызыдан “Шамил ҡаһарман” дийә нам алдың. (М. Ғафури)

***4-се күнегеү.*** *Тексты уҡығыҙ. Үҙегеҙҙең шәжәрәгеҙҙе ағас формаһында эшләгеҙ.*

Шәжәрә – ул ырыу тарихы. Борон башҡорттар ырыу ҡәбиләләргә бүленеп йәшәгән, һәр ырыуҙың үҙ исеме булған. Халыҡ элек-электән үҙ ырыуының тарихын яҙып ҡалдыра барған. Шәжәрәлә бөтә ир-ат исемдәре күрһәтелгән. Шәжәрә ғәрәпсә “ағас” тигән һүҙ. Беҙҙең олатайҙарыбыҙ үҙ нәҫелен, ата-бабаларҙың исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Ни өсөн ағас? Сөнки ағас – һауаны, ерҙе, ер аҫтын берләштереүсе

билдә булған. Халыҡтың тормошон сағылдырған. Тамыры – үткәнебеҙ, олоно – бөгөнгөбөҙ, тармаҡ-ботаҡтары – киләсәгебеҙ. (“Етегән” гәзитенән)

***5-се күнегеү.*** *Шиғырҙы уҡығыҙ, уға анализ эшләгеҙ.*

Бәхилләшеп таңда юлға сыҡтым,
Шулай сығыу икән – хаж йолаһы,
Юлыбыҙҙы ҡояш аймап бара,
Балаҫ итеп һалып ал юлағын.
Тәҙрәһенән баҡһам осағымдың,
Быуаттарҙы үтә бағам төҫлө,
Аҡ һөйәге менән бабаларҙың
Күперләнгән кеүек тупраҡ өҫтө.
Кем барышлай ҡалған, кем ҡайтышлай,
Хаж һуҡмағын беҙгә таҡырайтып,
Бөгөнгөләй, йәйғор юлы менән
Тапҡыр булмай барып, тапҡыр ҡайтып.
Йәйәүләп тә ҡибла эҙләгәндәр,
Ғазап сигеп, ҡибла төҙләгәндәр,
Яҙлыҡтырмай изге сығанаҡты,
Киләсәкте беҙҙең күҙләгәндәр.
Төҙләп торғас иман маяҡтарын,
Ни күрһә лә халҡым аҙашмаған,
Сабах намаҙ менән таң ҡаршылап,
Кисен тәре үбеп, алдашмаған.
Егерменсе йөҙҙә ауаз килгән:
Ҡибла тигәнегеҙ ялған, имеш.
Шағирҙар ҙа хатта баҙап ҡалған,
Ҡайҙа, тиеп, Алла, ҡайҙа Иблис.
Әҙәмдәрҙән Алла яһағандар,
Һәм дәһрилек ҡылыс һелтәп елгән.
Ҡәберҙәргә күскән күпме Ҡөрьән,
Аҡ күперҙәр ергә һеңгән...
Һеңгән...
Ҡыйылып та ҡалҡҡан йәш ай – һилал
Үҙ ишкәйен тапмай манарала,
Мәсет-клубта иҫерек йәштәр йыры
Таңға тиклем тынмай, йән яралап.
Иблис йөрөй бейеп араларҙа,

Бейеп йөрөй ҡәбер өҫтәрендә,
Ҡайҙа ла, тип, миңә ишек асыҡ,
Урын бар, тип, һәр кем өҫтәлендә.
Белеүсе аҙ ҡайҙа хәләл, хәрәм,
Инә белмәй ҡыҙын, ата - улын,
Иман осҡан күңел бушлығына
Һәр тарафтан инә шайтан тулып.
Ярлыҡаныу эҫтәп сәфәр сыҡтым,
Киләсәккә төҙләр өсөн Ҡиблам;
Ап-аҡ күпер – аяҡ аҫтарымда,
Юл яңыртып киләм һиңә, Илаһ,
Яҙыҡтарым өсөн илап-илап. (Г. Ситдиҡова)

***6-сы күнегеү.*** *“Тәфтиләү” тарихи йырының тексын уҡығыҙ, был йырҙа ниндәй тарихи ваҡиға тураһында һүҙ барғанын билдәләгеҙ.*

Иҙел буйҡайҙары, ай, ҡаялыҡ –
Полковник Тәфтиләү яу урыны.
Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,
Алтынланды унның яурыны.
Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,
Эйәре лә белмәҫ, ат белә.
Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен
Үҙе белмәһә лә, ил белә.
Ел елләмәй томан, ай, асылмай,
Йыр йырламай күңел асылмай.
Полковник Тәфтиләү түккән ҡандың
Асыуҙары тиҙ үк баҫылмаҫ.
ҡайнап ҡына аҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.
Ир-егеткәйҙәрҙең, ай, өмөтөн
Тәфтиләүҙәр генә быуа алмаҫ.
ҡара ла ғына урман ҡая бите,
Шаулайҙыр ҙа кисен, ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

***7-се күнегеү.*** *Өфө ҡалаһынан тыш Башҡортостандың тарихи баш ҡалаларын иҫләгеҙ. Улар тураһында белгәнегеҙҙе һөйләгеҙ.*

1919 йылдың август башында Башревком (Башҡортостан хөкүмәте) Стәрлетамаҡҡа килеп урынлаша. Билдәле тарихсы Б.Х. Юлдашбаев Стәрлетамаҡ тураһында “фактически стал первой столицей Башкирской Советской Республики” тип яҙа. Ысынлап та, уның менән килешмәй булмай. Йәш Совет Башҡортостанының аяҡҡа баҫыуы тап ошо ҡала менән бәйле. Граждандар һуғышы барған осорҙа Башҡорт Республикаһы хөкүмәте үҙенең төп иғтибарын, тәү сиратта, фронттағы башҡорт ғәскәрҙәрен тәьмин итеүгә, тулыландырыуға йүнәлтә. Августа Бәләбәй ҡалаһында төҙөлгән 3-сө Башҡорт кавалерия полкы Стәрлегә күсерелә, сентябрҙә Троцкий фарманы буйынса Петроградҡа (хәҙерге Санкт-Петербург) ебәрелә. Бында ун меңлек Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө ойошторола. Ошо ғәскәрҙәрҙе тәьмин итеү, тулыландырыу өсөн Башҡорт хәрби комиссариаты Стәрлетамаҡта запас ғәскәрҙәр булдырыу эшенә тотона. Бәләкәй ғәскәрҙәр – ҡалала, ә ҙурҙары Стәрленән алыҫ булмаған ауылдарҙа урынлаша. 1919 – 1920 йылдарҙа Стәрлелә урынлашҡан Башҡортостандың хәрби учреждениелары, ғәскәрҙәре тураһында республиканың Милли архивында документтар һаҡлана. Уларҙан күренеүенсә, республиканың Хәрби комиссариаты Стәрленең Үҙәк урамындағы 148-се йортта урынлашҡан булған. Тимәк, Зәки Вәлиди ошо йортта эшләгән. Стәрлетамаҡ ҡалаһында Башҡортостан хөкүмәте милли мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат, фәнде үҫтереү буйынса эшмәкәрлеген йәйелдерә. Стәрлегә килеү менән Башревком башҡорт һәм урыҫ телдәрендә “Башҡортостан хәбәрҙәре” һәм “Известия Башкирии” исемле хөкүмәт гәзиттәрен сығарыуҙы юлға һала. “Башҡортостан хәбәрҙәре” гәзите мөхәрририәте Стәрленең Баҙар майҙанындағы 46-сы йортта урынлаша, “Известия Башкирии” редакцияһы 62-се йортта эшләй.

Шулай итеп, 1919 – 1922 йылдарҙа Стәрлетамаҡ йәш Башҡорт Совет Республикаһының үҙәгенә, баш ҡалаһына әүерелә. Тап ошонда башҡорт милли мәҙәниәтенең төп институттары – театр, мәғариф, матбуғат, ғилми йәмғиәт, музей, архив үҙ эшмәкәрлеген башлай. (“Башҡортостан” гәзитенән)

***8-се күнегеү.*** *М. Аҡмулланың ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ? Шағир үҙ әҫәрҙәрендә ниндәй темаларҙы күтәргән?*

Аҡмулла... Был исем беҙҙең аңыбыҙҙа күптән инде ысын мәғәнәһендә халыҡ уйына, халыҡтың яҡты идеалдарына, хаҡлыҡҡа һәм ғәҙеллеккә, юғары шиғриәткә тоғролоҡ символына әйләнгән. Аҡмулла тигәнде беҙ бөгөн шиғриәт тип ҡабул итәбеҙ, һәм, башҡорт поэзияһының тарихы тураһында уйлаһаҡ, легендар Салауаттан һуңғы XIX быуат донъяһында иң элек ошо илгиҙәр шағирҙы күҙ алдына килтерәбеҙ.

Шағир һәм фекер эйәһе, мөғәллим һәм атаҡлы мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла үҙенең күренекле замандашы, шағир һәм әҙип, ғалим һәм энциклопедиясы М. Өтөтбаев менән бергә XIX быуат башҡорт әҙәбиәте тарихында, Башҡортостандың шул дәүер ижтимағи фекер үҫешендә ғәйәт ҙур урын тота. Ул үҙ халҡының рухи мәҙәниәте үҫешенә, башҡорт классик поэзияһына бик мөһим өлөш индерҙе. Башҡорт шағиры Аҡмулла, бөйөк әҙиптәргә хас булғанса, ҡаҙаҡ, татар, ҡарағалпаҡ һәм төрки телле башҡа халыҡтарҙың шиғриәтенә лә ғәйәт ҙур йоғонто яһаны. Ул үҙенең яҡты таланты менән ысын мәғәнәһендә шиғри мәктәп тыуҙырҙы һәм уның ижады Башҡортостанда XX быуат башындағы демократик поэзияның үҫеп китеүе өсөн бик мөһим әҙерлек ролен үтәне. Шуның өсөн дә профессор Әхнәф Харисов Аҡмулланы хаҡлы рәүештә “Тукай менән Ғафуриға тиклем булған иң оло һәм бик күбеһенән юғары торған әҙип” тип атай. Аҡмулланың тормош юлы, биографияһы шаҡтай ҡатмарлы. Ғилми әҙәбиәттә һәм архив материалдары нигеҙендә билдәләнгәненсә, буласаҡ шағир 1831 йылдың 14 (яңы стиль менән — 26) декабрендә элекке Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙе, 12-се Башҡорт кантоны, Күлиле Мең олоҫонон (Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. (Миәкә районы Туҡһанбай һәм Сафар ауылдары 1991 йылда Аҡмулла исемендәге колхоз булып ойошто.) Атаһы Камалетдин Ишҡужа улы, әсәһе Бибиөммөгөлсөм Сәлимйән ҡыҙы — икеһе лә аҫаба башҡорттар. Туҡһанбайҙа хәҙерге көндә Аҡмулланың атаһы Камалетдин менән бер туған Ғилман Ишҡужа улының ейәндәре һәм күп һанлы ейәнсәрҙәре, ырыу тармағын дауам итеп, иҫән-һау йәшәп ята. (Р. Шәкүр)

***9-сы күнегеү.*** *Билдәле дин эшмәкәре, мөфтөй Ризаитдин Фәхретдиновтың биографияһын иҫләгеҙ. Ислам дине тураһындағы хеҙммәттәрен анализлағыҙ.*

Риза Фәхретдиновтың төрки донъяһында киң танылған ғалим-мәғрифәтсе булыуы, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Ғилми архивында уның 42 томдан торған ҡульяҙмалары һаҡланыуы күптәргә билдәле. Ошо күп һанлы ҡульяҙмалар араһындағы “Йыуаныс” исемле әҫәре лә уның ижадын өйрәнеүсе белгестәрҙә ҡыҙыҡһыныу уята. “Йыуаныс” – тормош, йәшәйеш, мәҙәниәт, тәрбиә, әхлаҡи-этик һ.б.ш. мәсьәләләр тураһындағы фәлсәфәүи әңгәмәләргә ҡоролған ҡульяҙма энциклопедияны хәтерләтә. Ике өлөштән торған был ҡульяҙма китаптың беренсеһе, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юғалған һанала, уның яҙмышы әлегәсә билдәһеҙ.

Һаҡланып ҡалған ҡульяҙманың төҙөлөшө 54 әңгәмәнән тороп, беҙгә билдәле икенсе өлөшө 25-се әңгәмәнән башлана. Р. Фәхретдинов үҙе был әңгәмәләрен «мәжлес»тәр тип атай. Уның утыҙ өсөнсө һәм утыҙ дүртенсе мәжлестәре ҡунаҡ булыу һәм ҡунаҡ итеү, ашау-эсеү әҙәптәренә арналған. Ғалим-мәғрифәтсе мәжлестәрен үҙе билдәләгән теге йәки был әхлаҡи мәсьәлә тураһындағы философик уйланыуҙарына ҡора. Ләкин был уның субъектив фекерҙәре генә түгел. Уларҙы дәлилләү өсөн автор йыш ҡына Ҡөрьәнгә, төрлө осор бөйөктәренең әйткәндәренә мөрәжәғәт итә, был һылтанмаларына аңлатмалар биреп, килешеүен белдерә йәки, киреһенсә, ғилми бәхәс ҡора. (Г. Абдрафиҡова)

***10-сы күнегеү.*** *Әсәй тураһындағы мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, уларҙы хәҙистәр менән сағыштырығыҙ, уртаҡ яҡтарын билдәләгеҙ.*

Әсәһеҙ ғаилә – һүнгән усаҡ. Әсә янында бала етем булмай. Әсәһен ҡәҙерләгән ҡәҙерле булыр. Ҡояш – яҡтылыҡ, әсәй – бәхетлек. Әсәйгә бөтә балалар ҙа бер. Әсә йөрәге ҡояштан да нығыраҡ йылыта. Ҡош яҙға ҡыуана, бәпес – әсәйгә. Һәр әсәгә үҙ балаһы яҡын. Әсәйҙән дә яҡын иптәш юҡ. Ата-әсәһенә ҡәҙер күрһәтмәгән – үҙе лә изгелек күрмәç. Ағасына күрә алмаһы, әсәһенә күрә балаһы. Атаны күреп ул үçер, әсәне күреп ҡыҙ үçер. Астан үлһәң дә, ата-әсәңде ташлама.

***11-се күнегеү.*** *Башҡортостан тураһындағы шиғырҙы тасури уҡығыҙ, унда осраған йылға исемдәренә иғтибар итегеҙ. Ни өсөн автор йылға исемдәрен ҡуллана?*

Сөн ярынан алыçтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баçыу аҡты.
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты:
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты.
Башҡортостан бында башлана!

Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктә тулай,
Яҙ айында һабан турғайындай:
– Башҡортостан бында башлана!

Башҡортостан мине ҡаршы ала,

Ҡайтһам, һыуҙар кисеп, ил урап,
Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй,
Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура.

– Республикам, бына башландың! — тип
Әйткәнемдә, ергә ҡапланып,
Ишетәмен ерем ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын:

– Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,
Юшатырҙан Әйгә ҡәҙәрле
Йәйрәп ятҡан ерҙең күңеленә
Һәр ҡарышы,
Һәр ҡарашы, беләм, ҡәҙерле.

Ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә,
Берсә көлөп, берсә уйланып.
Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым.

Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам!
Юлдар һеҙҙе ҡайҙа ғына илтмәй,
Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа ташламай...

Ә мин мәңге бында — Уралымда,
Тик булмышым инде өр-яңы:
Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны.

Моң-шатлығын илдең тигеҙ күреп,
Ил алдында һүҙен тиң әйтеп,
Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп.

«Башҡортостан!» — тиеп, улдарыма
Алыҫ ҡитғаларҙа ҡарай ер.
Кешем намыҫында кер күрһәләр,
Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр.

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек — Башҡортостан кеүек,
Был донъяға тура ҡарарлыҡ. (Р. Бикбаев)

***12-се күнегеү.*** *Полиглот Вячеслав Чернев егерменән ашыу тел белә, шул иҫәптән бик яҡшы башҡорт телендә һөйләшә. Уның башҡорт телен өйрәнеү тураһындағы тексты уҡығыҙ, үҙ фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.*

Беренсенән, һүҙҙе тарихи башҡорт ерҙәре иҫәпләнгән Ырымбурҙа тыуып-үҫеүемдән башларға кәрәктер. Башҡорт, ҡаҙаҡ, татар балалары менән бергә уйнап үҫтем. Математика уҡытыусым татар апайы ине. Уның ярҙамында мин татарса өйрәндем. Һигеҙенсе синыфта уҡығанда ҡулыма ике битле гәзит килеп эләкте. Мин уны уҡып сыҡтым, аңланым, ләкин күп һүҙҙәр мәғәнәһе буйынса бер-береһенә яҡын булһа ла, татарса түгел икәненә иғтибар иттем. Уҡытыусыма күрһәткәйнем, ул был гәзиттең башҡорт телендә нәшер ителгәнен әйтте. Ниңәлер, был тел үҙенә йәлеп итте лә ҡуйҙы. Интернеттан башҡорт грамматикаһы китабы табып алып, уның ярҙамында телде үҙләштерергә керештем. Башҡорт Википедияһын уҡып, ундағы мәғлүмәттәрҙең йөкмәткеһенә төшөнөргә, уларҙы тәржемә итергә маташтым. Бер аҙҙан үҙем дә башҡорт телендә мәҡәләләр яҙа башланым, мәғлүмәт өҫтәргә ғәҙәтләндем. Беренсе эшем “Башҡорт әлифбаһы” мәҡәләһенә өҫтәмәләр индереү булды. Тәүҙә бик хаталы яҙа инем. Башҡорт телле интернет ҡулланыусылар, хаталарымды билдәләп, нисек дөрөҫ яҙырға икәнен аңлатты. Оҙаҡламай үҙем дә күп хаталарҙан арындым. Бөгөн мәктәптәрҙә сит телдәрҙе өйрәтеү өсөн һүҙҙәрҙе ятлатыу системаһы өҫтөнлөк итә. Йәғни, уҡыусыларға яңы һүҙҙәр бирелә, ул киләһе дәрескә шуларҙы ятларға, иҫтә ҡалдырырға тейеш. Әммә тел һүҙҙәрҙән генә тормай. Унда грамматика, синтаксис, морфология, башҡа бүлектәр бар, йәғни сит телде өйрәнгәндә иң мөһиме – аралашыу. Мин башҡорт телен өйрәнгәндә грамматика, тел төҙөлөшө тураһында бер нисә китапты уҡығас, ҡағиҙәләрҙе хәтеремдә ҡалдырып, Википедияла, “Бәйләнештә”, башҡа проекттарҙа аралашҡанда ҡулланырға тырыштым. Грамматика яғынан ҡараһаҡ, башҡорт теле урыҫ теленән ныҡ ҡына айырыла бит инде. Тәүҙәрәк һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушыу миңә ҙур ҡыйынлыҡ менән бирелде. Хәҙер инде хатаһыҙ яҙам һәм һөйләшәм, тип тулы ышаныс менән әйтә алам.

Мәктәпте тамамлап, Ырымбур педагогия униврститетының сит телдәр факультетының инглиз-француз бүлегенә уҡырға ингәйнем. Ул ваҡытта тәржемәсе булырға хыяллана инем. Ниндәйҙер кимәлдә фән өлкәһендә лә эш алып барылды. Шунан Википедияның хакимы (администраторы) булып киттем. Тап шул мәлдә минең турала ишетеп, Башҡортостан юлдаш телеканалы журналистары Ырымбурға, беҙҙең университетҡа килде һәм мин тәүге тапҡыр башҡорт телендә интервью бирҙем. Шул осорҙа балалар яҙыусыһы Гүзәл апай Ситдиҡова менән таныштым. Минең башҡорт теле менән ныҡлап ҡыҙыҡһынып китеүемдә уның йоғонтоһо ла тос булғандыр, тип уйлайым. (В. Чернев)

***13-сө күнегеү.*** *Суфыйсылыҡ әҙәбиәте тураһында булған өҙөктө уҡығыҙ. Ниндәй башҡорт суфый шағирҙарын һәм уларҙың әҫәрҙәрен беләһегеҙ?*

Суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең ике йүнәлеше лә урта быуаттарҙа уҡ Башҡортостанға үтеп инә. Был, әлбиттә, Урал-Иҙел буйында ислам динен таратыу, Көнсығыш тибындағы уҡыу йорттарын киңәйтеү менән тығыҙ бәйлелектә барған. М. Өмөтбаев билдәләүенсә, Әхмәт Йәсәүиҙең исеме Ағиҙел буйҙарында XIII—XIV быуаттарҙа уҡ билдәле булған, үҙе тураһында риүәйәттәр таралған. С. Баҡырғаниҙың “Баҡырған китабы”, “Ахыры заман китабы”, “Хәҙрәте Мәрйәм китабы” кеүек әҫәрҙәре, XIX быуатта баҫмала донъя күргәнгә тиклем, электән үк башҡорттар һәм татарҙар араһында ҡулъяҙма рәүешендә йөрөгән. Ә инде суфыйсылыҡ тәғлимәтенең юғарыла һанап кителгән тәүге фиҙакәр эшмәкәрҙәре хаҡындағы ҙур булмаған фәһемле йә ғибрәтле яҙма сюжеттар айырыуса күпләп осрай. Уларҙың ҡайһы берҙәренең беҙҙең яҡ төбәктәрҙә ижад ителеүе лә бик ихтимал. Сөнки уларҙың изге ниәттәре һәм ғәмәлдәре беҙҙең яҡтарҙа ислам дине тарала башлаған ваҡыттағы шарттарға тап килеп тора, улар ҡатнашлығында һүҙ барған хәл-ваҡиғаларҙан, тасуирланған ер-һыу, тәбиғәт күренештәренән, һынландырылған образдарҙан Урал-Иҙел төрки ерлеген дә шәйләргә мөмкин. Парсаға тартым ҡыҫҡа күләмле, хикмәтле сюжеттарҙа тасаууыфтың арҙаҡлы зыялылары кеше тормошондағы ыңғай күренештәрҙе яҡлаусылар булып кәүҙәләнә. Хәсән Басрый ас шәкерткә үҙенең күмәсен биргән бер ирҙең бәләнән ҡотолоп ҡалыуына булышлыҡ итә (“Шәкерткә яҡшылыҡ итеүҙең файҙаһы”), үҙенең хуш ғәмәле менән кафырҙы иманға килтерә (“Күрше хаҡы”). Ибраһим Әҙһәм ҡиссаһының береһенән-береһе фәһемлерәк бер нисә варианты йөрөй. Рабиға Ғадәфия исеменә бәйле бер парсала ҡатын-ҡыҙҙың туғыҙ өлөш нәфсене еңер бер өлөш аҡылына дан йырлана (“Аҡыл вә нәфсе

кимәле”). Баязит Бистами шайтандарҙы, иблистәрҙе үҙ ихтыярына буйһондора; улар ошондай шәхесте хурлыҡҡа ҡалдырырға тейеш түгел, юғиһә, һинең менән беҙ нишләрбеҙ, тигән һорау ҡуйыла; был суфыйға бәйле тағы рух юғарылығы, алла ризалығы өсөн изге эштәр ҡылыу мәсьәләләре ҡуҙғатыла (“Ахирәт ғәмәлдәре һәм донъя эштәре”, “Баязит Бистами менән шайтан”, “Аҡыл менән нәфсе айырмаһы”, “Алла ризығы өсөн”). Мансур әл-Хәлләж намыҫҡа, Аллаһы Тәғәләгә тоғролоҡтоң өҫтөнлөгөн раҫлай (“Биш шаһит”). (М. Иҙелбаев)

***14-се күнегеү.*** *Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ, ундағы сағыштырыуҙарҙы билдәләгеҙ.*

Иманды күңел менән ҡеүәтләп тороу – ағастың тамыры. Иманды телең менән әйтеп, ғәмәлдәрең менән нығытып та тороу – ағастың олоно, ботаҡтары, сәскәләре, емештәре. Яҡшы ағас татлы емешен күп итеп биреп торған кеүек, сәләмәт тамырҙар ҙа игелеккә сәбәп кенә булып тора. Донъя тормошо – төш кеүек кенә. (С. Суҡбаев, Н. Ниғмәтуллин)

***15-се күнегеү.*** *Башҡорт тел белемендә һуңғы йылдарҙа актив үҫешкән тармаҡтарҙың береһе булып лингвокультурология фәне тора. Лингвокультурология фәнендә ислам мәҙәниәтенең сағылыш тураһында үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.*

Хәҙерге заман мәктәптәренә ҡуйылған талап буйынса, уҡыусы һәр тарафта киң ҡарашлы, уҡымышлы булырға тейеш. Ә уҡыусыны уҡымышлы итеүҙең берҙән-бер ҡоралы ул – тел. Тел – кешенең аралашыу ҡоралы. Уның ярҙамында үҙенең уй-фекерен белдерә, быуаттар буйына йыйылып килгән милли мәҙәниәтен, тарихын донъя кимәленәсә күтәрә. Ләкин һәр милләттең мәҙәниәтен тулы кимәлдә өйрәнеү мөмкин түгел, сөнки донъя халыҡтарының мәҙәни байлығы шул тиклем күп һәм төрлө. Ә шулай ҙа үҙен белемле һанаған кеше һәр милләттең мәҙәниәтен өлөшләтә белергә тейеш.
Тел һәм мәҙәниәт бер-береһе менән тығыҙ бәйләнешле дөйөм тарихи-ижтимағи күренеш. Мәҙәниәт – быуындан-быуынға тапшырыла килеүсе, телдә,коллектив һәм индивидуаль аңда һаҡланыусы ҡиммәттәр системаһы ул. Ғалимдар раҫлауынса, тел – этник һәм мәҙәни аңдың ойошторoccыһы, уның семиотик системаһы. Шулай булғас, тел һәм мәҙәниәттең үҙ-ара бәйләнешен, конкрет телдең мәҙәни ҡиммәттәрен тулы кимәлдә сағылдыра алырҙай фән өлкәһен лингвокультурология тип атау мотлаҡтыр. Лингвокультурология – лингвистиканың һуңғы осорҙа барлыҡҡа килгән

тармағы, асылда ул милли тел менән этник мәҙәниәтте бер бөтөн күренеш итеп өйрәнеүсе өлкә. Шуныһы мөһим: лингвокультурология йәнле коммуникатив процесты, тел һәм мәҙәниәтте уларҙың синхронияһында өйрәнә. Тимәк, лингвокультурологияның методологияһы, беренсе сиратта, түбәндәгеләр менән билдәләнә:

1) мәҙәниәт – тел кеүек үк, кешенең объектив донъяны ҡабул итеү ысулы;

2) тел һәм этник мәҙәниәт – бер-береһенән айырылғыһыҙ күренеш;

3) телдең лексик байлығы – теге йәки был халыҡтың мәҙәниәтен саҡылдырыусы уникаль күренеш.

Шуныһы мөһим: лингвокультурология Рәсәй мәғариф системаһында барған үҙгәрештәр, лингводидактиканың заманса алымдарға, концепцияларға нигеҙләнгән дәүерендә айырыуса актуаль. Әйтәйек, башланғыс дөйөм белем биреүҙең Федераль стандарттарында: “Туған телдәрҙе өйрәнеү уҡыусыларҙың тел компетентлығын, коммуникатив, диалогик, монологик телмәр һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән. Туған телдә уҡыу барышында уларҙың телмәре,мәҙәнилеге,туған тел менән ҡыҙыҡһыныуы, традицияларға һаҡсыл ҡарашы формалаша”, – тиелгән. (Л. Баймөхәмәтова)

## Тәкдим ителгән әҙәбиәт исемлеге


1. Псәнчин В. Ш. Риторика нигеҙҙәре.– Өфө: Китап, 2001. – 200 бит.

2. Псәнчин В. Ш. Телдең күркәмлек саралары. Күнегеүҙәр менән. - Өфө: Китап, 2003. – 192 бит.

3. Юлмөхәмәтов М. Б., Раҡаева Ә. С, Шарапов И. Ә.Башҡорт теле һәм телмәр мәҙәниәте. Башҡорт теле туған тел итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениелары әсән дәреслек. — Өфө: Китап, 2008. – 248 бит.

**Тагирова С.А., Куланчин А.Ю.,**
**Акбулатова Р.Т., Хабибуллина З.А.**

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК ДЛЯРЕЛИГИОЗНЫХУЧЕБНЫХ ЗАВЕДЕНИЙ

Лиц. на издат. деят. Б848421 от 03.11.2000 г. Подписано в печать 27.05.2020.
Формат 60Х84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman.
Отпечатано на ризографе. Усл. печ. л. – 4,5. Уч.-изд. л. – 4,3.
Тираж 10 экз. Заказ № 830

СП БГПУ 450000, г.Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а